*Зиннур УРАҠСИН*

# Тәҙрә уйыусы*

**повесть**

*— Кеше ниңә тәҙрә уйған?*
*— Ҡояш күрер өсөндөр.*
*— Кеше ниңә ишек уйған?*
*— Кеше керер өсөндөр.*
Рауил Шаммас,
“Тәҙрә уйҙым, ишек ҡуйҙым”

## 1. Ҡарындыҡ тәҙрә аша төшкән яҡтылыҡ

Бәкәтәр — Һаҡмарҙың түбәнге ағымындағы иң ҙур башҡорт ауылы. Уның икенсе атамалары — Собханғол, Йәнсура — ошо ергә тәүләп төйәкләнгән оло Үҫәргән ырыуы кешеләренең исемдәре. Бәкәтәр — ауыл янындағы күл атамаһынан, уның ни аңлатҡаны әлегә билдәһеҙ булып ҡала.

Ауыл мәшһүр Урал һырттарының, яҫмыҡ Гөбөрлө тауҙарының ос-моттары бөтөп, далаға тартҡан ерҙә урынлашҡан. Тирә-яғындағы һөҙәк тау түмәләстәре ялбыр башлы ҡылған, ҡаты бүтәгә, итәктәре һутлы ҡарағура менән ҡапланған. Һаҡмар буйы суҡ өйәңке, эре тирәктәр, ҡарама, ҡара ерек үҫкән ҡуйы туғайлыҡ, туғайында муйыл, балан, бөрлөгән, ҡара ҡарағат умырылып үҫә. Был яҡтағы халыҡ борон-борондан емеш-еләк йыйыуға әүәҫ. Ҡаҡ ҡойоу, киптереү, һутын һығыу менән дә шөғөлләнә. Ҡыйығында яҙға тиклем ҡыҙыл балан түмәрҙәре аҫылынып тормаған өй юҡтыр.

Ауылдың төньяҡ-көнбайыш осона ғына урманһыҙ, дала яғына хас асыҡ һырт килеп терәлә. Йәй көндәре ҡояш шул яҡтан ҡалҡа ла,

---

* Был әҫәремдең исемен билдәле яҙыусы һәм ғалим Әнүр Вахитов тәҡдим иткәйне. Мин уға тәүге башҡорт алфавитын төҙөүсе, телсе-врач, күренекле дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтхан Ҡулаев хаҡында һөйләгәйнем һәм уның тураһында берәй әҫәр яҙырға теләүем тураһында ла белдергәйнем. Әнүр: “О, шәп! Халыҡҡа яҙыу тәҡдим итеү — ул бит яңылыҡҡа, яҡтылыҡҡа күҙен асыу, тәҙрә уйыу”, — тине. Шөкөр, ошо әҫәрҙе яҙҙым. Фактик материалды Өфө ғилми үҙәге архивынан туп-ланым. Был эштә миңә архив хеҙмәткәре Рәмилә Сибәғәтова ҙур ярҙам күрһәтте. Уға рәхмәтлемен. Профессор Салауат Ҡасимовтың “Автономия Башкортостана” (Уфа: Китап, 1997) исемле китабы, шулай уҡ профессор Билал Юлдашбаев төҙөгән “Национально-государственное устройство. Башкортостан: Документы и материалы”. Т.1 (Уфа:Китап, 2002) документаль йыйынтығының файҙаһы ҙур булды.

*Автор.*

Һаҡмар буйындағы эре ағастарҙың башына ҡуна, шунан һуң ғына урам уртаһындағы мәсет манараһына күсә. Бара-бара ҡабыҡ менән ябылған өй түбәләренә шыла, ихаталарҙы ураткан ситәндәргә ята.

Араталы ҡапканан ике малай йүгерешеп килеп сыҡты, алдараҡ сыҡҡан бәләкәйерәге башлап һөрәнләне:

— Ағай, Һаҡмарға барабыҙмы?

— Ҡаранйылға тамағына барайыҡ. Унда балыҡ яҡшыраҡ ҡаба торған.

— Селәүҙе ҡайҙан алабыҙ?

— Юл буйында тиреҫлек бар бит, шунан алырбыҙ. Һин селәүгә ҡаптыр, мин сиңерткә менән ташлайым. Ажау сиңерткәгә ҡаба торған.

Малайҙар ҡалай банкаға ҡыҙыл селәүҙәр, сиңерткәләр һалып алдылар ҙа ятыу ярына ҡунаҡланылар.

— Ҡара, ҡара, Мөхәмәтхан, ажау ҡарпый. Шунда ҡармаҡты мин ташлайым әле. Һин ситкәрәк һалһаң да ярар.

— Балыҡ, ҡап-ҡап, яр башында ялтырап ят, үҙеңдән ҙурҙы бište тап! — тип ергә һуғып алды тәүге балыҡты ағаһы. Бәләкәй малай ҙа бер ҡыҙылғанат тартып сығарҙы. Шыйыҡ талды әрсеп, теҙгес итеп, балыҡтарын шунда айғолағынан эләктереп, һыу ситенә һалып ҡуйҙылар.

Малайҙар бер теҙгесте балыҡ менән тултырыуға оло юлдан был яҡҡа пар ат егелгән көймәле арба боролдо. Ҡыңғырауҙары зыңлап килә. Аттары шәп, еләләр генә. Былар, ҡармаҡтарын тартырға онотоп, юлдан туҙған саң болотона ҡарап ҡалдылар.

— Әйҙәгеҙ, ағайҙар, Ҡыуат кантон ҡайтты! Их, арбаһы, их, аттары! Икеһе лә ҡара, йып-йылтыр. Еҙ, көмөш тәңкәләр баҫылған.

Малайҙар Ҡаранйылғаның ятыуына сума һалып ҡына сыҡтылар ҙа, теҙгестәге балыҡтарын алып, ауыл яғына саптылар.

Әсәләре ҡаршы сығып тора ине:

— Ай, уңғандарым, күпме балыҡ тота һалғандар. Йыуып, тоҙлап, киптерергә ҡуйып тороғоҙ! Кискә ҡурып бирермен.

Уландар, балыҡтарын да онотоп, Ҡыуат кантондың арбаһын, аттарын ҡарарға ашҡыналар ине.

Кантондың аттары туҡтаған ишек алдына бала-саға тулып киткән. Улар, аттарҙы, арбаны ҡарап туйғас, асыҡ тәҙрәгә алыҫтан ғына күҙ һала башланылар. Өй эсенән яңы ҡымыҙ, ит еҫе аңҡый. Түр башында аяғын бөкләп, яҫы яурындарына уҡалы эполеттар һалған күк костюм кейгән ят кеше ултыра. Ошолор инде Ҡыуат кантон тигәндәре. Бына ул кителен сисеп элде, мунсаҡлы аҡ күлдәгенең түшен ысҡындырып ебәрҙе. Тумбыҡ йөҙө, муйындары тулышып, ҡыҙарып тора. Уның бер яғында ултырған йоҡа ғына ҡурайсы көй һайлап маташа. Икенсе яғында яурынтаҡ оло ир — Мөхәмәтхандың ҡартатаһы Муса ултыра.

— Туғыҙынсы кантон икегә бүленде, — тип бик мөһим хәбәр башланы Ҡыуатов, — үҫәргәндәрҙең яртыһы, йәғни беҙҙең яҡтар, Ҡыуандыҡ тауының арғы яғындағылар, алтынсы кантон булып китте. Беҙ инде бер нисә ҡыпсаҡ ауылы менән бергә туғыҙынсы кантонда ҡалдыҡ.

— Ул бүленеш беҙгә, йәғни үҫәргәндәрҙең иң ҙур араһы сураштарға, ни бирер икән? — тип һорайһы итте Муса ҡарт, һаман шул йорт ҡайғыһынан бушана алмай.

— Бигерәк ҙур ине шул ул туғыҙынсы кантон, бер йөрөп сығыр өсөн генә бер йәйең китә. Хәҙер ҙә әле түңгәүерҙәрҙең Йылайыр буйындағылары беҙгә ҡарай. Бүленеш идараны еңеләйтеү өсөн инде.

— Әлеге түрә-кара ишәйә инде, — тип ҡыҫылды йәнә Муса ҡарт.

— Кантонда именлекме һуң, Ҡыуат туған? — тип һорайһы итте өй хужаһы.

— Имен дә ул, мынау Һаҡмар аръяғына казачий татарҙарҙың күпләп күсерелеүе эсте бошора. Шул беҙҙең ергә ҡыҫылалар бит һаман. Һарыҡташ, Рәдүт, тағы әллә ниндәй ҙур-ҙур станицалар нигеҙләнеләр. Нығытмалар ҡоралар. Урыҫ казачийҙары менән бер хоҡуҡталар бит.

Муса ҡарт йәнә түҙмәне.

— Уларҙы бер төрлө ҡыҫырыҡлап булмаймы ни?

— Булмай шул. Батшалыҡ исеменән ерҙе губернатор уларға үҙе бирә бит. Ил алдындағы хәрби хеҙмәттәре өсөн, ти. Күбеһе аҡһөйәк исемен дә алған.

— Шул-шул. Әлеге башҡорттоң арҡаһына ҡаҙаласаҡ бысаҡ бит ул.

— Һаҡмарҙың уң яғына ла сыға башлар әле улар. Ҡыҙ биреш, килен алыштар башланыр. Үҙеңә туған-ырыуға әйләнһәләр, ни эшләй алаһың?

— Бер ҙә ҡаҙаҡ далаһына ынтылмайҙар бит әле. Башҡорт еренә ылығалар.

Был һөйләшеү ваҡыт-ваҡыт ҡурайсының сыңғыратып уйнап ебәреүҙәре менән алмашынды, артыҡ һөйләшмәй, шаулашмай ғына ашап алдылар. Бауырһаҡ, ҡорот, ҡыҙыл эремсек менән сәй эселде.

Туғандар, ауылдаштар менән күңелле генә осрашыу, һөйләшеү аҙағына етеп барғанда, Ҡыуат кантон Муса Ҡулаевҡа шыпырт ҡына өндәште:

— Муса ағай, әҙ генә артҡа ҡалып тор әле, әйтәһе һүҙ бар.

Муса Ҡулаев терт итеп ҡалды, шулай ҙа был юлы өндәшмәй түҙҙе, һораулы ҡарашын ғына кантон начальнигынан алманы.

— Муса ағай, һиңә Ырымбурҙан эҙләү ҡағыҙы килде. Ауылдан сығармаҫҡа ҡушҡандар. Шуны һиңә әйтергә тип ҡайттым. Һин бөгөн үк ысҡын ҡаҙаҡ яғына, юғал.

Муса ҡарттың ауыҙы асылып ҡалды.

— Иртәгә һуң булыр. Артыңдан киләсәктәр. Һинең утыҙ бишенсе йылғы үҫәргәндәрҙең болаһында ҡатнашыуың ғына түгел, шуның бер етәксеһе булып йөрөүең дә билдәле. Әле килеп сыҡҡан шул. Батшалыҡтың өсөнсө бүлеге йоҡламай икән. Башыңды алып ҡас, ағай. Ярай, хуш бул!

Әлеге ер өсөн сыҡҡан боланың башында йөрөгәйне шул. Башҡа кантондарҙы ҡыҫып өлгөрҙөләр, юғиһә, тотош ил сыуалышына әйләнә яҙҙы. Хәрби хеҙмәт ауырлығына, ғәскәр өсөн бөтә сығымды башҡорттар өҫтөнә һалыуға ла ҡаршылыҡтар булды. Үлтерештәргә үк барып етмәһә лә, губернаторға билдәле булды был.

Муса ҡарт Ҡаһарман Ҡыуатовҡа рәхмәттәрен уҡып, әбейе, улы Сәхипкирәй, килене Йәнифә менән шым ғына хушлашты ла, ҡар ireп төшкәс тә, Яйыҡ аръяғына, ҡаҙаҡтар араһына, хужалыҡтағы ике атының береһен менеп, сығып та китте. Ошо китеүҙән ул ҡабат әйләнеп ҡайтманы. Ҡаҙаҡ араһында юғалды.

Уны, Ҡыуат кантон әйткәнсә, иртәгеһен үк килеп, таптырып йөрөнөләр. Улы менән әбейе: “Аҙна элек баҙарға киткәйне, шунан бирле юҡ, әллә бер ерҙә үлеп ҡалды, әллә үлтерҙеләр, әллә Эйек буйындағы туғандарҙа ҡунаҡ булып йөрөй”, — тип, белмәмешкә һалышып, бер хәбәрҙе һөйләп тик торҙолар.

Кантон Ҡыуат килгән көнөндә үк Буранғол янына кире шылды. Йоҡлап ҡалһа, үҙенә лә шик төшөүҙән ҡуркты, ахыры.

Балалар ҡартаталарының өйҙән баҙарғамы, ҡунаҡҡамы йыш китеп йөрөүенә күнегеп бөткәнгә, был юлы ла уның ҡайтып инеүен түҙемлек менән көттөләр. Муса ҡарт ҡайҙа барһа ла уларға күстәнәс алып ҡайтып, өйрәтеп бөткән.

Ошо йылдың көҙөндә Мөхәмәтхан да уҡырға төштө. Үҙҙәренә өс өй аша ғына булған мәсеттәге мәҙрәсәгә йөрөй башланы ул, Сәхипкирәй уны мулла ҡарамағына тапшырғанда башҡорттоң ғәҙәттәге һүҙен ҡабатланы.

— Ите һиңә, һөйәге миңә, мулла абзый, Ҡулаевтар нәҫеленән дә берәй уҡымышлы кеше сығыр, бәлки, улым отҡор ғына күренә.

— Тыңлаулы булһын. Белем башы — тыңлауҙа, — тине мулла тәрән мәғәнәле итеп.

— Һинең ҡарамаҡта инде, мулла абзый. Сыбыҡтан өлөшкә ынтылмаҫ, тип уйлайым.

— Иншалла, шулай булһын.

Шул һүҙҙәрен әйтеү менән мулла ишек башына ҡыҫтырылған шыйыҡ сыбыҡтарға ҡарап ҡуйҙы. Уның уйын Сәхипкирәй аңланы, шулай ҙа өндәшмәне.

Мөхәмәтхан ысынлап та отҡор булды. Ай ҙа үтмәне, хәреф исемдәрен, ҡуйылыш тәртибен ятлап алды: әлеп, би, ти, си, эрә, зи, йем, хи... Быларҙы ул еңел ҡабатланы, яҙылышты үҙләштереү ауырыраҡ ине, сөкөн, тәждиттәре, һүҙ башында, һүҙ аҙағында ҡуйылыштары буталсыҡ булды. Һанауҙы ла еңел аңланы. Һеңлеһе Фатима ла, ағаһының атаһы менән уҡыу, хисап эштәрен ҡысҡырып башҡарыуын тыңлап, күп нәмә белеп ҡалды.

— Атай, нишләп был яҙыу шулай ауыр ул? — тип һорап ҡуйҙы малай.

— Уҡыу ул, улым, майлы бутҡа ашау түгел. Беҙҙең изге китабыбыҙ "Ҡөрьән" шул яҙыу менән яҙылған.

— Анау аҫҡы, өҫкө һыҙыҡтары булмаһа, бәлки, улай уҡ ауыр булмаҫ та ине.

— Тырыш, улым. Яҙыуҙы бик аҡыллы кешеләр уйлап тапҡан. Бөтәһе лә еңел булмай.

— Ана, хисап еңел генә бит, һандарҙы яҙырға ла тиҙ өйрәндем. Мулла бабай хәреф өсөн әрләй, Ғәлиәнгә сыбыҡ менән илатҡансы һуҡты.

— Ярар, тырыш, балам, — тип ҡыҫылды ҡашығаяҡ яғында йөрөгән әсәһе лә. Ул да был баланың быndай һорауҙар биреүенә аптырай ине.

Ә бәләкәй Мөхәмәтхандың яҙыу тураһында үҙе лә аңламағанса килгән тәүге уйы ине. Атаһы менән әсәһе баланың был уйы уның мейеһенә мәңгегә һеңеп ҡалыр, уға ғүмерлек бер тынғы бирмәҫ мәшәҡәтенә әйләнер, тип һис уйламай ине.

Өҫтәл артында яҙыу өйрәнеп ултыра торғас, малайҙың күҙҙәре семәрләнеп китте.

— Әсәй, ништәп беҙҙең тәҙрәнән яҡтылыҡ әҙ төшә ул? Мәсеттә ҡайһылай яҡты, рәхәт.

— Эй, улым, беҙҙең тәҙрә ҡарындыҡ бит, мәсеттә быяла ҡуйылған. Шуға яҡты ул, балам.

— Ништәп беҙ ҙә быяла ҡуймайбыҙ?

— Ҡуйырбыҙ, Алла бирһә. Быйыл көҙгә атайың тананы һуйып, яҡшы ғына һата алһа, быяла ҡуйҙырам, тип хыяллана ине.

— Эх, өй эсе яҡты булһа, мин әлепбейҙе тиҙерәк өйрәнер инем.

— Уҡы, балам, уҡы, мәсеттә ҡала биреп уҡып ҡайт.

— Юҡ шул, беҙҙең һабаҡ бөтөүгә өйлә намаҙы башлана. Ололар килә.

Шул арала ҡарындыҡ тәҙрә кемдер тырнаған кеүек ҡаптыр-ҡоптор килә башланы.

— Кит, себә! Ләғнәт төшкөрө! — тип ҡысҡырып ебәрҙе әсәһе, тәҙрә төбөнә уҡлау менән шап-шоп һуғып алды. — Бар, улым, ҡурҡытып ебәр әле шул Муйнаҡты, ҡарындыҡтың еҫенә килә, мәлғүн. Майы кибеп бөтмәгән, ахыры. Таяҡ менән бәргелә, ҡабат килмәҫлек ит.

Мөхәмәтхан йүгереп тышҡа сыҡҡанда, эт ҡапҡа төбөндә тора ине инде. Сағыу ҡояш яҡтыһында малайҙың күҙе бөтөнләй күрмәй торҙо.

— Беҙ өйҙә юҡ саҡта ашап ҡуймаһа ярар ине, — тип һөйләнде һаман Йәнифә, өй эсенән сыҡмай ғына.

Иң бәләкәй улдары мәҙрәсәнән ҡайтыу менән атаһы, уның шырт сәстәренән йомшаҡ ҡына һыйпап:

— Йә, улым, бөгөн ниндәй хәрефте уҡырға, яҙырға өйрәндең? — тип ҡаршы алды. Малай атаһын ҡыуандырып, уҡып та, яҙып та күрһәтте.

Әсәһе инде уның арҡаһынан туп-туп иттереп ҡағып:

— Бөгөн ниндәй доға өйрәндең? — тип һораны.

— “Әлхәм”де ятланыҡ, әсәй.

— Йә, һөйләп күрһәт әле.

— “Әғүҙе билләһе минә шайтан разим”, — тип башланы уны бер доға көйөнә һуҙа биреп.

— Шәпһең, улым, шәп. Мулла булырһың, ахыры, һин. Ятҡа бик тиҙ бикләйһең.

— Юҡ, әсәй, мин мулла булмайым.

— Ништәп улай тиһең, балам?

— Уның сыбығы бар, малайҙарға һуға. Мин быны яратмайым.

— Кем булырһың икән һуң, балам?

— Мин кантон булам. Көймәле арбам була, ат егеп йөрөйөм. Үәт!

— Иншалла!

Малайҙарҙың өйөнә мәсет яҡын булыуы файҙаға ине. Рәжәп тауы яғынан иҫкән ыжғыр елле ҡышҡы көндә лә һырмаларын кейеп, йорон кәпәстәрен баштарына ҡаплайҙар ҙа мәсеткә йүгерәләр, дәрес ҡалдырыу юҡ. Арғы урам малайҙары былдай көндәрҙә мәҙрәсәгә килмәй ҡала. Әлеге кейем-һалым юҡлығы бәкәлгә һуға инде. Мөхәмәтхан бер үҙе, мулла яңы һабаҡты уҡытмаһа ла, элеккеһен ҡабатлап, белемен нығытып ҡайта. Шуға ла отҡорлоғо менән дә уҡыуҙа алданыраҡ булды, мулла бабай ҙа маҡтап алһа, тиҫтерҙәре бының өсөн уны яратып еткермәне, тәнәфес ваҡыттарында ҡағып-һуғып, этеп-төртөп барҙылар, аҡыллыраҡтары ихтирам итте, унан һабаҡ өйрәнергә лә тартынманы. Был инде малайҙың сәменә тейә торғайны.

Ел Һаҡмар яғынан өрһә инде, бейек өйәңке, ялбыр тирәк баштары геүләп, һелкенеп кенә ултыра, ҡар тура яуа, көн йыш ҡына имшетеп, йылыға тартып ала ла китә.

Балалар көндәлек уҡыу мәшәҡәттәре, ололар донъя хәстәрҙәре менән булып, яҙға ла барып сыҡтылар.

Ташҡан һыуҙар тартылып, ярҙарына ултырып та бөтмәҫтән, тау һырттары келәм япҡандай йәшәрҙе, былтырҙан ҡалған ҡылғандар ҙа, аҡ төҫөн юғалтып, йәшел һабаҡтар ебәрҙе.

Бындай көндәрҙә бала-сағаны өйҙә түгел, мәҙрәсәлә тотоуы ла ҡыйын ине. Төркөм-төркөм булып сәкән һуғалар, ат йөнөнән үҙҙәре йомарлаған туптар менән соҡор туп, гәри туп уйнайҙар. Әрһеҙерәктәре йомранға сыға. Мөхәмәтхан да синыфташы Ильяс менән көндөҙ мәҙрәсәгә барманы, иртәндән Ҡансыра йылғаһы аръяғындағы тау буйына йомран тоторға сыҡты. Йомрандарҙың ояларынан сығып, ҡояшта йылынып ята, һыҙғырып ултыра торған сағы, яланда һыу күп әле. Былар инде бик тиҙ арала өсәр-дүртәр йомранды ояларына һыу ҡойоп, елкәләренән һөйрәп сығарып, тунап та алдылар. Ильяс был эшкә бик оҫта инде, тиреһен һис йыртмай ғына һыҙырып ала, дуҫын да өйрәтә. Тоҡсай кеүек тирене, сатлы тал ботағына кейҙереп кирә. Юғиһә, өйҙә стенаға сөй ҡағып китергә тура килә, әсәй асыулана. Аҙағыраҡ был тиреләрҙе алыпһатарҙарға ҡәләмгә, дәфтәргә, ҡармаҡҡа алыштыраһың, кәнфит тә эләгеп ҡуя. Аҡса ғына бирмәйҙәр. Был шөғөлдәре менән ныҡ мауығып китеп, ҙур ғына ауыҙлы ояға ике-өс күнәк һыу ҡойғайнылар, өңдән бесәй ҙурлыҡ бер һоро йәнлектең башы күренде.

Бының да елкәһенән эләктерергә тип ынтылған Ильяс ҡурҡышынан артҡа һикерҙе.

— Абау! Ирлән бит был. Әйҙә, ҡастыҡ. Ирлән малайҙарҙың йән еренә һикерә ти ул.

Дуҫтар, ҡурҡыштан ситкә китеп ҡарап торғанда, теге һоро йәнлек дөмрәнләп килеп сыҡты ла селек төбөндәге икенсе ояһына инеп китте. Әллә ирлән, әллә башҡа бер йәнлек булды, ялбыр йөнлө ине инде.

— Юҡ, был ирлән дә түгел, шикелле, төҫө лә ҡуңырыраҡ, — тип һөйләнде Ильяс. — Был һыуыр, йә бурһыҡ булыр. Атайыңа әйтәйек. Мөхәмәтхан да уның һүҙен йөпләне.

— Ни булһа ла тайҙыҡ бынан. Йәнә килеп сығып ҡуйыр. Уға көс етмәҫ беҙҙең. Һыуырҙы ла ҡояшҡа ҡыҙына, тиҙәр.

Малайҙар бөгөнгө һунарҙары менән былай ҙа ҡәнәғәт ине. Талға теҙелгән йомран тиреләрен тоҡсайҙарына тултырып, ауыл яғына атландылар. Тик уларҙың һунар мажараһының иртәгеһенә мәҙрәсәлә дауамы булды.

— Ҡайҙа йөрөнөгөҙ кисә? — тип ҡаты һорау менән ҡаршыланы уларҙы мулла.

— Йомран тоттоҡ. Ҡәләмлек, дәфтәрлек тиребеҙ булды, — тип дөрөҫөн һөйләп тик торҙо Ильяс.

— Ах, мәлғүндәр! Килегеҙ, күтәрегеҙ күлдәгегеҙҙе, ятығыҙ!

Үҙе ишек башындағы сыбыҡҡа ынтылды. Ильяс мышҡылдай-мышҡылдай мулла ҡаршыһына барып ятты.

— Һин нишләп тораһың, Мөхәмәтхан, ят!

— Ятмайым. Һуҡтырмайым.

— Ятмаһаң, ике-өс сыбыҡ артыҡ.

— Ятмайым барыбер! — тип ҡысҡырҙы Мөхәмәтхан һәм ҡыҫыҡ торған ишектән сығып та ҡасты.

— Ах, ләғин! Атайыңдан таяҡ алырһың әле, ҡасып ҡотолмаҡсы булаһыңдыр инде.

Атаһы шулай ҙа яратҡан улына һуғырға ҡыйманы. Ә малай һаман үҙенекен тылҡыны.

— Ҡабат мәҙрәсәгә бармайым!

— Һуҡмаған бит әле, Ильясҡа ла өс мәртәбә генә һуҡҡан. Ҡалғанын ҡурҡытыр өсөн иҙәнгә шапылдатҡан.

— Барыбер бармайым!

Шунан башҡа һүҙҙе әйтмәне ул.

— Ярар, ғәфү үтен мулла бабайҙан. Һүҙ бир. Минең алда.

— Бирмәйем дә, бармайым да.

Малайҙарының был тиклем үҙ һүҙле, еңмеш холҡон ата-инәһе белмәгән икән. Аптырашып бер булдылар.

Көҙ яҡынлашып килгәндә, Йәнифә иренә тағы өндәшеп ҡараны.

— Нишләйбеҙ был бала менән? ”Мәҙрәсәгә бармайым”дан башҡаны әйтмәй ҙә ҡуя бит.

— Уҡытмай ҡалдырып булмай инде. Минең ишетеүем буйынса, ауылда дүрт йыллыҡ урыҫ-башҡорт һөнәр мәктәбе асылырға тейеш. Земство аса, ти. Әллә шунда ғына бирә лә ҡуябыҙмы? Итексе, ҡорт ҡараусы һөнәрҙәренә лә өйрәтмәкселәр, имеш.

— Мулла ағай ни тиер бит әле? Шул орсоҡ башындай балаһын тыңлата алмай, урыҫ мәктәбенә бирҙе, кафыр итә, тиер инде.

— Әйтһә, әйтер инде, нишләйһең. Арҡанлап ҡуйып булмай бит. Ҡайҙан һуң был еңмеш холоҡ?

— Ҡайҙан? Ҡайҙан булһын, һеҙҙән, Ҡулайҙар нәҫеленән, инде. Муса ҡайнымды ҡара инде. Батшаға ҡаршы һүҙ һөйләп йөрөгән бит. Мулла шуны иҫкә төшөрмәһә ярар ине.

— Уны иҫкә төшөрөр булһа, Торсонбай ҡартатайымды ла онотмаһын. Миколай батшаға хеҙмәт итеп, палкауник дәрәжәһе алған, Изге Анна ордены ла бар ине. Ғүмере буйы аттан төшмәгән. Ҡулайҙар бөтәһе лә тиҫкәреләр тимәгән. Атайым да мәңге шул халыҡ өсөн янды, нишләһен. Ҡарт көнөндә илен, йортон ташлап сығып китеү уға еңелме ни?

Йәнифә, күпме генә тырышып ҡараһа ла, иренең ихтыярын, улының теләген бора алманы, Мөхәмәтхан, әҙерләгән дәфтәр, ҡәләмдәрен сепрәк муҡсаһына тығып, ошо көҙҙән урыҫ-башҡорт мәктәбенә китте. Был мәктәп өсөн бер генә китабы ла юҡ ине әле. Өс урамдан бишалты бала ғына йыйылған. Ҡыҙ балаларға айырым синыф асҡайнылар ҙа, берәү ҙә ҡыҙын бирмәне. Бында ата-әсәләр балаларын мулланың бәддоғаһынан ҡурҡа-ҡурҡа ғына йөрөттөләр. Шулай ҙа малайҙарының ярты йылда урыҫ хәрефтәрен тотош белеп, ҡушып уҡырға өйрәнеүе ҡыуандыра ине. Был әлепбейҙәге хәрефтәр йомро, өҫтөнә, аҫтына һыҙыу, төрткөләр юҡ дәрәжәһендә. Уҡытыусыларына “мөғәллим” тип тә, “учитель” тип тә өндәшәләр. Учитель, башҡортса һәүетемсә генә белһә лә, ыңғайы тура килгән һайын урыҫса һөйләй, балаларға тиҙерәк телде өйрәтергә тырыша. Уның мәктәбенең ишек башында сыбыҡ та ҡаҙаулы түгел.

Мөхәмәтхан бында ла артта ҡалыусылар рәтендә булманы. Телгә ауыр тартылһа ла, хисапты, уҡыуҙы еңел алдырҙы. Атаһы килһә, учитель гел маҡтаны.

— Умная голова. С него толк будет, учить надо, — тип кенә торҙо.

Итек тегеү һөнәрен өсөнсө йылда ғына башланылар. Бынының икенсе учитель башҡарҙы. Уны “мастер” ҙа тинеләр. Ырымбурҙан килеп, айлап-айлап һөнәренә өйрәтеп маташты ул. Малайҙарҙың белгәне үксәгә ағас сөй ҡағыуҙан, энә һаплау, еп майлауҙан үтмәне. Мәктәптә берҙән-бер тегеү машинаһы бар ине, уға мастер балаларҙы бик яҡынайтманы. Һөнәргә өйрәнергә теләүселәр аҙаҡ Ырымбурға барып уҡырға тейеш ине.

Ырымбурға юл көтмәгәндә икенсе яҡлап асылды. Был юлды әлеге учитель өйрәтте. Тап Мөхәмәтхан мәктәпте тамамлаған йылда унда гимназия асылды. Башҡорт стипендияһына биш бөртөк генә бала алалар икән тигән хәбәр Бәкәтәргә лә килеп етте. Учителдең иң яҡшы уҡыусылары араһынан Мөхәмәтхан да эләкте. Уҡытыусы ҡайҙа барып, кемгә баш төртөргә икәнен дә аңлатып бирҙе.

## 2. Яңы юл ярыу

Ныҡымыш Мөхәмәтхан шунда ынтылыу теләге менән янды, төн йоҡоларынан яҙып хыялланды. Хисаптан, урыҫ теленән һәм ятлап һөйләү буйынса һынау тотоп, ун өс йәшендә гимназист булып китте.

Төпкөл ауылдан сыҡҡан, урыҫ телен икмәк-тоҙлоҡ ҡына тиерлек белгән малайға гимназия һынлы уҡыу йортонда белем алыу еңелдән булманы. Һөйләгәнде ул аңлай, ләкин урыҫса сатнатып яуап бирә алмай бер була. Малай-шалай бер-береһенә ҡағылып барыусан була, ҡулсырҙарға яуап биреүҙән бик тартынып тормай был мыҡты кәүҙәле малай. Уның үҙен яҡларлыҡ көс-хәле барлығын айҡашҡанда һиҙгән тиҫтерҙәре уға ҡағылмауҙы хуп күрә.

— Магометанин! — тип мыҫҡыллаусылары ла булғыланы, быға ла түҙҙе ҡуңыр йөҙлө, ныҡыш малай, ошаҡлашып йөрөмәне, ундай ғәҙәте юҡ ине. Йоҙроҡҡа йоҙроҡ менән яуап биреүҙән дә бик тартынып торманы.

Уҡытыусылар быны мөнәсәбәттәргә бик һаҡ ине. Башҡорттар өсөн был гимназияла ғына түгел, кадет корпусында ла уҡырға урын биргәндәрен, был эштең хөкүмәт сәйәсәте менән бәйле икәнен улар белә. Урыҫса йүнле белмәү һылтауы менән ситкә тибәреүҙәр, ҡағыуҙар ҡаты тыйылған ине.

Атаһы йыл әйләнәһенә бер-ике мәртәбә булһа ла килеп, күренеп китә. Улының уҡыуы, пансионаттағы тормош шарттары, ашау-эсеүе менән ҡыҙыҡһына. Мөхәмәтхан ғына әсәһен, ауылдағы тормошон, унда ҡалған туғандарын ныҡ һағына, шулар иҫенә төшөп китһә, төндәрен мендәренә ҡапланып, һығылып-һығылып илап та ала.

Тәүге уҡыу йылын уңышлы ғына тамамлап, май аҙаҡтарында гимназия формаһы кейгән Мөхәмәтхан Бәкәтәргә ҡайтып төштө. Улын йыл буйы тигәндәй күрмәгән әсәһе уны илай-илай яратты, бәләкәй сағындағы кеүек арҡаһынан тупылдатып һөйҙө, уҡырға ҡабат бармаҫҡа өгөтләп ҡараны. Мулла улар ғаиләһен мыҫҡыл итеп, улдарын кафырға әйләндерәләр, мәсет мәҙрәсәһендә уҡытып, мулла итәһе урынға гимназияға биргәндәр, тип вәғәздә хурлаған. Әсәһе быға бик ғәрлек кисереүен дә һөйләп алды.

— Әсәй, мин уҡыйым, — тип өҙә генә әйтте улы. — Миңә уҡыу оҡшай.

— Эй, балаҡайым, ҡайһылай ябығып, һарғайып киткәнһең. Ашау яғы наҡыҫыраҡмы әллә?

— Юҡ, әсәй, тамағым да туҡ, өҫтөм дә бөтөн. — Мөхәмәтхан ҡупшы формаһын ғорурлыҡ менән ҡарап алған булды.

— Ярар, юҡты һөйләмә әле, — тип һүҙгә ҡушылды атаһы. — Үҫтерем сағы бит, таҙарыр әле. Тормош рәүештәрен үҙем күрҙем, бер ҙә насар түгел.

— Был еҙ төймәле кейемде лә шул уҡыған ерендә бирҙеләрме? — тип һүҙҙе икенсегә борҙо әсәһе. — Ҡыуат кантон да уҡыған сағында ҡайтһа, ошолай еҙ төймәләрен ялтыратып ҡайтҡан була торғайны.

— Шунда, гимназиянан бирҙеләр, әсәй. Беләһегеҙме, беҙ ниндәй бейек таш йортта уҡыйбыҙ? Тәҙрәләре ат менән инерлек, ҙур. Баҫҡыстары семәрле суйындан.

— Эй, балам, бәхетле генә бул инде. Кеше араһында хур булып ҡуйма.

Атаһы — аҙ һүҙле, эшен белеп ҡылған ир, улының төп-төҙ баҫып йөрөүҙәрен, күҙҙәрендәге ялҡын нурын күреү уға бер кинәнес бирә ине. Уның артынан мыйыҡтарын ғына һыпырып ҡәнәғәт төҫ менән ҡарап торорға ярата. Балаларына һис тауыш күтәрмәне ул, сыбыҡ, ҡайыш тигәнде теленә лә, уйына ла алманы. Мөхәмәтханды йыш ҡына башҡаларына өлгө итергә тырышты. “Ана, ағайың, ағайың кеүек бул” тип ҡабатлап ҡына торҙо. Ағаһы алдында ғына уны артыҡ күтәрмәне. Был олоно оло тип танымай башлар йә.

Сәхипкирәйҙе ауыл халҡы ла элек-электән ярата, ихтирам итә. Эштә тоғролоғо, намыҫлы булғаны өсөн халыҡ уны бер нисә мәртәбә мировой судья итеп тә һайланы. Был бурысты ла ул кешеләргә тоғролоҡло итеп башҡарҙы, берәүҙе лә йәберләмәҫкә, дөрөҫ хөкөм йөрөтөргә тырышты. Балалары ла аталарының бер ваҡытта ла эшһеҙ йөрөгәнен, борҡотоп тәмәке тартҡанын, кәрт кеүек уйынды уйнағанын күрмәй үҫте.

Мөхәмәтхан бәләкәйҙән кис көтөү ҡаршыларға әүәҫ ине, гимназиянан да ошо ғәҙәтен һағынып ҡайтты. Бейәләр иһә төнгө көтөүҙән иртәнсәк лөһөрләшеп ҡайта ла утлыҡҡа инеп, эҫелә шунда тороп ял итә. Уларҙы кистән үк ҡолондарынан айырып яланға ҡыуалар, иртән һауалар ҙа ҡолондарын ҡушып ебәрәләр. Ҡояш байыуға һыйырҙар ҙа мөңөрәшеп ҡайта, Мөхәмәтхан әсәһенә малдарҙы ҡыуып, теүәлләп ябыша. Әсәһе гөбөрләтеп ике һыйырҙы һауа ла туҫтаҡ менән йылы һөт һона. Рәхәтләнеп эсә ул күпереп торған тәмле һөттө.

— Эй, балаҡайым, эс, эс! Ана бит, ҡайтҡаныңа ике аҙна ла юҡ, яурындарың йомрайып, күкрәгең тулып киткәндәй булды, шөкөр.

Уға эйәреп һеңлеһе Фатима ла йылы һөт эсергә әүәҫләнеп алды.

Йыл буйы тигәндәй көтөп алған йәйҙең көндәре был яҡтарҙа һанаулы ғына шул. Сентябрь урталарында атаһы Мөхәмәтханды йәнә Ырымбурға алып барып ҡуйҙы.

Гимназия ҡаланың үҙәк урамдарының береһендә ине, ике ҡатлы бейек таш йорт тирә-йүнендәге ағас йорттарҙан аша ҡарап ултыра.

Мөхәмәтхан иртә һайын Каруанһарай мәсетенең манараһынан яңғыраған серле аҙан тауышына уяна, пансионаттан йүгереп сығып тыңлап тора: “Әшһәҙү ән-нә! Лә-иләһи-илла-алла!” Был мәшһүр аҙан моңо уның нескә күңеленә үтә. Уҡыуҙан бушау менән Туҡ-соран яғынан килгән һабаҡ-

ташы Абдрахман менән Каруанһарай баҡсаһына бара. Эскә үткәрмәйҙәр, малайҙар баҡсалағы йүкә, ҡарағай ағастарына һоҡланып ҡарап торалар, Каруанһарай тышындағы ат һарайҙарынан сыҡҡан, эстәге казармаларҙан, тимер ҡапҡа асылып киткәндә күренеп ҡалған казачий форма кейгән башҡорт атлыларын да ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар. Бер көндө Мөхәмәтхан эргәһендә торған һабаҡташының еңенән тартып:

— Ҡара әле, Абдрахман, манара осондағы айға! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Зәңгәр күктә болот түгел, ул шыла кеүек.

— Эйе, эйе, — тине Абдрахман. — Болот киҫәге урынында тик тора кеүек, ә ай уны урталай яра.

— Нишләп манараға ай ҡуялар икән, ә? Ҡояш айҙан яҡтыраҡ та, эҫерәк тә бит.

— Уны кем белә инде. Дин уҡытыусыһынан һорап ҡарайыҡ.

Каруанһарай тышындағы һарайҙарҙан атбағарҙарҙың йылҡылдап торған төрлө төҫтәге аттарҙы сығарып, арҡаларын ҡырғыс менән һыпырыуҙарын, казактарҙың уларҙың йомро арҡаларына күн эйәрҙәр ташлап, һикереп менеп, һыбай күнекмәләр үткәрергә Һаҡмар буйына китеүҙәрен күҙәтеп торҙолар. Казачий ағайҙарҙың салбар балаҡтары буйлап төшкән ҡыҙыл буйға яҡҡан һаплы ҡылыстары аҫылынып йөрөй. “Их, шул ҡылысты тағып, ошо дағалы аттарҙы менеп, Ырымбур урамдарынан шыҡ-шыҡ юрттырып үтһәң ине”, — тип хыяллана гимназист үҫмерҙәр. Үҙәктәге кадеттар корпусы әллә ни күңелде тартмай, ҡасан үтмә, майҙандарынан бер туҡтауһыҙ “айт—два!” командаһы яңғырап тора. Таш урамды шаҡ та шоҡ килтерәләр.

Уҡыуҙа алгебра, геометрия кеүек теүәл фәндәр Мөхәмәтханға еңел бирелде, хатта латин теле лә яңғырауыҡлығы, фразаларҙың оҙон-оҙон әйтелеүе менән күңеленә ята ине. Рәхәтләнеп сит һүҙҙәрҙе ятлай. Иң ауыр бирелгәне урыҫ теле, әҙәбиәт кеүек фәндәр булды. Хәтһеҙ генә төшөнсәләр дәрестәрҙә аңлашылмай үтә, уларҙы һуңынан төрлө һүҙлектәрҙән, энциклопедияларҙан эҙләргә тура килә.

Гимназия башлыса гуманитар йүнәлештә төплө белем бирә. Дүртенсе, бишенсе синыфтарҙа хатта фарсы теле уҡытыла. Программаны төҙөүселәр Ырымбурҙың көнбайыш менән көнсығыш илдәрҙең ситендә ултырғанын иҫәпкә алған, шикелле. Фарсы телен уҡытыусы был телдәге әҙәбиәт буйынса ла мәғлүмәтле ине, ошо телдә шиғырҙар уҡып та ала. Ғүмәр Хәйәм, Фирҙәүси, Сәғди үҙ телендә яңғырай. Гимназистар өсөн таныш булмаған исемдәр ишетелә. Фарсы теленең бик төҙәк бер тел, хатта үҙенсәлекле шиғриәт теле икәнен тойорға шарт тыуҙыра ине был кеше. Ул кадеттар корпусында ла көнсығыш телдәре, әҙәбиәте уҡыта, төрөк, ҡаҙаҡ телдәрен белә ине.

Бер ваҡыт ул үҙе дәрес алып барған синыфында башҡорт, мишәр балалары барлығын белде лә, тотто ла Ғүмәр Хәйәмдең бер робағийын фарсыса уҡыны, шуны татарсаға тәржемә итеп шаҡ ҡатырҙы.

Бүгенгенең яше-ҡарты бөтәчәк,
Ҡараңгы гүрне һәркем әлай итәчәк;
Берәү дә мәңге тормый: киттеләр бит,
Китербез без дә, килгәннәр — китәчәк.

Был Әбүбәкер Абдеев исемле уҡытыусының хәрби икәне төп-төҙ кәүҙәһенән күренеп тора ине. Мосолман балаларына мәғәнәле итеп тура ҡарап торҙо һәм шиғыр һүҙҙәренең йәш йөрәктәргә нисек тәьҫир

иткәнен, уларҙың күҙҙәрендә янып киткән дәрт осҡонон күрҙе. Артабан да ул фарсы теле дәрестәрен шиғырҙар менән ҡушып алып барҙы, бер ай эсендә гимназия шәкерттәренең иң яратҡан мөғәллимдәренә әйләнде. Балалар уның һәр ваҡыт аҡ яғалы күлдәктә, галстук тағып, ыҫпай йөрөгәне менән дә һоҡланды.

Мөхәмәтхан гимназияның һуңғы синыфында уҡығанда, атаһы ҡапыл ғына вафат булып ҡуйҙы. Уны һуңғы юлға оҙатырға ҡайтҡанда, етеһен уҡытҡас, әсәһенә артабан уҡыу теләге барлығын әйтмәй булдыра алманы.

— Эй, балам, атаң юҡ хәҙер, минән ни ярҙам инде, — тигән булды әсәһе.

— Мин белештем, башҡорт стипендияһына уҡып була. Йылына ике йөҙ ҡырҡ һум. Шул етә ул.

— Уҡығаның еткәйне инде, балам. Мин дә ҡартайҙым. Кәләш алыр ваҡытың да етте. Донъя көтөр инең. Атайың Аҡбулаттан бер ҡыҙҙы һөйләшеп тә ҡуйғайны. Үҙе белгән-күргән кешеһе, Арыҫлангәрәйҙең ҡыҙы — Көнһылыу. Әйттерәһе генә ҡалды. Ағаң менән барып әйттерер инегеҙ. Аталы-инәле бала, ти, ҡайның да үҙеңә донъя ҡороп ебәрергә ярҙам итер ине. Хәлле генәләр, тигәйне.

— Эй, әсәй, уҡығым килә бит.

— Ошо уҡыуың менән дә берәй бисар-фәлән була алырһың әле.

Мөхәмәтхан үҙенә тәғәйен ҡыҙҙы күҙ алдына килтереп тә ҡараны: теремек кенә, буйсан, оҙон сәсле, көлөп кенә тора. Ауыл төшөнсәһе буйынса ул еткән егет шул, егерме бере тулды бит. Уның йәшендәгеләр күптән башлы-күҙле булып, нәҫел арттырып йәшәп яталар.

— Мин табиплыҡҡа уҡырға булдым бит әле, әсәй. Бергә гимназияла уҡыған дуҫым менән, ул Туҡ-Соран яғынан бара. Башҡортостанда табиптар юҡ бит. Үҙемдең туғандарымды, ауылдаштарымды хаҡ һорамай ҡарар инем. Өлгөрмәнем, әсәй, бәлки атайымды ла шәбәйтер инем.

— Эй, улым, ғүмере бөтһә, бер нәмә лә эшләп булмай инде ул.

— Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән һүҙ ҙә бар түгелме ни, әсәй? Ҡартатайым шулай ти торғайны бит.

— Бөтәһе Аллаһы тәғәлә ҡулында инде ул.

— Шулай ҙа ул. Беҙҙең халыҡ юҡтан ғына ла теге донъяға китеп бара бит. Әҙ генә ярҙам итһәң, оҙайыр ине ғүмерҙәре.

— Беҙҙең башҡорт ауырыуҙан ҡурҡмай ул, хәстәханаға барып, табиптарға күренеп йөрөүҙән ҡурҡа.

— Өйрәнерҙәр ине, әсәй. Әлегә бит үҙ табиптарыбыҙ юҡ. Ауырыуҙарын урыҫса аңлата алмай бит күбеһе.

Күп ныҡый торғас, Йәнифә улын кәләш әйттерергә күндерҙе.

— Ҡыҙҙың ата-инәһе менән килешеп ҡуяйыҡ. Уҡырға китһәң-фәлән, бәлки, көтөргә риза булырҙар. Атайыңдың һүҙе аяҡ аҫтында ҡалмаһын, — тип ныҡыны әсәһе.

Мөхәмәтхан ағаһы Сафагирәй менән Һаҡмар үрендәге Аҡбулат ауылына ҡыҙ менән танышырға, һоратырға киттеләр. Буласаҡ ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға таҡыя, күкрәксә, яулыҡтар алып, буласаҡ киленгә күлдәклек, ҡашмау йүнләп, бер тәкә ите, әсеткән бал тейәп барып төштөләр. Тегеләр бик көтмәһә лә, ҙурлап ҡаршы алдылар.

— Ҡыҙлы кеше ҡапҡаһына ҡырҡ ат бәйләрҙәр, тигән боронғолар, — тип ҡаршы алды уларҙы Арыҫлангәрәй.

— Беҙ ҡырҡ беренсе булһаҡ та, һүҙебеҙ үтһә, ярар, — тип яуапланы Сафагирәй.

— Сәхипкирәй дуҫымдың һүҙен һүҙ итергә тырышып, беҙҙе әҙәмгә һанап килеүегеҙ өсөн рәхмәт.

Мөхәмәтхан күҙенең ҡырыйы менән генә һылыу ҡыҙҙы күреп ҡалды, тыйнаҡ ҡына һүҙгә ҡушылып ултырҙы.

— Буласаҡ кейәүебеҙ Мөхәмәтхан мыртый уҡыған кеше инде, беҙҙең ҡыҙҙы иш күрһә ярай ҙа, — тип ҡуйҙы әсәһе.

— Ҡыҙлы кеше башҡортта хандан өҫтөн, — тип һалды ағаһы. — Кәләш итеп алырға булғас, һанлар мыртый.

Ҡыҙ һоратыусылар бер кис ҡунып, аттарын ашатып, үҙҙәре лә һыйланып, килешеп ҡайтып киттеләр. Буласаҡ ҡоҙаларға Мөхәмәтхан уҡырға теләге барлығын белдергәс, күңелдәре кителде кителеүен дә, шулай ҙа Арыҫлангәрәй үҙен тыныс тотто.

— Ярар, яҙғаны булыр, әрменән дә егермешәр йыл көтөп алалар ышаныслы егеттәрҙе.

Ҡайтырына Мөхәмәтханды Туҡ-Соран яғынан килгән хат көтә ине. Был хат Мөхәмәтхандың һүнеп барған уҡыу теләген яңынан ҡужғытып ебәрҙе. Улының үҙ һүҙен һүҙ итәсәген белгән Йәнифә шығырлап булһа ла ризалығын бирҙе.

— Ризамын да ул, балам, үҙеңә ауыр булыр бит.

— Эй, әсәкәйем, һин риза булһаң, миңә бер нәмә лә ауыр түгел. Рәхмәт, әсәй!

— Ҡайҙа уҡыйһың инде, шул Ырымбурҙамы?

— Юҡ, әсәй, унда табиптар уҡыта торған урын юҡ, Ҡазанға юлланам, Алла бирһә. Ҡазан дәрелфәнүненә.

— Уныһы ни тағы?

— Урыҫса әйткәндә, университет була. Медицина факультетына.

— Эй, балам, һау ғына йөрө инде. Кеше булдың.

Йәш егет алда үҙен ниндәй һынауҙар көткәнен белмәй ине әле. Фән һынауҙары ғына түгел, тормош, рух һынауҙары.

Ҡазан дәрелфәнүненә ул уйлағанса тура юл юҡ ине. Ундай юғары уҡыу йортона, бигерәк тә табипсылыҡ факультетына, мосолмандар, йәһүдтәр өсөн ишектәр ҡат-ҡат йоҙаҡта булды. Мөхәмәтхандың гимназияны маҡтау ҡағыҙына тамамлауы ла артыҡ ярҙам итмәне. Гимназия тамамламағандар, уртаса уҡығандар бында яҡын да килә алмай.

Ырымбурҙан килгән ике егет тә, кире ҡайтып киткеләре килмәй, бер-ике көн Ҡазан урамдарында, университет тирәһендә ҡаңғырып йөрөп ҡараны.

Бында төп талаптарҙың береһе христиан булыуҙа икән. Башҡорт стипендияһы ғына әҙерәк өмөт уята. Тик быларҙың ныҡышырға ҡыйыулығы етмәй ҙә ҡуя.

Шулай аңҡы-тиңке булып арып, был ике ыҫпай ғына сөм ҡара күҙле егет Ҡазан Кремленең сиркәүе ҡыңғырауҙарын тыңлап торғанда, яндарына оҙон ҡара күлдәк һымаҡ кейем кейгән, муйынына тәре таҡҡан поп килеп туҡтаны, быларға ҡарап торҙо ла йомшаҡ ҡына итеп:

— Инегеҙ сиркәүгә, рәхим итегеҙ, йәш кешеләр, ҡыймай тораһығыҙ, шикелле, — тине.

Аптырашып торған егеттәр христиандарҙың изге йортоноң тупһаһы аша беренсе мәртәбә атланы. Был аҙымдары ҡайҙа алып китерен һис уйламай ине әле ике башҡорт егете.

Ниндәйҙер ғибәҙәт бара. Алда май шәм тотҡан аҡ һаҡаллы протоиерей доға уҡый, залдағылар эйелеп-эйелеп суҡына, ҡайҙандыр йөрәк өҙгөс нескә тауыштар менән доға яңғырай.

Егеттәр алғараҡ үтте. Сиркәүгә йыйылған халыҡ таралғансы йөрөнө улар. Әлеге поп улар янына йәнә килде.

— Оҡшанымы богослужение?

— Эйе, — тигән булды Мөхәмәтхан.

— Оҡшаһа, йәкшәмбе һайын килеп тыңлағыҙ.

— Шулай ҙа, беҙ университетҡа уҡырға килгәйнек бит әле.

Поп уларҙы шунда бер бүлмәгә саҡырып, алдарына тәмле-тәмле бәлештәр ҡуйып, сәй эсерҙе. Былар инде асылып китеп, үҙ хәлдәрен бәйнә-бәйнә һөйләп тә бирҙеләр.

— Эйе, балаларым, ауыр эшкә тотонғанһығыҙ. Рәсәй дәүләтенең ҡанундары буйынса университетка инер өсөн христианлыҡты ҡабул итергә кәрәк. Шунда һеҙгә юл асылыр.

— Ә уныһы нисек була инде? — тип һораны Мөхәмәтхан. — Мин бит магометанин.

— Дин алыштырыу — һәр шәхестең үҙ эше. Саф күңелдән генә булһын. Уны ошо сиркәүҙә йәки университеттың ихатаһындағы бәләкәй сиркәүҙә лә үткәрергә мөмкин.

Мөхәмәтхан аптырабыраҡ ҡалһа ла, уның икеләнеүен поп һиҙҙе.

— Мин ашыҡтырмайым, балалар. Христос түҙгән һәм беҙгә лә түҙергә ҡушҡан. Уйлағыҙ. Аҙаҡ килерһегеҙ.

Һөйләшә торғас, егеттәрҙең йоҡлар урыны ла юҡлығын белде ул, кискә үҙенең өйөнә саҡырҙы.

Егеттәр бөтөнләй юғалып ҡалды, ни әйтергә лә белмәне. Поптың адресын алдылар ҙа урамға һыпырттылар. Туҡ-Соран егете шунда уҡ киреләнеп китте, ул поптың тәҡдимдәренән баш тартып, шул көндө үк Ырымбурға ҡайтып китеү яғын ҡараны. Мөхәмәтханда уҡыу теләге көслөрәк булып сыҡты, кискә табан ул бер үҙе генә ихтирамлы поптың өйөн эҙләп тапты.

Шау баҡсаға күмелгән өйҙөң бәләкәй ҡапҡаһын һап-һары сәстәрен икегә ярып үргән, зәңгәр күҙле үҫтерем ҡыҙ асты.

— Инегеҙ, батюшка һеҙҙе көтә, — тине ул ябай ғына итеп, әллә атаһының һөйләүенән егетте таныған. — Таныш булайыҡ. Минең исемем — Нина.

— Мөхәмәтхан.

Ҡыҙ был ят яңғырашлы исемде ҡабатларға итте лә, яңылыш әйтеп ебәрермен тине, ахыры, башын ғына ҡағып ҡуйҙы.

Ҡыҙҙың асыҡ йөҙө, ябай мөғәмәләһе өйөн һағынып өлгөргән ауыл егетенә дарыу кеүек булды, йөрәге дөп-дөп тибә башланы. Быға саҡлы ҡыҙҙарға ҡарата бындай хисте тойғаны юҡ ине әле.

Батюшканың тулы ғына кәүҙәле илгәҙәк ҡатынына ла был мыҡты кәүҙәле, ипле хәрәкәтле егет оҡшаны, шикелле.

Батюшканың исеме Матвей булып сыҡты. Ул башҡорт тормошо менән дә ҡыҙыҡһынып алды, ислам ҡанундарын белеүен дә һиҙҙерҙе.

Һүҙгә бик оҫта, яғымлы тауышлы был ир уртаһы кеше Мөхәмәтханға ла оҡшап ҡалды.

Иртәгеһен ул ҡунаҡ егетте экипаж менән университетҡа оҙатып ҡуйҙы. Кискә йәнә үҙҙәренә саҡырҙы, ятаҡҡа урынлашҡансы йоҡлап йөрөргә рөхсәт итте.

Мөхәмәтхан үҙе лә был йортҡа эйәләшеп барғанын күңеле менән тойҙо, тартынһа ла, шунда ашҡынды. Нина уны көн дә ҡаршы ала, оҙатып ҡуя, ағаһы кеүек күрә. Бер көтмәгәндә яурынына ҡағылып та алды. Егет терт итеп ҡалды, тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

Ваҡыт үтә торҙо. Мөхәмәтханға әлеге христианлыҡ мәсьәләһен, батюшка күтәрмәһә лә, хәл итергә кәрәк ине. Уҡыуға инеү теләге бик көслө. Һүҙҙе батюшка алдында ла башланы.

— Бик мөһим аҙым бит был, балаҡай, — тине отец Матвей. — Һиңә үҙ динеңдән ваз кисергә тура киләсәк. Бер юлы ике динде тоторға ярамай. Атаң-әсәң ни тиер? Шундай мөһим аҙымды яһарға әҙерһеңме?

Егеткә “әҙер” тиеүҙән башҡа һүҙ ҡалманы. Был һүҙҙе әйткәндә ниңәлер Матвейҙың ҡыҙы Нина күҙ алдына килде. Ул да был аҙымын хуплай һымаҡ ине.

— Улайһа, тәүге көн беҙ танышҡан сиркәүгә бөгөн богослужение бөтөүгә кил, мин шунда булырмын.

— Ә был күсеште һеҙ үҙегеҙ башҡараһығыҙмы?

— Мин башҡарам. Һиңә исем-шәрифтәрең танытмаһын протоиерей яҙып бирер, ул да шунда буласаҡ. Исемең дә, атаң исеме лә христиансаға әйтелер. Шуға ризаһыңмы?

— Эйе. Рәхмәт, изге ата! — тип әйткәнен Мөхәмәтхан үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

— С богом, сын мой! — тине отец Матвей, егеттең шырт сәсенә көрәктәй усын һалып.

Сиркәүҙә суҡындырыу церемонияһын башҡарыу алдынан ҡара һаҡаллы, ҡара сәсле протоиерей тәреһен үбә-үбә үҙе егет янына килеп сыҡты.

— Христианлыҡҡа күсеүҙе үҙ теләгең менән башҡараһыңмы? — тип һораны ул.

— Эйе.

— Беҙҙе йыш ҡына миссионерҙарға һанайҙар, мосолмандарҙы алдап, көсләп суҡындырыуҙа ғәйепләйҙәр. Рәсәй закондары буйынса башҡа дин вәкилдәре араһында миссионерлыҡ эше алып барыу тыйылған.

— Үҙем теләйем. Миңә егерме ике йәш булып килә, изге ата.

— Ярай, сын мой. Күҙемә тура ҡара әле. Ана шулай. Эйе, күҙҙәрең өмөтлө, нурлы. Теләгеңдең ысын булыуына ышанам. Мин христиан диненә күсеү йолаһын башлайым. Отец Матвей тамамлап ҡуйыр. Тәрегә артың менән тор.

Мөхәмәтхан ҡара һаҡалға тулыһынса буйһондо, уның уң яғында отец Матвей, һул яғында Иусус Христос һынлы тәре тотҡан бер йәш рухани тора ине.

— Во имя отца и сына и святого духа... Сын божий Мухаметхан, отныне будешь Мстиславом, истинным христианином... Аминь!

Оҙон ғына доғаны көслө тауыш менән уҡығас, һүҙҙе отец Матвей дауам итте:

— Хәҙер мин һине, сын божий, изге һыу менән ҡойондорам өс мәртәбә. Ағын һыуға төшөп, тәре үбеп сығырға кәрәк ине лә, былай ҙа ярай. Эй башыңды, ҡурҡма, елкәңдән ҡоймам, тертләмә.

Протоиерей йәнә ниндәйҙер доғаны ҡысҡырып уҡыны, уның ярҙамсыһы, йәш священник, ағас мискәнән ағас сүмес менән һыу һоҫоп, егеттең эйелгән башына ҡойҙо. Отец Матвей менән йәш рухани икеһе нәҙегерәк тауышта протоиерейҙың доғаһын ҡабатлап торҙо.

— Сатананан ваз кисәһеңме? — тип өс мәртәбә һораны священник.

Мөхәмәтхан был һорауҙы аңламаһа ла, ыңғай яуап бирҙе.

— Ваз кисәм.

Асылда был ошоға тиклем инанып йәшәгән диненән ситләшеү ине. Шул һүҙҙәрҙе ҡабатлағанда бер нисә минутҡа уның уйына йәрәшеп киткән мосолман ҡыҙы Көнһылыу килеп ҡуйҙы. Ул ныҡ үпкәләп, уға арты менән боролған кеүек булды. Мөхәмәтхан терт итеп ҡалды.

— Тәрегә йөҙөң менән әйлән!

Егет ни ҡушһалар ҙа, үтәргә әҙер ине.

— Тәре алдында башыңды эй. Тәрене үп!

Отец Матвей нисек итеп тәрегә ҡарап суҡынырға, уң бармаҡтарҙы тәндең ҡайһы өлөштәренә төртөргә өйрәтте.

— Серле йоланы башҡарҙың, сын божий. Христианға күсеүең ошо булды. Төкөр иҙәнгә. Был һинең сатананың йоғонтоһонан сығыуың булыр.

Протоиерей был юлы ҡулындағы алтын ялатылған тәреһен Мөхәмәтхандың маңлайына терәп алды, йәнә үбергә ҡушты.

— Ошонан һуң һин раб божий Мстислав Александрович булырһың, фамилияң ҡалыр.

Иң аҙаҡ ул сиркәүҙең метрик кенәгәһенә теркәне: “С сего дня раб божий Мстислав Александрович принял крещение, стал христианином, о чем и сделана сия запись, выдано свидетельство”, — тип яҙып ҡуйҙы.

Мөхәмәтхан ҡалған ғүмеренә Мстислав булып, яңы таныҡлығын әлеге кенәгәгә ҡул ҡуйып алды, билдән бөгөлөп протоиерейҙың, отец Матвейҙың ҡул һырттарын үпте. Святой отец уның битенә, сәстәренә хуш еҫле май һөртөп ҡуйҙы.

Сиркәүҙән сыҡҡас, Мстислав Кремль буйлап уйланып йөрөп алды. Башында буталсыҡ уйҙар сыуалды уның. “Нишләнем? Әсәйем, меҫкен, нисек ҡабул итер? Туғандарым минән ситләшмәһә ярар ине”. Ошо уйҙар араһына ваҡыт-ваҡыт отец Матвейҙың ҡыҙы Нина килеп инә. Уныһы инде: ”Дөрөҫ юлға баҫтың, мин ғәйепле”, — тигән кеүек. Йәш егет Кремль ситенә барып, Болаҡ йылғаһы буйҙарына, аръяҡтың һөҙәк ярҙарында үҫкән ҡамыштарға, бөҙрә талдарға ҡарап торҙо. Үҙенең һылыу Һаҡмары иҫенә төшөп, күңеле тулып китте. Артына әйләнгәйне, Ҡазан мосолмандарының изге Сөйөмбикә манараһы күҙенә ташланды. Уның да айы тап Каруанһарай мәсетендәге кеүек күккә ашҡан. Үҙен ҙур ғәйеп ҡылған кеүек тойҙо. Уйҙары йәнә ҡаршылыҡлы хистәр менән тулышты. “Динем өсөн түгел, көнөм өсөн” тигән һүҙ хәҙер уға апаныҡ мәғәнәле булып тойолдо. “Әсәй, әсәй, һин генә ғәфү итһәң ине”, — егеттең мейеһендә хәҙер шул бер генә уй ине. Әсәһе иҫенә төшкәс, йөрәген сәнсеү алған кеүек булып китте. Шунда ул Болаҡ яғынан иҫкән дымлы елгә күкрәген асты. Тыны иркенәйгәндәй булды. Уның бөгөн яһаған аҙымын әсәһе күтәрә алмаҫ кеүек тойолдо, был турала

уға бер ҡасан да, бер һүҙ ҙә ысҡындырмаҫҡа булды. Сер булып ҡалһын әйҙә.

Оҙаҡламай ошондай оло ҡорбандар яһаған Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы, Мстислав Александровичҡа әйләнеп, рухи һынылыштар кисереп, теләгенә иреште — Ҡазан университетының медицина факультеты студенты булып китте.

Ун туғыҙынсы быуат аҙағы, егерменсеһенең башы Ҡазан университетының дөйөм Рәсәй сәйәсәт ҡаҙанында ижтимағи фекерҙе ҡайнатҡан йылдар булды. Унда уҡыған студенттар империя тормошонда булып ятҡан һәр күренешкә үҙ ҡараштарын белдерә барҙы. Был атаҡлы дәрелфәнүндең иҫке ҡарашлы тоғро һаҡсылары булған етәкселегенә лә, һөрһөгән профессураһына ҡаршы сығып, тыйылған сходкалар ойоштороп торҙолар. Уларҙың күптәре уҡыу йортонан ҡыуылыуҙан да ҡурҡып торманы, сөнки күбеһе юғары ҡатлам балалары ине, үҙҙәренең артында ниндәй көстәр торғанын белеп эш иттеләр. Иртәгәнән ҡыуылһалар ҙа, белемһеҙ, көндәлек икмәкһеҙ тороп ҡалыуҙан ҡурҡманылар.

Рәсәй дәүләтенең һуңғы императоры Николай Икенсенең илде ниндәй хәлгә төшөрөрөн, уның сәйәсәтен, уны уратып алған ҡара көстәрҙең ҡотһоҙ тәртип индереүен күрҙеләр, уларға ҡыйыу ҡаршы сыҡтылар, үҙ фекерҙәрен белдерә килделәр.

Башҡорт ауылынан килгән күндәм студент Мстислав Ҡулаев был хәрәкәттәрҙән ситтәрәк йөрөнө, үҙенең хәлен аңлап, үҙ урынын дөрөҫ билдәләргә тырышты, тирә-яҡта булып ятҡан ваҡиғалар эсенә инеп барманы. Белем алыу, теләгән һөнәрен өйрәнеү ауыл егетенең төп шөғөлөнә әйләнде. Уның тәртибен рухи атаһы, отец Матвей ҙа күҙәтеп кенә торҙо, хуп күрҙе.

Исем-шәрифтәре саф христианса яңғыраһа ла, уҡытыусылар ҙа, һабаҡташтары ла уның керәшен икәнен белә ине. Төҫ-киәфәте үҙенән алда ниндәй заттан икәне тураһында ҡысҡырып тора: сөм ҡара ҡыҫыҡ күҙҙәр, ҡуңыр йөҙ, шырт ҡара сәс, ҡыҫҡа муйынлы мыҡты кәүҙә. Аҡһөйәктәр нәҫеленән түгел икәнлеге күҙгә ташланып тора. Кейеме лә ярым ауылсараҡ, йәшәү рәүеше лә наҡыҫлыҡҡа йәтешләнгән. Ҡомарлы уйындарға, күңел асыуҙарға әүәҫлеге юҡ.

Студенттарҙың ризаһыҙлыҡтары үтә сәйәси төҫ алып, император исеменә үк үрелә башлаған сходкала университеттың священнигы ла сығыш яһаны, ҡыҫҡа ғына доғаһынан һуң нотоҡ та уҡып ҡуйҙы.

— Батша ғәли йәнәптәренә тел тейгеҙеү — гонаһ, әхлаҡҡа ла, законға ла һыймаған ҡылыҡ, әфәнделәр! Батша беҙгә Аллаһы тәғәлә тарафынан идара итеү өсөн ебәрелә, уға ҙур хоҡуҡтар бирелә.

— Батшабыҙ коронация ваҡытында йыйылған халыҡты аттарҙан тапатырға ла Алланан фатиха алғанмы? — тип ҡысҡырҙы кемдер.

— Гонаһлы һүҙ һөйләйһең. Тфү, мәлғүн! — тиергә мәжбүр булды дин әһеле. Ҡысҡырыш, әсе һыҙғырыштар ҙур залды тултырҙы, тәҙрәләрҙе зың-зың килтерҙе.

Сходкала бер мөйөштәрәк ышыҡланып торған Мстислав уйлана-уйлана был тирәнән ҡырғараҡ китеүҙе хуп күрҙе. Атаһының бер нәсихәте иҫенә төштө: "Ҡартатайың батшаға ҡаршы сығып, үҙ өҫтөнә ҙур ғәйеп алды, улым. Ҡартайған көнөндә яңғыҙ башын сит-ят ерҙәргә алып китергә мәжбүр булды. Болаларҙан ситтәрәк йөрө инде. Уҡығас, уҡы. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән".

Уны шунда уҡ көтмәгәндә отец Матвей тотоп алды.

— Сын мой, будь дальше от смуты! — тине ул йомшаҡ ҡына итеп. — Һинең бит яҡлар кешең юҡ. Белһәләр, башҡорт стипендияңдан яҙҙырып ҡуйырҙар.

Мстислав башын эйеп кенә китеп барҙы.

Атаһының һүҙҙәре, отец Матвейҙың нәсихәттәре күпмелер ғүмеренә йүнәлеш бирһә лә, ҡан барыбер үҙенекен итте. Аҙағыраҡ, атаһы йәшенә етәрәк, ул сәйәсәткә инмәй булдыра алманы, тотош сумды. Тик уға тиклем байтаҡ ғүмер бар ине әле.

Егерменсе быуат баштарында Ҡазан университеты сәйәси тормошта ғына түгел, фән өлкәһендә лә билдәле үҙәккә әйләнгәйне. Шәрҡиәтселектә ул Петербург менән Мәскәүҙән генә ҡалышҡандыр, улар менән ярышҡандар ҙа. Мстислав Ҡулаевтың да туған теле, төркиәт мәсьәләләре, халҡының мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныуы, был өлкәләрҙә тәүге аҙымдарын яһауы булғандыр. Тап ошо дәүерҙә бында төркиәтсе профессор Александр Казимбек эшмәкәрлеген йәйелдерә. Фәнде миссионерлыҡ хеҙмәте менән бәйләгән Николай Катанов, Владимир Катаринскийҙар алып барҙы. Тап улар төрки халыҡтары өсөн кириллицаға нигеҙләнгән әлифбалар әҙерләп, китаптар яҙып сығарҙы.

1899 йылда Катаринскийҙың “Инжил”ының (“Евангелие”ның) башҡортсаға тәржемәһе Ҡазанда баҫылып сыҡты. Был китап Мстислав Ҡулаевтың да ҡулына эләкте. Теле саф башҡортса булыуы аптыратты ла, һоҡландырҙы ла. Алфавиты еңел, бер-ике уҡыуҙа үҙләштереп тә була. Тәржемәһе үҫәргән башҡорттары теленә лә, ҡатайҙарҙыҡына ла оҡшап тора. Тимәк, ул бөтә башҡортҡа аңлайышлы, яҡын булһын өсөн шулай эшләнгән. Мстиславҡа тәржемә оҡшаһа ла, хәрефтәрҙең күп етешһеҙлеген күрҙе ул. Сөнки бында ла, ғәрәптәге кеүек, кириллица хәрефтәре өҫтөнә ҡуйылған нөктәләр, һыҙыҡтар ялҡыта ине. Егеттең башында хыялый уйҙар ҡайнаны: шул артыҡ билдәләрҙе ҡулланмай, хәрефтең үҙен әҙ генә үҙгәртеп булмаймы икән?

Катаринскийҙың шул уҡ дәүерҙә донъя күргән башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса һүҙлектәрендә лә ошо уҡ хәрефтәр ҡулланылған ине. Башҡорт теленең үҙенә генә хас бер нисә өндөң билдәһе бөтөнләй юҡ бында, булғандары ла төрткөлө, аҫлы-өҫлө һыҙыҡлы.

Мстислав Ҡулаевҡа был хәл тынғы бирмәй башлай, ул күп уйлана, яҙып ҡарай. Егеттең филологияға тартылыуын һиҙеп, башҡортлоғон да иҫәпкә алып, университеттың археология, география һәм этнография йәмғиәте Башҡортостандың көнсығышына 1900 йылдың йәйендә ойошторолған экспедицияға уны ла йәлеп итә.

Студент өсөн был оло һабаҡ була. Стәрлетамаҡ өйәҙенең Атмәмбәт, Юғары Урал өйәҙенең Сысҡан, Татлы, Майғашты, Орск өйәҙенең Хәлил, Иҫән ауылдарын ҡайҙа атта, ҡайҙа йәйәүләп үтә ул. Был яҡ халҡының теле үҫәргәндәрҙекенән айырылыуын күрә. Халыҡтың һүҙгә, сәнғәткә әүәҫлеген күреп, ҙур ҡәнәғәтлек кисерә. Күп һүҙ, йыр, әкиәттәр, мәҡәл-әйтемдәр яҙып ала. Үҙенең эше тураһында, йыйған материалдарын урыҫ, латин хәрефтәре менән яҙа, халыҡ нисек һөйләй, шуны яҙмала теүәл бирергә тырыша. Буласаҡ телсенең фәндәге беренсе етди аҙымы ине был. Ошонда ишеткән, яҙып алған мәҡәлдәре, әйтемдәре уның шәхси телмәрендә мәңгегә урын ала: “Аҡыл — баш, алтын — таш”; “Ат юртышынан, ҡатын йөрөшөнән һыналыр”;

“Аш хурлама — ҡоҫторор, ир хурлама — боҫторор”; “Элек һөйләш, аҙаҡ һыйлаш”.

Бындай ынйы биҙәктәрен бик күп йыйҙы ул, риүәйәттәр, мәҫәлдәр, йырҙар тыңланы. Үҙ халҡының ауыҙ-тел ижадына маһирлығын күрҙе, тойҙо, яҙып алды. Бөтә йыйған материалын тәртипкә килтереп, үҙен ебәргән йәмғиәткә тапшырҙы. Тел йәһәтенән башҡа мөхит менән танышыу буласаҡ ғалимға күп нәмә бирҙе. Ҡатай, түңгәүер башҡорттары теленең үҫәргәндәр теле менән оҡшашлыҡтарын, айырмаларын билдәләне. Үҫәргәндәр теленең күп яҡтары башҡа һөйләштәр өсөн уртаҡ булыуын да күрҙе. Был инде киләсәктә үҙ һөйләшен дөйөм башҡорт теле итеп ҡарарға мөмкинлек тыуҙырҙы.

Ныҡышмалы уҡыу йылдары үтә торҙо. Мстиславтың отец Матвейҙың ҡыҙы һылыу Нина менән бәйләнеше лә нығына барҙы. Ҡыҙҙың атаһы менән әсәһе лә был бәйләнешкә ҡаршы булманы. Ни тиһәң дә, Мстислав ышаныслы ир булырға оҡшай ине. Уның башҡорт сығышы ла онотолдо. Яҡшы кеше, тәртипле — шул еткән, тип ҡараны был рухани ғаилә.

Университетты тамамлап, табип дипломы алыуына ике ай ҡалғас, Мстислав Ҡулаев Ырымбур губернаторына мөрәжәғәт-хат яҙҙы. Башҡорт стипендияһына уҡыуын, Ырымбур йәки Өфө губерналарының береһенә эшкә ҡайтып, үҙ халҡына хеҙмәт итеү теләге барлығын белдерҙе. Ләкин тиҙҙән кире яуап алды. Сәбәбе ниҙә булғанын да аңламаны йәш табип, хатында үтә башҡортлоҡ рухы аңҡығандыр инде. Башҡорттарҙан белемле табип сығырына ышанысы булмағандыр, ахыры, губернаторҙың. Ҡазан губернаһының Тәтеш районы Ялсыҡай ауылына баш табип итеп тәғәйенләнде ул. Бында эшкә йәй аҙағындараҡ барырға мөмкин ине, шуға ул хеҙмәт юлын башлар алдынан тыуған ауылы Бәкәтәргә ҡайтып төштө. Әсәһен, туғандарын бик һағынғайны. Ҡартайған әсәһе Бәкәтәрҙәге һеңлеһе Фатимала йәшәп ята ине.

Әсәһен күргәс тә, алдына ятып, йығылып илағыһы, үҙе менән булған хәлдәрҙең барыһын да һөйләп биргеһе килде. Әсәһен оло ҡайғыға һалыуҙан тартыныу тойғоһо ғына туҡтатып торҙо уны.

Йәнифә әбей улының киң яурындарынан тупылдатып һөйөп алған булды, ҡупшы кейеменә, һыҙылып торған ҡара мыйыҡтарына, тулы йөҙөнә текләп ултырҙы.

— Теләгеңә ирештең инде, улым. Ата-бабаңда булмаған һөнәрҙе алдың. Инде өйлән, улым, утыҙға аяҡ баҫаһың бит. Көнһылыу һаман һине көтә, шикелле.

Был хәбәр инде Мстиславты тетрәндерҙе.

— Әсәкәйем, һин генә мине кисерә алаһың. Мин гонаһлы. Мин бит икенсе ҡыҙҙы яратам.

— Мәрйә түгелдер бит?..

— Мәрйә шул, әсәй. Көнһылыуҙы мин яратып өлгөрмәгәйнем бит.

— Уй, балам. Ояты ни бит. Кеше рәнйеүен алаһың, бәхетле булһаң ярар ине.

— Булырмын, әсәй. Ағайым Сафагирәй Аҡбулатҡа барып, ғәфү үтенер бәлки. Мин бара алмайым инде. Ике-өс көнгә генә ҡайттым. Туғаныреуға, күршеләргә әйт, кемгә табип ярҙамы кәрәк, килһендәр. Үҙем барырмын. Ярҙамым өсөн бер ни ҙә алмайым.

Динен алмаштырыуы тураһында әсәһенә әйтергә теле әйләнмәне.

“Табип Мөхәмәтхан ҡайтҡан, ауырыуҙарҙы ҡарай” тигән хәбәр ҡарлуғас ҡанатына йәбешеп йөрөгән кеүек ауылға бик тиҙ таралып өлгөрҙө. Күп тә үтмәй, күрше ҡатын ҡобараһы осоп килеп тә инде.

— Мөхәмәтхан ҡәйнеш, ике йәшлек улыбыҙға әллә ни булды ла ҡуйҙы. Хәле юҡ, һуҙылып тик ята, күҙен дә йүнләп аса алмай, инеп кенә сыҡ инде.

Мөхәмәтхан һәр ваҡыт үҙе менән бергә йөрөтә торған трубкаһын, градуснигын алып, күршеләренә инде. Малай ысынлап та хәлһеҙ ята, тәне ут кеүек яна.

— Ҡоҫманымы?

— Юҡ та ул. Ауыҙына һыу ҙа ҡапмай.

Мөхәмәтхан тыңлап ҡараны, телен сығартты, ҡолаҡ арттарына, муйынына сыҡҡан ҡыҙыл бөрсөктәрҙе күргәс:

— Ҡыҙылса йоҡторған улығыҙ, урыҫса әйткәндә корь була. Ятып торһон, сәй эсерегеҙ. Үтер.

— Эй, хәйерһеҙ, өсөнсө көн генә ҡоҙаларға ҡунаҡҡа алып барған булғайныҡ. Балалары мөйөштә ята ине. Шунда йоҡторғандыр инде.

— Ике-өс көндә үтә. Балалар ауырыуы ул. Иртәгә тәне ҡысып, сәбертер. Тырнамағыҙ, ҡутырлап китмәһен, инфекция эләгер. Сәй, ҡорот иҙеп эсерегеҙ.

— Ярар, рәхмәт, ҡәйнеш, — тип өҙөлөп-өҙөлөп ҡалды еңгә тейеш кешеһе.

Өйөнә ҡайтып, әҙ генә башын мендәргә терәп тә өлгөрмәне, үрге остан бер ағай ах та ух итеп килеп инде.

— Мөхәмәтхан мыртый, бисә менән әллә ни булды, эсенән түҙә алмай бит әле. Ҡыуандыҡҡа алып китәр инем, күҙ терәге кеше юҡ.

— Ауырлы түгелме? — тип кенә һораны йәш табип.

— Юҡ та.

Мөхәмәтхан барып ингәндә, йәш ҡатын, ҡара тиргә төшөп, эсен тотоп, бөгәрләнеп ята ине. Ят иргә ҡорһағын асып күрһәтергә тартынып бер булды был хужабикә. Табип үҙе ҡыйыу ғына тотондо, ауыртҡан урынының бүртеп сыҡҡанын күргәс тә, һуҡыр эсәге тулышҡанын аңланы. Тотоп ҡарауға ҡабарып, ҡатып тора.

— Ҡоҫторамы?

— Уҡшыта инде.

— Кистән бире аҡтарып ҡоҫто инде, — тигән булды йөҙө ағарып киткән ире. — Йәшел үте сыға башланы.

— Кисә ни ашанығыҙ?

— Ҡаҡлаған ҡаҙ бешергәйне лә. Миңә бер ни ҙә булманы. Үҙенә яраманы ла ҡуйҙы.

— Аңланым, ағай. Еңгәнең ашҡаҙаны, бауырына һуҡҡан.

— Кисә анау Бибиғәйшә инәйҙе саҡырып, әмәлләтеп тә ҡарағайныҡ та ул. Юҡ, баҫылмай. Ул ни: “Мал һуйған ергә ярау иткәндер”, — тип өшкөргән дә булды ла.

— Сәй эсерегеҙ, эсен йыуҙырырға кәрәк. Ҡабат һимеҙ, ҡаҡланған, ыҫланған ит, балыҡ ашамай торһон. Бик ауыр булһа, Ҡыуандыҡҡа хәстәханаға алып барығыҙ, бәлки, операция кәрәгер. Диагнозын яҙып бирәм.

— Юҡ, тәнемә бысаҡ тейҙермәйем, — тип сарбайланы ҡатын. — Бына һин ҡарағас, бәләкәй еңеләйгәндәй булды, ҡулың шифалы, ахыры, мыртый.

— Ни бирәйем икән һиңә, мыртый? Былай буш сығарыу ярамаҫ бит әле.

— Юҡ, ағай, бер ни ҙә кәрәкмәй.

Мөхәмәтхан был уңайһыҙ хәлдән тиҙерәк сығып китеү менән ҡотолорға булды.

Ауылда ул иртәнсәк оҙаҡ йоҡлап өйрәнмәгән ине. Таң ҡыҙарып яҡынлауға көтөүсе һайтылдап, урам буйлап "һәш тә һәш" тип һыйырҙарын ҡыуған тауыштарға уянды, һалҡын һыу менән, биленән яланғасланып, ҡойоноп алды.

— Ағай, әйҙә әле Ҡаранйылға тамағына! Малай саҡты иҫкә төшөрөп, балыҡ ҡармаҡлап ҡайтайыҡ, еңгәмдең иртәнге сәйе өлгөргәнсе, — тип күршеләге ағаһын әйҙәләне Мөхәмәтхан.

Ажауҙар синерткәгә яҡшы ғына ҡаба ине. Ағаһы балыҡҡа бик әүәҫлек күрһәтмәй генә ҡармағын ташлап, һүҙгә әүрәп ултырҙы.

— Эй, мыртый, һине урыҫҡа әйләнгән тип, әлләниндәй хәбәрҙәр тараталар. Үҙеңсә һөйләшеүеңде таштамағанһың бит, үҙебеҙсә, үҫәргәндәрсә ҡайһылай матур итеп һөйҙәшәһең, ярай әле.

— Һөйләһендәр. "Ил ауыҙы — иләк" тиҙәр түгелме һуң. Мин әле үҙебеҙҙең үҫәргәндәр телендә китап яҙырға хыялланам. Яңы хәрефтәр уйлап йөрөйөм. Беҙҙең тел бик матур, һәр тарафтағы башҡортҡа яҡын.

— Уныһы ни тағы? Һин табип булманыңмы ни?

— Табипмын да. Бер аҙнанан эшкә тотонам. Үҙебеҙҙең ауылға, бик булмаһа, Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ тирәһенә ҡайтырға ине лә, булманы. Губернатор алманы.

— Әйтәгүр, кәләш яғы нисек әле? Һине теге Көнһылыу һаман көтә бит. Тирә-яҡтан яусылаусылар ҙа булған, тиҙәр. Кире ҡаҡҡан.

— Эх, ағай! Уның алдында мин ҙур ғәйепле. Икенсе ҡыҙға күңелем төштө бит. Бер ни ҙә ҡыла алмайым.

— Һәләк иттең бит, мыртый. Атайың һөйләшкән кешенең балаһын кире ҡағаһың. Сәхипкирәй ағай булһа, арҡаңа ҡамсыһын һалыр ине.

— Шулай ҙа ул. Күңелем икенселә бит.

— Хәлдән килгәнсе туй яһар инек. Былай нисек була инде? Ҡазан һынлы ергә туй тип барып буламы инде? Әйтәгүр, алыр кешең мәрйә түгелдер бит?

— Ул турала әйтмәй торам әле, ағай. Борсолмағыҙ. Һеҙгә хәүеф килтермәм. Әсәйем дә борсола. Ағай, һин Аҡбулатҡа барып, Көнһылыуға төшөндөр инде минең хәлде. Ғәфү итә күрһен мине. Данын сығарҙым, ғүмерем буйы онотмам.

— Шулай ҙа, был башҡортса булмай бит әле. Йәрәшелгән ҡыҙҙан баш тартмайҙар.

— Ағай, атайым урынына ҡалған кешеһең, аңла инде мине, башҡа сарам юҡ.

— Нишләйем, утыҙға еткән иргә аҡыл биреүе лә ҡыйын миңә, ағай булһам да.

— Эх, ағай, үҙ яғыма ҡайтып, хәстәхана асып ебәрергә лә, халҡыбыҙҙы наҙанлыҡтан сығарырға ине. Ғәмһеҙлеккә төшәләр бит.

— Был уйҙарыңа минең баш етмәй, туғаным, Хоҙай тәғәлә сабырлыҡ бирһен, ярҙамынан мәхрүм итмәһен.

— Ағай, ҡарағат бешкән түгелме һуң? Ана яр буйында умырылып ултыра. Ҡустыларҙы, һеңлеләрҙе ебәрәйем, йыйһындар.

Мөхәмәтхан түҙмәне, услап-услап ҡара ҡарағатты ауыҙына алды.

Шул арала ағаһының кесе улы Ниғмәт һыу буйына йүгереп килеп етте.

— Әсәйем иртәнге сәйгә ҡайтһындар, ти, атай!

— Ярар, хәҙер. Ал ана теҙгесте, ажауҙар ҡапты, йыуып, тоҙлап, таҡтаға теҙеп ҡуйығыҙ!

Ағаһы менән мыртыйы һыу буйынан ҡайтыуға еҙ самауыр өҫтәлгә ҡунаҡлаған, быуын бөркөп ултыра ине. Эргәһендә йомро йомортҡалар, яңы ғына айыртҡан ҡаймаҡ, сөсө көлсә.

Сәйҙе эсеп бөтөр-бөтмәҫтән тағы кемдер табипҡа килеп тә етте. Мөхәмәтхан ауылдағы бер генә ауырыуҙы ла ҡарамай, ярҙам итмәй үтмәне. Уның һөнәренә, ҡулының шифаһына, күңеленең сафлығына тамам ышандылар ауылдаштары. Күбеһе бәләкәй балаларын күрһәтеп ҡалырға тырышты. Фатима апаһы ғына, ауыл халҡы бик әрһеҙләшә башлағас, ҡайһы береһенә ҡатыраҡ та бәрелде: “Китсе-кит, беҙ бала үҫтермәгәнме ни? Кем балаһы ауырымай үҫә. Ауырый ҙа шәбәйә лә китә инде ул”. Табип Мөхәмәтхан ғына һис иренмәне, һәр береһенә ҡулын һуҙҙы.

Йәш табип туғандарын, ауылдаштарын күреп, хәлдәрен белеп, күңеле тынысланып кире Ҡазанға юлланды. Оҙаҡламай ул тәғәйенләнгән Ялсыҡай ауылына баш табип булып барып та төштө. Ауылдың исемендә “кесе” һүҙе булһа ла, улай уҡ бәләкәй, төпкөл ауыл түгел ине Ялсыҡай. Етмәһә, үҙендә хәстәханаһы бар. Ул заманда күп урында дауалау йорто юҡ ине әле. Ауылда урыҫ ғаиләләре лә байтаҡ булып сыҡты. Бында инде Мөхәмәтхан Мстислав Александрович булып танылһа ла, татарҙар менән саф татар телендә аралашты. Үҙ телдәрен белгән табипты күрмәгән халыҡ бик ҡәнәғәт булды. Ләкин баш табип бында нигеҙләнә алманы, уны бер йылдан Ҡазанға саҡырҙылар.

## 3. Эй, Ҡазан, моңло Ҡазан, нурлы Ҡазан!

Александр Казимбек онотмаған булып сыҡты. Үҙенең университет етәкселеге алдында булған оло абруйын файҙаланып, билдәле ғалим табип Мстислав Ҡулаевты Ҡазанға саҡыртып алды һәм эске ауырыуҙар буйынса белемен тәрәнәйтеү маҡсатында ординатураға уҡырға алдырҙы, бер юлы ҡала хәстәханаһына эшкә урынлашырға ла ярҙам итте. Был юлы башҡорт балаһын моңло Ҡазан нурлы йөҙө менән ҡабул итте. Мстислав Ҡулаевтың артабанғы яҙмышы, үҙенең башҡорт илен һағынып, уның яҙмышын үҙ яҙмышына бәйләп йәшәһә лә, был ҡалала мәңгелеккә ҡалды.

Ординатурала уҡыуының тәүге йылында уҡ Мстислав үҙенән бер генә йылға һуң уҡыған Нина исемле үлеп яратҡан ҡыҙына өйләнеп ҡуйҙы. Никахлашыу сиркәүҙә башҡарылды, шунда теркәлде. Мстислав тыштан булһа ла христианлыҡ йолалаларын үтәргә, хатта суҡынырға, тәре үбергә мәжбүр булды. Отец Матвей менән уның ҡатыны был яңы христиандың һәр хәрәкәтен иғтибар менән күҙәтеп торҙо, уның

ихласлығын тойоп, ҡәнәғәт булдылар. Урыҫтарҙағы таралған әҙәп буйынса, “ярар, милләте, ҡиәфәте кем булһа ла, үҙе яҡшы булһын!”, тигән ҡарашта торҙолар.

Кейәү кәләшенең өйөнә йәшәргә күсте. Үҙ өйө кеүек яҡын донъяға әйләнгәйне инде был йорт. Бында йылы, тамаҡ һыйлы ине. Ун дүрт йәшенән үҙ йортонан айырылған ир өсөн ожмах ине был. Икенсе йылға йәштәрҙең тәүге ҡыҙы ла донъяға килде.

Мстислав ошо тәүге ҡыҙына ғүмер буйы һөйөндө, ҡыуанысын йәшерә алмай, асыҡтан-асыҡ ғорурланды:

— Минең Еленам — ысын башҡорт ҡыҙы, — тип маһайҙы ул таныштары, дуҫтары алдында, — әсәйемә оҡшаған, ҡойоп ҡуйған тиерһең. Шундай уҡ ҡуңыр йөҙлө, сөм ҡара шыма сәсле, йомро кәүҙәле, күҙҙәре лә тап башҡортса ҡапысланыбыраҡ тора. Холҡо менән дә ябай, тоғро.

Мстислав менән Нина өйләнешеп, бергә биш йыл самаһы йәшәүгә, отец Матвей ҙа, ҡәйнәһе лә гүр эйәһе булып ҡуйҙылар. Ир менән ҡатын мөхәббәтендә, бала тәрбиәләүҙә Мстислав был ғаиләнән күп нәмәгә өйрәнеп ҡалды. Отец Матвей, рухани кеше булһа ла, балаларына ирек ҡуйҙы, уларҙың ихтыярын баҫманы, үҙ баштары менән йәшәргә өйрәтә ине. Ғаиләлә үҙе баш, үҙе түш икәнен дә онотманы, уның һүҙе һәр ваҡыт өҫтөн булды. Холҡонда еңмешлек булһа ла, тыңлауһыҙлыҡ юҡ ине. Йәштән үҙ эҙмышын үҙе хәл итеп өйрәнде ул. Яңы ғаилә тәртибенә күнеп йәшәп китеү уға әллә ни ауырға төшмәне.

Ҡәйнәһе менән ҡайныһы бар саҡта уҡ йәштәрҙең йәнә ике ҡыҙы, Вероника менән Татьяна, донъяға килде. Ғаилә ишле, шау-шыулы, ләкин татыу булды. Мстислав гел ҡыҙҙар тапҡан ҡатынына үпкәләп тә алған була.

— Фамилия юҡҡа сыға бит. Ҡулаевтар ҡайҙа була? Әллә йәнә бер ынтылыш яһап ҡарайбыҙмы? — тигән була. Был инде тап башҡорттоң аңы ине. Ҡыҙҙарының өсөһөнә лә атай фамилияһын яңы фамилияларына ҡушып йөрөтөргә кәңәш итеп ҡараны. Араларынан яратҡан оло ҡыҙы Елена ғына атаһының теләгенә тоғро булып, ғүмере буйы ире фамилияһы янына Соколова-Ҡулаева тип уның фамилияһын да өҫтәп йөрөттө. Ошо ҡылығы менән дә башҡорт нәҫелле атаһына ҙур ҡәнәғәтлек бирҙе ул.

Аталары ҡыҙҙарына башҡорт рухын һеңдерергә тырышты. Өйҙә һөйләшеү, аралашыу гел урыҫса ғына барһа ла, башҡорт телмәрен балаларына ишеттерергә лә өлгөрә ине ул, үҙенең зат-ырыуы, халҡы тураһында ла һөйләне.

Бер көндө ҡыҙҙары, ҡатыны көтмәгән хәлдән аптырап ҡалдылар. Нина — эштән, балалары уҡыуҙан ҡайтыуға, аталарының эш бүлмәһенә башҡорт йөҙлө, мыҡты кәүҙәле егеттәр тулған ине. Ҡайһыныһылыр ҡурай һыҙғырта, икенсе береһе моңло тауыш менән әкрен генә йыр һуҙа.

— Минең яҡташтар килде, башҡорт егеттәре, — тине хужа ғорурлыҡ менән. — Ҡана, Нина, сәйеңде әҙерлә, ялан яғы мәтрүшкәһен һалырға онотма. Ҡазан университетында уҡый барыһы ла. Бына тигән егеттәр. Һайлап алған кеүек.

Егеттәрҙең береһе сөйҙә элеүле торған йүгәнде күреп ҡалды.

— Ай, яҡташ ағай, көмөш менән нағышланған да баһа йүгәнең, — тип ҡысҡырып ебәрҙе, ҡара ҡайыш йүгәнде һыйпап ҡараны.

— Ә бынныһы ҡылған да баһа. Әллә үҙегеҙҙең Ырымбур далаһынанмы?
— Эйе, Һаҡмар буйындағы тауҙан. Яратам шул ҡылғанды. Бигерәк тә ана шул ялбырлап башын сығарған сағында. Үҙебеҙҙең халыҡ кеүек, мәңгелек үлән бит ул. Уны сәсеп үҫтереп тә булмай.
Яҡташ егеттәр бүлмәнең ҡап уртаһында стенала элеүле торған ялбыр ҡылғанға, көмөш төймәләр баҫылған йүгәнгә һоҡланып туя алмай ултырҙылар.
— Егеттәр, мин һеҙгә бер серемде асам әле!
— Әйҙәгеҙ, ағай, әйҙәгеҙ, тыңлайбыҙ.
Дүрт егет яҡташ ағалары янына өйкөлөшә һалды.
— Мине студент сағымдан борсоған бер хәлде, бәлки, беләһегеҙҙер?
— Юҡ, ағай.
— Беҙҙең башҡорттоң үҙ яҙыуы юҡ бит.
— Ә теге кәкерсәктәр, төрткөләр менән яҙылған Ҡөрьән яҙыуы беҙҙеке түгелме ни?
— Түгел шул. Ул беҙҙең башҡорт теленең өндәр системаһына ҡулай түгел, уҡыу, яҙыу өсөн бик ауыр. Мин еңел генә өйрәнеп була торған хәрефтәр эшләмәксемен. Балаларыбыҙ бит өс-дүрт йыл эсендә генә әлептең таяҡ икәнен белеп сыға. Кириллица еңел. Мин ошо яҙма нигеҙендә башҡорт яҙыуы төҙөргә уйлайым.
— Ҡыҙыҡ был, ағай!..
— Беҙҙә булмаған ч, ц, щ, ъ, ь хәрефтәрен бөтөнләй алмайым, былдай өндәр башҡорт телендә юҡ, уларға билдә лә кәрәкмәй, ө, ә, ҙ менән һ, ҫ өндәренә айырым билдә ҡуям. Улары өсөн урыҫ хәрефтәренә латин хәрефтәрен өҫтәйем.
— Ай-һай, ағай, беҙҙе ғүмерҙәре буйы ғәрәп хәрефтәренә уҡытҡан хәлфәләр, муллалар урыҫ хәрефтәренә күсергә риза булырмы икән?
— Тап өҫтөнә баҫтың, мыртый. Был эшемдең ни менән бөтөрөн үҙем дә әйтә алмайым әле. Беҙҙә дини фанатизм көслө әле. Ҡаршы сығыусылар булыр. Ә бит Рәсәйҙә бар ғилем ошо кириллица менән яҙыла. Шуны аңларға кәрәк.
— Беҙ аңлайбыҙ ҙа ул…
— Тотош алғанда был хеҙмәтем "Башҡорт теленең өн әйтелеш нигеҙҙәре һәм тотороҡло алфавиты" тип атала. Ул әле ҡулъяҙма хәлендә. Мин уны стеклограф ысулы менән булһа ла баҫтырып, белгестәргә таратасаҡмын.
— Ә бында, Ҡазанда, башҡорт алфавитын аңлаусы булырмы?
Был һорауҙар асылын, ниҙәр менән бөтөрөн Мстислав үҙе лә аныҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмай ине әле. Был ҡалала бит башҡортҡа айырым алфавит төҙөтөп, ғәмәлгә индереү түгел, уның айырым тел икәнен дә аңлатыу булмаҫтай хәл ине. Христианлыҡты, башҡорт өсөн китаптар яҙып таратыусы урыҫ миссионерҙары татар зыялыларының фекерен ҡабатлай. Башҡорт араһынан сыҡҡан ғалимдар юҡ дәрәжәһендә. Башҡорттарҙың урындағы халыҡ телен һәр төрлө тарафтарға сығып өйрәнеүселәр юҡ тиерлек, телселәр бер әйтелгән фекерҙе ҡабатлай ҙа ҡабатлай. Катаринский менән Бессоновтың хеҙмәттәре күмелеп ҡалды, онотолоп бара.
Яҡташтар ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшкән арала ишектән хужабикәнең һыны күренде.

— Мстислав, декорацияны алыштырырға ваҡыт, сәй әҙер. Егеттәрҙең башын бөтөнләй ҡатыраһың бит.

— Әйҙәгеҙ, егеттәр! Сәй эсерлек булдыҡ, шикелле. Әшрәф, һин ҡурайыңды ла ал! Минең ҡыҙҙар ҙа тыңлаһын әле башҡорт моңон.

— Ебәр берәй оҙон көйҙө!

Әшрәф күкрәген киреберәк тын алды ла көпшәһенә өрөп ҡуйҙы.

— “Таштуғай”, — тине ул, ниндәйҙер тантаналылыҡ менән. Көй артынан көй яңғырап ҡына торҙо. Ниндәйҙер дәртле генә бейеү көйөн дә уйнап ебәргәс:

— Һайт! Һайт! — тип яурындарын һелкетеп алған булды өй хужаһы, ҡурайсыға дәрт өҫтәп.

Хужаның өс ҡыҙы ла, ҡатыны ла күңелле барған был тамашаны ихлас күҙәтә ине.

Ҡурайсы туҡтауға, Нина балан, ҡарағат ҡаҡтары килтереп, өҫтәлгә теҙҙе, әллә ниндәй тәмле ҡаластар, бөйөрәктәр һалды. Ҡунаҡтар тәмле мәтрүшкә еҫе борҡоп торған һөтлө сәйҙе маҡтай-маҡтай эсеп алдылар.

— Был ағайҙар тағы киләме? — тип ҡыҙыҡһынды ихлас Елена.

— Килерҙәр, — тине әсәһе. — Атайыңдың яҡташтарын күргеһе, башҡорт моңон тыңлағыһы килә бит.

— Миңә лә уларҙың моңо оҡшай.

Егеттәр, һағыштарын баҫҡандай булып, ҡайтып киттеләр, улар яҡташ ағалары саҡырған һайын, бар эш-мәшәҡәттәрен ташлап, был йылы өйгә ашҡынып килделәр. Ағай үҙе лә, уның ҡатыны ла бик алсаҡ, асыҡ кешеләр ине.

## 4. Өҙөлгән өмөттәр

Яңы алфавитты эшләүҙе, уны ғәмәлгә ашырыуҙы бер аҙға туҡтатып, үҙ һөнәре буйынса ғилми эштәрен ҡуҙғатып ебәрҙе йәш табип Мстислав. Университетта докторлыҡ һынауҙарын уңышлы үтеп, үпкә сирен дауалау буйынса диссертация әҙерләүгә тотоноп китте. Ҡазан губернаһы клиникаларынан бик күп материал тупланы, ғилми хеҙмәттәрен дә дөйөмләштереп, күп кенә лаборатор эштәр үткәреп, өс йөҙ битлек хеҙмәтен яҙып һалды. Яҡлауға әҙерлек эштәрен башҡарып йөрөгәндә, бөтә илде иҫәңгерәткән хәл килеп тыуҙы — герман һуғышы башланды. Рәсәйҙең һуғышҡа ярарлыҡ ир-атына ҡорал тоттороп, көнбайыш сиккә ебәрә башланылар.

Ҡырҡ йәшлек тәжрибәле табипты ла, өс үҫмер балаһы булыуға ҡарамаҫтан, хәрби хеҙмәткә алдылар. Ул эләккән ялан госпитале Варшавала ине. Мстислав Ҡулаев быға бик шатланды: был ҙур Европа ҡалаһында бәлки диссертацияны яҡлап булыр. Ҡулаев тиҙ арала Варшава университетына барып та сыҡты. Ыңғай яуап алһа ла, был хыялы ла тормошҡа ашмай ҡалды, хәрби тормош үҙ ҡанундары менән йәшәне.

Рәсәй ғәскәрҙәре бик тиҙ арала Варшаванан көнбайыш Украинаға, унан йәнә көнсығышҡа сигенде, ялан госпитале армиянан алғараҡ тылға күсенде. Ике-өс ай эсендә алты мәртәбә торған урынды үҙгәртергә тура килде. Йәш табип-һалдат ҡайғы, аһ-зары эсенә сумды. Тәүлектең ял сәғәттәре юҡ һымаҡ ине, баш терәп кенә ала ла йәнә операция, үлем менән көрәш.

Киев ситендәге Дарница станцияһында хәрби госпиталь ай самаһы торҙо. Көндөҙҙәрен фронттан туп тауыштары ишетелеп тора, төндәрен офоҡ, ялағай ялтыраған кеүек, туҡтауһыҙ яҡтырып тора.

Баш табип ауыр яралылар палатаһын ҡарап йөрөй ине. Урта йәштәрҙәге, битен ҡара һаҡал баҫҡан башҡорт йөҙлө бер ир күҙенә ташланды уның, одеялын асып ебәргәйне, табиптың иҫе китә яҙҙы. Был меҫкендең ике аяғы ла тубыҡ өҫтөнән юҡ ине. Яралының ике күҙенән йәштәре атылып сыҡты.

— Доктор, хәлем насар бит. Берәй дарыу биреп кенә теге донъяға ебәр ҙә ҡуй инде мине, — тип инәлә башланы ул, күҙҙәрен мөлдөрәтеп. — Кемгә кәрәк мин хәҙер?

— Улай тимә, туғаным, Хоҙай һинең ғүмереңде алмаған бит. Уның ихтыярына ҡаршы барырға ярамай. Гонаһ был, — тип тынысландырырға тырышты табип, башҡортсалап. — Әллә ҡурай тартаһыңмы?

Яралының баш осондағы мендәр аҫтынан еҙ ҡурайҙың осо күренеп тора ине.

— Тарта инем дә, хәҙер күңел төшмәй.

— Үҙең ҡайһы яҡ башҡорто? Берәй көй уйнап күрһәт әле.

— Яйыҡ башынан мин. Тау башҡортомон. Ирәмәл итәгендә ята беҙҙең ауыл.

Яралы күҙендә өмөт уттары тоҡанғандай булып китте, офицер погондары таҡҡан баш табиптың башҡортса йылы өндәшеүе күңелендә ниндәйҙер өмөт статҡылары тоҡандырҙы, ахыры.

— Ҡана һуң, тартып булһа. Бындағы халыҡ аңламаҫ шул.

— Аңлар. Моң бит ул. Уның үҙ теле бар.

— Һеҙҙең өсөн генә булһа ла тартайым әтеү.

— Эх, һағындым ҡурай моңон.

Яралы ҡурайын алып, ятҡан килеш бер оҙон көйҙө шыңғыратып ебәргәйне, уның карауаты тирәһенә һалдаттар йыйылып китте.

— Еще, еще сыграй!

— Это что за инструмент? Сопелка что ли?

— Нет, это — флейта, — тип үҙенең белемлеген күрһәтергә маташты икенсе береһе.

— Сопелка ла, сыбыҙғы ла, флейта ла түгел был, братцы, — тине ҡурайсы. — Это — ҡурай башкирский. Ышанмаһағыҙ, мә, өрөп ҡарағыҙ.

Ике ҡулы ла һау бер яралы еҙ ҡурайҙы алып, тишектәрен ҡараны, ике яҡлап та өргән булды, ыш-ыш ҡына итте лә ҡуйҙы ҡорал, моң түкмәне.

Яралылар ҡурайҙы ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, әйләндереп-әйләндереп ҡарап ултырҙылар. Ҡурайсы йәнә уны ҡулына алды ла, ике яғынан да өрөп, тауыш сығарып күрһәтте, шунан бер дәртле марш уйнап ебәрҙе.

— Да, чудо!

— Мөғжизә бит был, көн дә уйна һин беҙгә, энекәш, — тип һалды бер оло ғына һалдат.

— Ҡана, егеттәр, кемдә ни бар? Давай сюда в общий котел.

Теге бүркен сисеп, рәт буйлап ебәрҙе. Ҡурайсы ныҡ уңайһыҙланды.

— Ҡуйығыҙ әле, ағай-эне, мин баш табип, майор әфәнде һораған-ға ғына уйнаным бит. Улай ҡыланһағыҙ, ҡабат ҡулыма ла алмайым ҡурайымды, тәҙрә аша ырғытам.

— Ярар, энекәш, ҡабат улайтмабыҙ, үпкәләмә инде.

Бер аҙҙан барыһы ла үҙ урындарына таралды. Баш табип ҡына ҡурайсы янынан тиҙ генә китә алмай аҙапланды.

— Иҙел үренең ҡайһы ауылынан һин? — тип һаман төпсөндө ул ҡурайсынан.

— Ҡатау улысы Сысҡан ауылынан.

— Эй, туған. Мең туғыҙ йөҙ икенсе йылдың йәйендә мин һеҙҙең ауылда булдым бит.

— Унда нишләп йөрөнөгөҙ, майор әфәнде? Урман ҡырҡыуҙамы әллә? Беҙҙең яҡтан Иҙел буйлап та, Яйыҡ буйлап та һал төшөрәләр.

— Юҡ. Мин Ҡазан университетында уҡый инем әле. Һеҙҙең яҡтарҙа халыҡтан йыр, әкиәт, ҡарһүҙ йыйып йөрөнөк.

— Уны йыйып бөтөрөп буламы ни инде. Ул ҡарһүҙ тигән нәмә һәр кемдә бер арба ла бер тоҡ, тиҙәр.

— Һеҙҙең яҡта Рәүәт, Манышты, Бәрҙеғол ауылдарында яттыҡ. Эх, матур яҡ бит!

— Шулай шул, табип ағай! Бер ҡайтып күрә алһам ине лә ул, үлһәм дә үкенмәҫ инем.

— Күрерһең, туған. Минең адресты яҙып ал әле, ҡайтҡас, хат яҙышып торорбоҙ. Мин хәҙер Ҡазан кешеһе, ғаиләм дә шунда ҡалды. Шунда ҡайтырмын инде, һуғыш бөткәс, Алла бирһә.

— Үҙең ҡайһы яҡ һуң, табип ағай?

— Мин Һаҡмар буйынан. Урал тауҙарының иң осонан, беҙҙең яҡтан дала башлана.

Ошо ихлас һөйләшеүҙән һуң госпиталдең баш табибы менән был яралы араһында туғандарса йылы мөнәсәбәт урынлашты. Табип майор көн дә тиерлек ваҡыт табып, уның янында яртышар сәғәт кенә булһа ла туҡтап, хәлен, кәйефен белешеп йөрөнө. Йөҙәрләгән яралылар ҡурайсыға көнләшә биреп тә ҡуйҙы. Башҡорттоң башҡортҡа булған күңел яҡынлығын уларҙың күбеһе аңлап та етмәй ине һымаҡ. Госпиталдәге ауырыуҙарҙы, саҡ ҡына арыулана башлаһалар, тылға оҙатып торҙолар. Улар урынына яраларҙан ҡанһырағандары килеп тулып торҙо.

Айырылышҡанда ҡурайсының да, госпиталь начальнигының да күҙҙәренән йәш килде.

— Майор ағай, һин генә мине ҡотҡарҙың, — тине ул. — Иҫән-һау илемә ҡайтып, донъя ҡора алһам, мин һине атайым урынына күреп, ололап саҡырырмын.

— Ярар, теләгең ҡабул булһын.

Мстислав уны оҙаҡ онота алмай йөрөнө, һағынды. Ләкин көн эсендә генә түгел, сәғәт эсендә алмашынып торған һуғыш хәлдәре хәтерҙе лә тоноҡландыра ине.

### 4. Ҡанаттарым булһа…

1917 йылдың көҙөндә ҡапыл башланған беренсе донъя һуғышы көтмәгәндә туҡтап ҡуйҙы. Ҡаршы торған ике яҡтың да хәле бөттө, шикелле. Шулай ҙа Рәсәй күберәк юғалтыуҙар менән килеп сыҡты. Ҡайҙа ҡарама, ил юлдары буйлап вагон-вагон ғәрип-ғөрәбәләр, сатансулаҡтар, үҙ илен, үҙ донъяһын һағынышып, көнбайыштан көнсығышҡа ағылды.

Һуғыштан айнып өлгөрмәгән халыҡ революция түңкәрелештәрен кисерә башланы. Тетрәтеүҙәрҙән башы сыға алмаған башҡорт Октябрь революцияһына ла килеп инде. Ырымбур, Өфө губерналарында, уларҙан ситтә лә йәшәгән башҡорт халҡы көжгөтөп ебәргән умарта ҡорто кеүек ҡайнаны. Башҡортостандың үҙендә Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә милли-азатлыҡ хәрәкәте тоҡанып китте. Халыҡ лидерҙары башҡорт өсөн берҙән-бер хаҡ юл итеп милли автономия яулауҙы, уны төҙөүҙе һайланы. Был күктән килеп төшкән идея түгел ине, төрлө йылдар, ваҡиғалар аша, халыҡтың булмышына, хыялына тәңгәл килгән юл ине ул. Ләкин башҡорт иле төрлө яҡтан аҡ генералдар, адмиралдар, казачий ғәскәрҙәр тарафынан йолҡҡолана ине. Уларҙың Рәсәй батшалығына тоғро хәрби көстәре, алтын погонлы генералдары милләттең автономия хыялына төкөрөп, мыҫҡыл менән ҡараны. Мәскәүҙәге үҙәк большевиктар власы, уларҙың урындағы хакимдары автономияны ене кеүек күрҙе, милләттең етәкселәре менән бесәй-сысҡан уйыны башланы. Башҡорт халҡының лидерҙары үҙ юлдарын табырға тырышып, көсөнән килгәндең-килмәгәндең барыһын эшләне.

Өс йыл самаһы дәһшәтле һуғыш юлдарын үтеп, ғаиләһен һағынып ҡайтҡан табип Мстислав Ҡулаев, башҡорт халҡының башын ҡалҡытыуын ғүмере буйы көткән кеше, Ҡазанда тыныс ҡына ятып түҙмәне, йөрәге ярһыны, ошо ярһыуын һис баҫа алмай йәшәне һәм күп тә үтмәй яңы ғына ойошҡан Башҡорт хөкүмәте исеменә телеграммалар ебәрҙе:

“20 ноябрь 1917 йыл. Туған башҡорт халҡының ете ырыуының ете атаһы исеменә ете һум аҡса бүлеп ебәрәм. Иркен башҡорт ерендә иркен университет асыр өсөн, ысын күңел менән үтәлеүен ҡабул итегеҙ. Башҡорт Мөхәмәтхан Ҡулаев”.

Күрәһең, ул ваҡытта ете һум да аҡсаға һаналған. Юғиһә, мыҫҡыл һымаҡ ҡабул ителер ине. Исемен дә рәсми Мстислав түгел, Мөхәмәтхан тип ҡуйған, эргәһенә башҡорт икәнен дә белдергән. Был да бер билдә бит. “Халҡыма хеҙмәткә мин әҙер” тигән һүҙ.

Күп тә үтмәй, йәнә эфирға телеграмма оса:

“Башҡортлар. Муйындан бығау төштө. Башҡорт ерләренә лә иркенлек тейҙе. Ҡотло булһын иркенселек. Ҡыуаныслы булһын тиңлек, иркенлек”.

Тәжрибәле табиптың күңеле ашҡынып елкенгәне, ҡош кеүек талпынғаны һирпелеп тора был һүҙҙәрҙән. Бәбәк ярған автономия тураһында ла ишеткән ул, булырына ихлас ышанған.

Түҙеп ята алмай башҡорт улы, был юлы инде Башҡорт өлкә советы Шәриф Манатов исеменә мөрәжәғәт итә: “Присоединяюсь к сынам воскреснувшей Башкирии и желаю братьям моим успешно объединить родной народ в одну целую. Мстислав Кулаев, главврач 275-го запасного госпиталя”.

Күрәһең, һаман табиплыҡ эшенә тотоноп өлгөрмәгән әле ул.

Был аҙымдарын Мстислав ҡатынына әйтеп, уның менән кәңәшләшеп тә тормай яһаны. Йөрәге ныҡ ярһый ине шул. Әйтһәң, тыя башлар, тип уйланы.

Ҙур сәйәсәткә талпынған табип Мстислав Ҡулаев яурындарын яҙып, күтәрелеп килгән халҡын да, үҙен дә ниндәй һынауҙар көткәнен күҙ алдына ла килтерә алмай ине әле. Оло өмөттәр менән яна ғына ине ул.

Башҡорт донъяһы ун етенсе йылғы февраль революцияһынан һуң нығыраҡ ҡайнап китте. Бер-бер артлы үтеп торған сәйәси ваҡиғалар, халыҡтың тупланыуы ошо йылдың йәйендә үҙенең юғары дәрәжәһенә етте. Милли-азатлыҡ хәрәкәте башҡорттар йәшәгән Ырымбур, Өфө, Силәбе, Һамар, Пермь губерналарын солғап алды. Был хәрәкәттән ситтә ятып ҡалған бер генә ауыл да ҡалмағандыр ул дәүерҙә.

Июль аҙағына Ырымбурҙа беренсе бөтә башҡорт ҡоролтайы йыйыла, аҙна буйы эшләй ул. Был ваҡиға башҡорт хәрәкәтенең был ҡалала тупланыуының нигеҙе була. Ҡоролтай милләт өсөн үтә лә мөһим мәсьәләләрҙе ҡарай: Башҡортостан автономияһын төҙөү, уның менән идара итеү системаһы, ғәскәр төҙөү, ер, һуғыш, ҡатын-ҡыҙҙар хәле һәм башҡалар.

Ҡоролтайҙа башҡорттоң ғына түгел, дөйөм төрки донъяһының лидеры, идеологы булып үҫкән Әхмәтзәки Вәлиди буласаҡ дәүләт менән идара итеү һәм ер мәсьәләһе буйынса доклад менән сығыш яһай. Республиканың милли-территориаль федератив принциптарға ҡоролорға тейешлеген нигеҙләй һәм яҡлау таба. Быйыҡ Рәсәйҙең бөтә мосолмандары өсөн берҙән-бер дөрөҫ юл икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ошо ҡоролтайҙа Әхмәтзәкиҙең арҡалаш дуҫтары Сәғит Мерәҫов менән Аллабирҙе Йәғәфәров та һиҙгер сәйәсмәндәр булараҡ танылып ҡалалар.

Үҙ ере булмаған халыҡтар өсөн генә Вәлиди милли-мәҙәни автономияның ҡулай булыуын раҫлай. Таланған, законһыҙ үҙләштерелгән башҡорт ерҙәрен халыҡҡа кире ҡайтарыу мәсьәләһе лә ҡоролтай декларацияһында бик ҡәтғи ҡуйыла. Был эштәрҙең күбеһен килеп тыуған шарттарҙа башҡарып сығыу, ғәмәлгә ашырыу ауыр, хатта мөмкин булмаһа ла, халыҡтың аңын уятыуҙа, хоҡуҡтарын тергеҙеүҙә бик мөһим була.

Ҡоролтай айырым башҡорт ғәскәре төҙөү тураһында ла ҡарар ҡабул итә. Был автономияны үҙ аллы итеүҙә, уның дәүләтселек атрибуттарын нығытыуҙа ышаныслы аҙым ине.

Ҡоролтайҙарҙың икенсеһе лә, өсөнсөһө лә ошо уҡ йылдың октябрь, декабрь айҙарында үтте.

Милли хәрәкәт һаман көсәйә барҙы. Икенсе ҡоролтай менән өсөнсөһө араһында Керенский ҙа ҡолатылды. Октябрь инҡилабы башҡорт хәрәкәтенә яңы көс өҫтәне. Башҡортостан өлкә шураһы (советы) реаль сәйәси көскә эйә була башланы. Ҡоролтайҙа шураның рәйесе итеп Шәриф Манатов, уның урынбаҫары итеп Әхмәтзәки Вәлиди һайланды. Бер-береһен яратып етмәгән, бер-береһенә ҙур ышаныстары булмаған кешеләр бер тәртәгә егелергә мәжбүр булды. Шураның төп эш урыны итеп Ырымбур, ундағы башҡорт йорто — тарихи Каруанһарай билдәләнде. Быныһы ла ҙур символик мәғәнәгә эйә ине.

Өлкә шураһы үҙ хәрәкәтен туҡтауһыҙ дауам итте. Ун етенсе йылдың 11 ноябрендә беренсе фарманын иғлан итте. Унда Керенский хөкүмәтен яҡламаҫҡа, уның башҡорттар өсөн зыянлы булыуын билдәләне. Асылда был автономияның нигеҙ ташын һалыу ине. Рәсәй дәүләтенең буласаҡ федератив ҡоролошона тәүге етди ынтылыш яһалды.

Рәсәй кеүек ҙур илдә яңы аяғын баҫа башлаған Совет власы һүҙҙә генә булһа ла был милли хәрәкәт менән иҫәпләшмәй булдыра алманы. “Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары” декларацияһында милләттәрҙең

тиңлеге һәм суверен хоҡуҡтары иғлан ителде. Был алға табан бер аҙым ине.

Йәш совет хөкүмәте өсөн милләттәр яҙмышы йыш ҡына беренсе урынға күтәрелеп торҙо. РСФСР тип аталған дәүләт ҡалҡып сыҡты. Уның Халыҡ Комиссарҙары Советы беренсе аҙымында уҡ Украинаның, Финляндияның, Кавказ аръяғының һәм Белоруссияның бойондороҡһоҙлоғон таныны. Федерация шулай яралды, аҙағыраҡ берәм-берәм автономиялар таныла башланы.

Большевиктар хөкүмәтен Рәсәйҙең ҡап уртаһында тиерлек ҡуҙғалып киткән башҡорт хәрәкәте ныҡ борсой, хатта ҡыҙҙыра ине. Былар артынан Оло Иҙел буйының башҡа халыҡтары ла уяныуы мөмкин бит. Шуға күрә лә инде башҡорттарҙың талаптарын, тәкдимдәрен тиҙерәк өйрәнеп, асылына төшөнөп, нисек тә уларҙы тынысландырыу кәрәк. Былай-улай ғынамы ни, үҙ ғәскәрҙәрен төҙөп маташалар бит. Элекке казачий халыҡ, тарихта бунтарлыҡтары ла билдәле. Ҡайһы яҡҡа боролалар? Ә бөйөк Рәсәй тотош ут эсендә, уның һәр тарафында аҡтар хәрәкәте Мәскәү яғына ҡарап юл ала.

Илдә граждандар һуғышы тоҡанып барғанда ғына, 1918 йылдың 15 ноябрендә Башҡортостан өлкә шураһы үҙ автономияһын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итеп, халыҡҡа иғлан итте. Күп тә үтмәй үҙенең икенсе фарманын сығарҙы. Был тарихи документҡа шураның рәйесе Шәриф Манатов менән уның урынбаҫары Әхмәтзәки Вәлиди, йәнә алты ағзаһы ҡул ҡуйҙы. Фарман Башҡортостандың сиктәрен билдәләй: уның эсенә Ырымбур, Һамар, Пермь, Өфө губерналары индерелеп, Оло Башҡортостан хасил була. Ҡоролтай Башҡортостан йөмһүриәте конституцияһының төп положениеларын да эшләргә тейеш ине. Тыуып килгән дәүләтселектең тәүге аҙымдары булды был.

Ошо ваҡиға хаҡында большевистик “Правда” гәзите яҙып сыҡты хатта. Өлкә шураһы автономияның идара итеүсе төп дәүләт ойошмаһы итеп танылды.

Өлкә шураһы рәйесе Шәриф Манатов Петроградҡа, В.И.Ленинға, Башҡорт автономияһы төҙөлөү тураһында телеграммалар бирҙе.

Декабрҙә үткән өсөнсө башҡорт ҡоролтайына урыҫ, мари, сыуаш халыҡтарының вәкилдәре лә саҡырылды. Ҡоролтайҙың рәйесе итеп был юлы Әхмәтзәки Вәлиди, уның урынбаҫары итеп Фәхретдинов, Бикбов, Манатов, Ибраһимовтар һайланды. Был юлы милек, ер, аҙыҡ-түлек, финанс мәсьәләләре, шулай уҡ ҡораллы көстәр төҙөү ҡаралды. Әхмәтзәки Вәлиди Башҡортостан автономияһының сиктәре буйынса ла сығыш яһаны. Башҡорттар йәшәгән ерҙәр тотош автономия эсенә алынырға тейеш ине. Уездар урынына революцияға тиклем булған кантондарға бүленеш системаһы раҫланды, туғыҙ кантон 75 улысҡа бүленергә тейеш булып сыҡты.

Ҡоролтайҙан күп тә үтмәне, боронғо башҡорт ерҙәрен төрлө көстәр бер-бер артлы баҫып ала, төрлө исемдәр биреп, үҙенә ҡарата башланы. Генералдарҙың һәр береһе үҙ армияһының штык һәм ҡылысы менән инеп, башҡорт ерҙәрен дағалы ат тояҡтары менән иҙҙе, үткән ерҙәрендә үҙ хакимлығын урынлаштырҙы, үҙ сәйәсәтен өҫтөн ҡуйып, ерле халыҡҡа көсләп таҡты. Бөтәһенең дә эш-хәрәкәте бер — башҡорттоң меңәр йыллыҡ көрәшен сүпкә лә һанамау, уның автономияға ынтылышын, өмөтөн аяҡ аҫтына һалып тапау.

Башҡортостан йөмһүриәтен төҙөү тураһындағы өсөнсө ҡоролтайҙа ҡарар ҡабул ителгәс, матбуғатта “Положение” баҫылғас, Рәсәйҙәге төрлө ижтимағи көстәр эсендә бер-береһенә ҡаршылыҡлы мөнәсәбәт, һәр төрлө шарттар ҡуйып, йылдан артыҡ ваҡыт уҙғарҙы. Автономияның тирәяғын биләгән аҡ генералдар быны “берҙәм Рәсәй”ҙе тарҡатыуға һананы, теше-тырнаҡтары менән ҡаршы булды. Күрше татар зыялылары, сәйәси лидерҙары исламсылыҡ, дөйөм төрки-татар берлеге идеяһын алға ҡуйҙы, милли-ерле автономияны танымай ғына түгел, уның лидерҙарын тар милли мәнфәғәт тотоуҙа ғәйепләне, төрки берлеген ҡаҡшатыусыларға һананы. Был хәрәкәт ошо ун һигеҙенсе йылдың аҙағында үткән өсөнсө ҡоролтайҙан һуң көсәйҙе.

Бер көндө Мстислав Ҡулаев бик ярһып ҡайтып инде лә, гәзит төргәген өҫтәлгә ырғытты.

— Бына, ҡара инде. Ни яҙа был мосолман хәрби шураһы лидерҙары!

— Тағы башҡорттарға ҡаршылармы әллә, ҡәҙерлем? — тигән булды аптырап ҡатыны, иренең был тиклем ярһыу хәлен күреп өйрәнмәгәнгә.

— Ҡаршы ғынамы һуң әле! Муйындан алалар. Ҡара, ни яҙалар Фәтих Кәрими менән Ғаяз Исхакиҙар үҙҙәренең “Ваҡыт” гәзитендә. Башҡорт автономияһы ислам берлеген ҡаҡшата, имеш. Әйтерһең, донъяла дини нигеҙҙә дәүләт ҡоролған. Хыял бит был.

— Да, нишләйһең. Башҡорттар үҙенекен таныһын.

— Шулай ҙа ул. Был исламсылыҡ идеяһы һүнеп өлгөрмәгән, Иҙел-Урал штатын байраҡ итеп йөрөнөләр. Хыялыйҙар. Тик башҡортҡа ҡаршы булһын, күҙҙәренә төшкән сүп булдыҡ. Алып ҡына ташлай алмай аҙапланалар. Хәҙер килеп татар-башҡорт мөхтәриәтен күтәреп алдылар, Мәскәүҙәге Мулланур Вахитовтары, Сәйерғәлиевтары ла Ленин менән Сталиндың башын әйләндерә, мосолман шураһы төҙөп алғандар ҙа, әйҙә.

— Ярар, Мстислав, артыҡ бошонма. Ҡазанда ятып һин ни ҡыла алаһың?

— Ана шулай шул! Ыҫҡынам мин Ырымбурға, Өфөгә, ҡатнашам бар эштәрендә башҡорттарымдың! Етте күләгәлә ятыу!

— Ҡыҙма, саҡырһындар. Бәлки һинән башҡа ла эштәре уңыр.

— Уңыр. Уңыр… — тип мыҫҡыллағандай итте Мстислав ҡатынының һуңғы һүҙҙәрен. — Мин дә кәрәк шул. Бындағыларҙың уй-ниәтен төптән беләм бит мин. Дөрөҫ кәңәш бирермен, бәлки. Өфөлә лә шул татар зыялылары өҫтөнлөк итә бит. Бер Ырымбур утрау булып ҡала әле. Эш бит шуға барып етте, Нина: Башҡорт мөхтәриәтенең ҡабул иткән байрағынан, гимнынан көлөп маташа был һөмһөҙҙәр. Үҙ ғәскәрен төҙөү идеяһын хыялға тиңләйҙәр, Зәки Вәлидиҙе, ханға һанап, мыҫҡыл итәләр.

— Нишләйһең инде, Мстислав?

— Юҡ, былай ғәмһеҙ ҡала алмайым мин.

Ырымбур ерҙәренә атаман Дутовтың казак армияһы килеп тулды, улар Башҡорт автономияһын һанға һуҡманы. 1918 йылдың башында уҡ Башҡорт хөкүмәте рәйесе Шәриф Манатов Үҙәктән яҡлау эҙләп, Совет власы ҡанаты аҫтына ынтылып ҡараны. Уны Владимир Ленин ҙурлап ҡабул итте. Пролетар революция юлбашсыһы башҡорт милли хәрәкәтенең советтар өсөн файҙалы булыр яҡтарын тиҙ әләктереп алды

һәм Манатовтың: “Беҙгә ышаныс белдермәйҙәр, контрреволюцион көс итеп ҡарайҙар”, тип зарланыуын кире ҡаҡты.

— Башҡорт хәрәкәтен беҙ революцияға ҡаршы көскә һанамайбыҙ, — тип башланы һүҙен юлбашсы. — Көнсығыш халыҡтарының милли хәрәкәте — тәбиғи күренеш. Улар социаль революцияға милли революциялар аша киләсәк, тип иҫәпләйбеҙ.

Башҡортостан шураһы үҙенең хәрәкәтендә Совет власы дошмандары яғында булмаясағын, социаль революцияға ҡарата әлегә битараф ҡаласағын белдереп торҙо. Үҙәктәге большевиктар, һис шикһеҙ, башҡорттарҙы үҙ яғына йәлеп итеү маҡсатын тотто һәм быны ҙур сәйәси оҫталыҡ, дипломатия менән башҡарып сыға алды. Үҙҙәренә ҡаршы көстәргә ҡаршы тороуҙары башҡорт хәрәкәтен үҙ яғына бора алды. Был хәл Ырымбур губернаһында хакимлыҡ иткән атаман Дутовтың асыуын ҡабарта ине. Ырымбур казактарының ғәскәр ҡоро башлығы ла был хаҡта туранан-тура белдерҙе.

Урындағы Совет органдары башҡорт хәрәкәтен үҙ күрмәне, уның эшен аңлы рәүештә боҙоп, Мәскәү алдында уларҙың лидерҙарын буржуаз милләтселәр, революцияға дошман көс итеп күрһәтергә тырышты, һәр ерҙә Башҡорт шураһы етәкселәре менән мөнәсәбәттәрен киҫкенләштерҙе.

Был осорҙа мосолмансылыҡ хәрәкәте лә йәнләнеп киткәйне. Улар ҙа үҙ йоғонтоһон Ҡазан губернаһы менән генә сикләмәй, Ырымбур, Өфө губерналарына ла ымһынды һәм бында башҡорт хәрәкәтенең юлына килеп сыҡты. Был урында мосолман байрағы аҫтында Башҡорт автономияһын баҫып ҡалдырырға маташты улар. Февраль башында Ырымбур мосолман комитеты Башҡорт өлкә шураһы ағзаларын ҡулға алып, төрмәгә япты. Шуның менән улар башҡорт хәрәкәтен етәкселекһеҙ ҡалдырырға итте. Шура етәкселәре Ә.Вәлидов, Г.Айытбаев, М.Әҙеһәмов, С.Мерәҫов, И.Мутин, Н.Сәлихов, А.Йәғәфәров һәм башҡалар тотолоп, хәбесханаға ултыртылды. Уларҙың яҙмышы ҡурҡыныс хәлгә ҡуйылды. Был эштә Шәмиғолов әфәнде ҙур тырышлыҡ күрһәтеп ташланы.

Төп ғәйептәре шураның Дутовтан башҡорт ғәскәре өсөн алтмыш мең аҡса, өс йөҙ винтовка алыуҙа, тип һаналды. Йәғни башҡорт хәрәкәте саф буржуаз милләтселектән тора, революцияға ҡаршы.

Мосолман комитетының был аҙымын Ырымбур ревкомы рәйесе — большевик Цвиллинг та хупланы.

Тик был кешеләр башҡорттарҙың үҙ лидерҙарының яҙмышына ғәмһеҙ мөнәсәбәттә ҡалмаясағын ғына иҫәпкә алманы. Һәр улыста тиерлек йыйылыштар, митингылар ҡабынып китте, уларҙың талаптары табаҡ-табаҡ ҡағыҙ булып үҙәккә яуҙы. Йыйылыштар өйәҙҙәр кимәленә үк күтәрелеп китте. Башҡорт хәрәкәте көтөлмәгән йүнәлеш алды.

Ҡазанда мосолмандарҙың хәрби съезы бара ине. Уның башҡорт фракцияһы Ырымбур ваҡиғаларына яуап итеп шунда уҡ үҙ делегацияһын ебәрҙе. Делегацияға биш делегат — Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Зәкәриә Әбитаев, Усман Ҡыуатов, Мстислав Ҡулаев индерелде.

Был биш башҡорттоң Ырымбурҙа ҡаҡмай ҙа, ҡағып та инмәгән ишеге ҡалманы. Ҡулға алыуға бойороҡ биреүсе мосолман комитетында оялаған Шәмиғолов етәкләгән шовинистарға ла барҙы улар.

— Ниндәй законға нигеҙләнеп, Башҡорт шураһын ҡулға алдығыҙ? — тип ҡыҙҙы Муса Мортазин. — Етмәһә, үҙегеҙ Каруанһарайға инеп оялағанһығыҙ!

— Бик шаулаһағыҙ, һеҙгә лә ҡул етер, — тип екерҙе Ғәли Шәмиғолов әфәнде. Уны большевик булып алған казачий Абдулла Дәүләтшин хуплап торҙо.

— Башҡорт шураһы — контрреволюцион көс. Милли-азатлыҡ идеяһы аҫтында буржуаз милләтселек идеяларын үткәрмәкселәр. Шура мәңге шул зинданда ҡалырға тейеш.

— Беҙ уларҙы, төрмәгеҙҙе емереп булһа ла, сығарасаҡбыҙ.

Муса Мортазинға һалҡын ҡанлы Мстислав Ҡулаев ҡушылды.

— Башҡорт шураһын ҡоролтай законлы рәүештә һайланы, уны тик ул ғына бушата ала. Һеҙ бер ниндәй ҙә законға һыймағанды ҡылдығыҙ.

— Бушатығыҙ Каруанһарайҙы, башҡорттоң изге йортон! — был инде Усман Ҡыуатовтың ҡәтғи талабы ине.

— Көтөгөҙ, — тип шашынды һаман шыма йөҙлө Шәмиғолов.

— Һеҙҙең эштәрегеҙ тураһында үҙәккә хәбәр китте.

Бында бер эш тә сыҡмаҫын аңлап, делегаттар Ырымбур революцион комитетына, Цвиллингтың үҙенә йүнәлде. Ләкин ҡала большевиктары башлығы менән дә эш бешерлек түгел ине. Ул да шул бер хәбәрҙе тылҡыны.

— Вәлидовсылар тау башҡорттарынан советтарға ҡаршы ҡораллы ғәскәр туплай. Шул отрядтар таратылмайынса, ҡулға алынғандар заложник хәлендә тотоласаҡ, — булды уның һүҙе.

— Ул отрядтар башҡорт халҡын яҡлау, автономиябыҙҙы һаҡлау өсөн төҙөлә, — тине Йәғәфәров. — Мин үҙем ул отрядтарҙы төҙөү принциптарын эшләүҙә ҡатнаштым.

— Беҙ төҙөгән эшсе-крәҫтиән армияһына ышаныс белдермәйһегеҙме ни? — тип ныҡышты Цвиллинг.

— Ышанып инем, әгәр унда, исмаһам, бер башҡорт командиры булһа, — тип ҡырт киҫте хәрби кейемдәге Муса Мортазин.

— Эш бит милләттә түгел, ә пролетар революцияға тоғролоҡта.

— Ә беҙ үҙ халҡыбыҙға тоғро ғәскәр төҙөмәксебеҙ.

— Беҙҙең өсөн иң беренсе нәүбәттә пролетар берлек, һәр милләт үҙенә армия төҙөү — ул бит Рәсәй дәүләтенә ҡурҡыныс тыуҙыра торған хәл.

— Рәсәй дәүләтен бөйөк урыҫ милләтенән булған адмиралдар, генералдар, казачий атамандар тетрәтә түгелме? — тип һалды ошоғаса өндәшмәй түҙгән Ҡулаев.

Бындай ныҡышлыҡ һәм ул уйламаған дәлилдәр ысын большевик Цвиллингты сығырынан сығара башланы. Уның ҡыҙа барыуынан эштең ыңғай хәл ителмәҫен аңлаған делегаттар бынан да буш сығасағын аңланы.

Һуңынан булһа ла Цвиллинг бер өмөт уята биреп ҡуйҙы.

— Мин мосолман комитетына ышанам. Башҡорт советының эшен тикшереү өсөн комиссия төҙөйбөҙ. Теләһәгеҙ, һеҙ ҙә бер вәкилегеҙҙе тәҡдим итегеҙ.

— Был тикшереү һуҙыла, беҙҙең хәрәкәт башһыҙ ҡалды, — тине йәнә Муса Мортазин.

— Ғәйепһеҙ булһалар, сығарырбыҙ, — тине Цвиллинг.

— Көн һайын мин тиҫтәләп телеграмма алам. Ғәскәри башҡорттарҙан килә. Әгәр хөкүмәт етәкселәрен азат итмәһәгеҙ, татар ауылда-

рына һөжүм асабыҙ, Башҡортостанды уларҙан таҙартабыҙ, тип ҡурҡыталар.

Большевиктың һүҙҙәре эскә әҙ генә йылы индереп ҡуйһа ла, уларҙың ысын күңелдән әйтелгәненә ышаныуы ҡыйын ине. Шулай килеп сыҡты ла. Тикшереү эше һуҙылды, әсирҙәр һаман төрмәнән сыға алманы. Был хәл автономияның башланғыс этабында уҡ быуылыу ихтималлығын күрһәтте.

Апрель башында Ырымбурҙа булған ваҡиғалар ғына хәлде үҙгәртеп ебәрҙе. Ҡалаға дутовсылар яҡынайҙы. Большевик етәкселәр, әлеге мосолман комитеты үҙ яйын ҡараны, ҡаланан сығып, фронт сигенән арыраҡ һыҙҙы. Төрмә һағы йомшарҙы, ҡулға алыныусыларҙан күпме булһа ла аҡса эләктереп ҡалып, үҙҙәренән ҡотолоу яғын ҡараны. Башҡорт шураһы ағзалары берәм-берәм хәбесхананан ысҡынып, төрлө яҡҡа һибелде. Сөнки ҡалала ҡалыу улар өсөн һаман үтә хәүефле ине. Дутовсылар ҡулына ла эләккеләре килмәне уларҙың, большевиктарҙың да маңлайҙарына көбәк тоҫҡауы бик мөмкин ине.

Бынан һуң Башҡорт автономияһы өсөн хәрәкәт көрәш йүнәлеше тағы көсәргәнешле төҫ алып китте, асылда уның яңы этабы башланды. Үҙен үҙе яҡлар өсөн, автономия идеяһын үткәреү маҡсатында уның етәкселәре төрлө төҫкә инергә мәжбүр булды. Рәсәйҙәге ҡайһы бер сәйәси көстәр автономия идеяһын тоноҡлатыу, юҡҡа сығарыу маҡсатында Волга-Урал штаты, төрки-мосолман, татар-башҡорт автономиялары проекттарын өҫтәлдәргә һалды, халыҡтың башына һеңдерергә маташты. Бындай проекттар ҙур-ҙур йыйылыштарҙа тикшерелде, ҡарарҙар ҡабул ителде. Шулай ҙа татар-башҡорт автономиялы республикаһын төҙөү мәсьәләһе иң юғары кимәлгә күтәрелде. Шул фекерҙе Рәсәй Федерацияһының милләттәр халыҡ комиссариаты ла күтәреп алды һәм раҫлап, ғәмәлгә индерергә тәҡдим итте. Был документты төҙөүсе лә халыҡ комиссары Иосиф Сталин ине. Уларҙың бөтәһе лә революцион хеҙмәт массаларына һылтанып эшләнде. Үҙәк мосолман комиссариаты ла ошо идеяны яҡланы. Татар большевиктары исеменән Мулланур Вахитов та, Ғәлимйән Ибраһимов та, Мәскәү халыҡ комиссариатына эшкә алынған Шәриф Манатов та ошо уҡ рухта сығыш яһанылар, рәсми документтарға ҡул ҡуйҙылар.

Татар-башҡорт мөхтәриәтен төҙөү һәм уның составына инеү теләген сыуаш, мари халҡы съездары ла белдерҙе.

Татар-башҡорт автономияһы тирәһендәге ваҡиғалар ҡуйырғандан-ҡуйырҙы. Уның иң юғары нөктәһе — ун һигеҙенсе йылдың майында татар-башҡорт республикаһын төҙөү буйынса Мәскәүҙә кәңәшмә йыйыла, унда учредителдәр съезын Өфөлә ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителә, быны тормошҡа ашырыу өсөн Татар-башҡорт комиссариаты төҙөлә, буласаҡ республиканың сиктәре һыҙатлана. Һис шикһеҙ, был йүнәлештә татар лидерҙары өҫтөнлөк итә һәм үҙ фекерҙәрен үткәрә.

Үҙ аллылыҡҡа быуаттар буйы ынтылған башҡорт халҡы вәкилдәре татар-башҡорт республикаһын үҙһенмәне, милләттең яҙмышын уға бәйләмәҫкә ҡыйыу ынтылыш яһаны. Әммә Ырымбурҙағы большевиктар етәксеһе Коростелев менән мосолман комитеты бер позицияға күсте һәм башҡорттың үҙ автономияһына ҡаршы булды, шул йүнәлештә емереү эше йәйелдерҙе.

Сентябргә билдәләнгән татар-башҡорт автономияһының учредителдәр съезы граждандар һуғышы ҡыҙып китеү, Өфөнөң аҡ чехтар ҡулына күсеүе сәбәпле билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелде һәм бара-бара һүнеп ҡуйҙы.

Тиҙҙән ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ)-башҡорт автономияһы ҡороу мәсьәләһе ҡуйылды, бер-ике ай милләт етәкселәренең башында буталды-буталды ла был идея ла тарих саңына күмелеп ҡалды. Башҡорттарҙың үҙаллылыҡҡа ынтылышы үтә көслө ине шул.

Автономия төҙөү эшен уның лидерҙары сәйәси лозунг итеп кенә күтәрмәне, хәрби, хужалыҡ йәһәтенән дә нигеҙләй барҙы. Башҡорт шураһына ла, уның урындағы ойошмаларына ла белемле, милли йәһәттән ышанyслы, бирелгән кешеләр кәрәк ине. Хөкүмәт етәкселәре уларҙы төрлө тарафтарҙан саҡыртып, Ырымбурҙа туплай башланы.

Ҡазанда табиплыҡ эше менән булып ятҡан Мстислав Ҡулаев та ун һигеҙенсе йылдың йәй уртаһында Ырымбурҙан саҡырыу телеграммаһы алды: “Башҡортостан хөкүмәте эшендә ҡатнашыу өсөн тиҙ арала Ырымбурға килеп етергә саҡырам. Башҡортостан хөкүмәте рәйесе Бикбов”.

Был телеграмманы алғас, Мстислав Ҡулаев ныҡ аптырауға ҡалды: бәй, үҙ илендә уның барлығын да онотмағандар икән. Эйе, үҙе бит был хаҡта белдергәйне. Етмәһә, Башҡорт хөкүмәтен тотҡондан сығарырға тырышып, делегация менән Ырымбурҙы ҡыҙырғайны. Уның йөрәгендә Башҡортостан яҙмышын, үҙ халҡын ҡайғыртыу, һағыныу тойғолары дөрләп китте, түҙемлеге сигенән сыға башланы. Был уйҙарын ул башта бер кемгә лә өндәшмәй ҡарағайны ла, тыйып ятҡырыр әмәле ҡалмағас, ҡатыны менән уртаҡлашты. Нина, әлбиттә, һәр ҡатын-ҡыҙға хас булғанса, ирен эргәһенән ебәрергә теләмәне, уның эстән ялҡынлауына һалҡын ҡараны. Табип ирен һис тә хөкүмәт эшмәкәре итеп күҙ алдына килтерә алманы.

— Ҡуйсәле, Слава (икәү генә булғанда уның иркәләп өндәшеүе ине был), һин ниндәй сәйәсмән инде? Бик йомшаҡ тәбиғәтле кешеһең бит һин, елкәңә менерҙәр, ундай хөкүмәт эшендә беше тиреле, ҡаты күңелле, аяуһыҙ булырға кәрәк, минеңсә.

— Эй, юҡты һөйләмә әле! Әҙерлә миңә бер ҡат эске кейем, өс көнлөк аҙыҡ.

— Ни һалайым ашарға?

Был инде ҡатынының уның ҡарары менән килешеүе ине.

— Тиҙ боҙолмай торған аҙыҡ ҡара инде шунда. Йөрәгем ярһый, уфф! Боçоп ятып ҡала алмайым, аңла мине, Ниночка!

— Башҡорт илендә бола бик күп һымаҡ. Беҙгә килеп еткән хәбәрҙәре генә лә ҡот осорорлоҡ бит, ә беҙ белмәгәне?...

— Нина, минең холҡомдо беләһең. Мин башҡорт бит. Упрям как вол, ретив как конь. Үҙең әйттең бит шул һүҙҙе.

— Ярар, Славик, с богом! Балаларыбыҙ бәхетенә иçән йөрөп, һау ҡайт. Благославляю.

Нина иренә ҡарап, өс мәртәбә суҡыныу хәрәкәттәре яһап, биленән эйелде, уның ҙур күҙҙәре йәшкәҙәп, башын иренең күкрәгенә терәне. Ул арала өс ҡыҙы ла әллә ҡайҙан йыйыла һалып, атай менән әсәй араһында ни булғанын аңларға тырышып, араларында буталдылар.

Мстислав ҡыҙҙарын берәм-берәм маңлайҙарынан үпте, арҡаларынан һөйҙө. Үҙенең күңеле йомшаны.

— Әсәйегеҙҙе тыңлағыҙ, балалар, мин тиҙ генә ҡайта алмам әле.

— Атаҡай, һин йәнә һуғышҡа китәһеңме ни? — тип өндәште Елена. Бәләкәйҙәренә лә бошонҡо тоҫ инде. Елена инде еткән ҡыҙ, буйһыны матур булып үҫкән. Бер егет уны оҙатып килгәнен атаһы күрә биреп тә ҡалғайны. "Ҡыҙ ғүмере ҡыҫҡа инде ул, мин ҡайтҡансы кейәүгә сыҡмай торһа ярар ине" тип уйлап ҡуйҙы атаһы.

Мстислав оҙаҡ ҡына уйланып торҙо ла, ошо араларҙа ғына яҙғылап бөткән әлепбейен юл портфеленә тыҡты. Ни тиһәң дә, иленә ҡайта бит әле, бәлки, башҡорт халҡы өсөн кәрәкле табырҙар, ҡабул итерҙәр. Бушҡа ғына көсөн түкмәгәндер бит.

## 5. Ил эсендәге имәндәй

Ҡазандан сығып, өс көн үтеүгә Мстислав Ҡулаев үҙе өсөн изге ҡала — Ырымбурға йәнә аяҡ баҫты, таныш-тоноштарын эҙләп, фатирға ла төшөп тормай, туп-тура Каруанһарайға йүнәлде. Башҡорт хөкүмәтенең шунда икәнен үткән килгәндә белгәйне ул. Үҙенә үтә таныш селтәрле тимер ҡапҡа эргәһендә торған ҡоралло һалдатҡа түш кеҫәһендә ятҡан саҡырыу хатын күрһәткәйне, теге честь бирҙе һәм башҡортса:

— Рәхим итегеҙ, Ҡулаев ағай! — тине.

Мстиславтың күңеленә йылы булып китте был һалдаттың үҙ телендә өндәшеүе. Мәсет янынан үтеп, төп бинаға ҡарай атланы ул.

Ярым хәрби кейемдәге һомғол ир мыҡты кәүҙәле, киң яурынлы, ағара башлаған мыйыҡлы ҡунаҡ килеп ингәс тә, өҫтәл артында аяғүрә баҫты, гимнастерка итәген тартып, төҙәткеләне, ингән ағайҙы ултырырға өндәп ҡулын һуҙҙы.

— Табип Мөхәмәтхан Ҡулаев.

— Хөкүмәт ағзаһы Абдулла Әҙеһәмов. Ишеткәнем бар һеҙҙең турала, Мөхәмәтхан ағай. Килеүегеҙ бик яҡшы.

Хәл-әхүәлдәр, юл мәшәкәттәре, ғаилә һаулығын һорашҡас, бүлмә хужаһы йәнә һүҙ башланы.

— Һеҙгә Башҡорт хөкүмәтенең табибы вазифаһын тәкдим итмәксебеҙ. Әхмәтзәки түрәбеҙ үҙе шуны әйткәйне.

— Рәхмәт, Абдулла туған. Үҙ халҡыма хеҙмәт итергә ысын күңелдән ризамын. Бар көсөмдө йәлләмәм.

— Хуп, бик хуп, Мөхәмәтхан ағай. Әлегә ошонда, Каруанһарай ҡунаҡханаһында йәшәп торорһоғоҙ. Ғаиләгеҙҙе ҡуҙғатмай тороғоҙ, бик бола ваҡыт. Нығына алмай этләнәбеҙ.

— Ярай. Миңә ҡасан эшкә тотонорға?

— Юлдан бер-ике көн ял итеп алығыҙ, ағай. Шунан башларһығыҙ. Эш урынын билдәләрҙәр.

— Минең тыуған яҡтарыма, Һаҡмар буйына, ҡайтып, туған-ырыуымдың хәлен белеп килергә лә ине бит әле. Әсәйем дә ауырыу ғына ине. Аҙна ваҡыт кәрәк.

— Ярар, ағай, әлбиттә. Бер юлы халыҡтың тын алышын да самаларһығыҙ. Ҡазанда хәлдәр нисек һуң әле? Татарҙар автономия өсөн ҡуҙғалмаймы?

— Улар ни, шул татар-башҡорт мөхтәриәте менән сыуалалар. Һаман шул башҡорт еренә яҫҡыналар.

— Беҙгә был билдәле. Зәки ағай уларҙың ҡарашына ҡырҡа ҡаршы. Татар менән ҡушылһаҡ, беҙ йотолабыҙ бит, ти. Етмәһә, башҡорт һәм татар йөмһүриәте түгел, мотлаҡ татар-башҡорт, үҙҙәрен һаман алға һөрәләр. Беҙ үҙ тәҡдимдәребеҙҙе яҙып, Үҙәк халыҡ комиссариатына ебәрҙек. Үҙебеҙҙең автономиябыҙҙы дәлилләнек.

— Башҡорт мөхтәриәте мәсьәләһе, минең белеүемсә, күптән күтәрелгәйне бит инде.

— Эйе. Беҙ быны Шәреҡ комиссариатының икенсе съезында уҡ күтәргәйнек. Хәҙер Үҙәк комитетҡа рәсми мөрәжәғәт әҙерләнек. Татарҙар ҙа үҙ мөхтәриәтен төҙөһөндәр. Башҡорттоң илен дә, үҙен дә, телен дә таный алмай яфалананалар бит. Булмаҫтай менән маташҡансы, булырҙайына тотонһондар ине.

— Дөрөҫ. Татар беҙҙе халыҡҡа ла һанамай. Быны мин үҙ елкәмдә, үҙ йәнем менән татыным. Бына ун йылға яҡын башҡорт әлепбейен төҙөп, Ҡазан зыялыларына күрһәттем, баҫтырып тараттым. Иғтибар иткән кеше лә юҡ. “Әҙәби теле булмаған башҡортта яҙма, ниндәй әлепбей булһын?” — тип мыҫҡыл иттеләр.

— Әҙерәк тын алайыҡ әле, ағай, муйындан быуалар бит. Шунан бында үҙебеҙ ҡарарбыҙ. Минең ишетеүем буйынса, һеҙ урыҫ, грек хәрефтәрен нигеҙ итеп алғанһығыҙ. Бындай тәҡдим бында ла үтерме икән ул? Урыҫты һаман иҙеүсе, беҙҙе талаусы итеп күрә бит әле башҡорт, исламға ҡаршы тороуҙа, христианлаштырыуҙа ғәйепләй.

Мөхәмәтхан был хәбәрҙе башлауына үкенде лә, баштан уҡ кириллицаны ҡулланыуы менән үҙ халҡын да өркөтөп ҡуйыуын уйланы, шуға ул һүҙҙе тиҙерәк икенсе яҡҡа бороуҙы ҡараны.

Былар шулай бик йылы ғына, бер-береһен аңлап һөйләшеп ултырғанда бүлмәгә хәрби гимнастерка кейгән, биленә яҫы ҡайыш быуған бәләкәй генә кәүҙәле бер ир килеп инде. Әҙеһәмов аяғүрә баҫҡайны, Ҡулаев та урынынан ҡалҡынды.

— Әхмәтзәки Вәлидов, башҡорт хөкүмәте рәйесе, — тине ул һәм ике ҡулын һуҙып, үҙе килеп күреште.

— Мөхәмәтхан Ҡулаев, табип. Ҡазандан килеп еттем.

— Шәп, бик шәп! Беҙгә һеҙҙең кеүек тәжрибәле, рухлы табип етешмәй ине. Мине хәбесхананан ҡотҡарырға тырышып йөрөүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Был хәрәкәттәрегеҙ ҙә онотолманы.

— Көс етмәне шул.

— Хөкүмәтебеҙҙең табибы ла булды хәҙер, — тип ҡыуаныс белдерҙе Әҙеһәмов.

— Яҡшы. Беҙҙә табип та сәйәсмән булырға тейеш. Башҡортлоғобоҙ өсөн көрәшәбеҙ. Үҙебеҙҙең ғәскәрҙе туплай башланыҡ, ҡорал етешмәй, кейем дә самалы. Хөкүмәт составында хәрби бүлек асырға иҫәп бар.

— Әхмәтзәки әфәнде, һеҙ Ҡазанда билдәле ғалим булып танылып өлгөргәйнегеҙ, көслө шәрҡиәтселәр иҫәбендә инегеҙ, Урал-Иҙел буйында ғына түгел, Рәсәйҙә ислам тарихын яҡшы белеүсе кеше.

— Рәхмәт, Мөхәмәтхан ағай. Һеҙ минең төрки-татар тарихы буйынса яҙған китабым менән танышмы?

— Танышмын. Шәрҡиәтсе профессор Казимбек менән яҡын инем, мине фәнгә әйҙәүсе лә ул булды. Һеҙҙең хеҙмәттәрҙе лә ул тәҡдим иткәйне, ә хәҙер хөкүмәтебеҙҙе етәкләйһегеҙ. Үкенмәйһегеҙме?

— Тура килә. Заманы шулай бит. Фәнгә ҡайтырға өмөттө өҙгән юҡ әле.

Әхмәтзәки башҡорт хәрәкәте тураһында ҡыҙып-ҡыҙып һөйләне, үҙе Мөхәмәтханға һынаулы ҡарашын ташлап ала, уны үтә күрергә иткән кеүек ҡылана. Ҡулаев был ҡараштарҙан уңайһыҙлана, шулай ҙа ҡаушап төшмәй, урыҡ-һурыҡ булһа ла һүҙ ҡыҫтырып ултыра.

— Һеҙме әле Мөхәмәтхан Ҡулаев, башҡортҡа кирилл яҙмаһын ҡулайлаштырған?

Был көтөлмәгән һорау ине. Хөкүмәт башлығының быны белеүенә Ҡулаев эстән генә ҡәнәғәт булды.

— Эйе, мин инем, — тине ул тыйнаҡ ҡына.

— Әлегә ашыҡмай тороғоҙ, ағай. Беҙҙең йәмәғәтселек, бигерәк тә зыялылар быға әҙер түгел. Мин үҙем дә рәхәтләнеп ғәрәп хәрефтәре менән яҙам. Һис латинға күскем килмәй. Был сер һаҡлау өсөн дә мөһим, яҙыуым дошман ҡулына эләкһә лә, теләһә кемдән уҡыта алмаҫтар.

— Ярай, Әхмәтзәки әфәнде, һеҙ белемле инсан, мәҙрәсәләрҙә белем алғанһығыҙ, ғәрәптең яҙыуын ғына түгел, телен дә үҙләштергәнһегеҙ. Бөтә инсан да улай була алмай. Әлептең таяҡ икәнен өйрәнеп, яҙыу өсөн генә лә биш-алты йыл китә. Ә минең тәҡдим иткән хәрефтәрҙе ярты йылда өйрәнеп була.

— Кириллицаға күсһәк, әлеге һеҙ әйткән инсандарыбыҙ мең йыллыҡ тарихынан, мәҙәниәтенән төңөлөр бит. Бына нимә хәүефле.

— Зыялылар ике алфавитты ла белер, халыҡ массаларына бирәү ҙә етә. Ул еңелерәген өйрәнер.

— Күсеү осорон уйлағыҙ. Тотош халыҡ томанаға әйләнә бит.

Был яҙыу тураһындағы бәхәстең бик оҙаҡҡа һуҙылырын һәм бер ниндәй һөҙөмтәһеҙ бөтөрөн икеһе лә аңлап, һүҙҙе алмаштырырға булдылар. Әхмәтзәкиҙең башында бөтөнләй башҡа уйҙар сыуалғанын, уны ҙур мәшәҡәттәр борсоғанын Ҡулаев та һиҙҙе.

— Мәл бик буталсыҡ, ағай, беҙгә, Башҡорт хөкүмәтенә, Ырымбурҙа артабан ҡалыу хәүефле була башланы. Сталин минең Мәскәүгә килеүемде талап итә, — тип һөйләп алып китте Әхмәтзәки Вәлиди борсолоу менән. — Хөкүмәт ағзаларын Башҡортостан яғына күсереү хәйерле булыр, ахыры. Һеҙ, табип кеше, әлегә бында булырһығыҙ. Урыҫ, татар шовинистары тынғы бирмәй. Мәскәү алдында беҙҙе хурлап ҡына торалар, революцияға ҡаршы көс итеп күрһәтәләр. Үҙәктә беҙгә ҡарата шик, ышанысһыҙлыҡ тыуҙыралар. Һеҙ бында башҡорт ғәскәри частарына табиптар, шәфҡәт туташтары әҙерләй тороғоҙ. Һуғышҡа ирекһеҙҙән киләсәкбеҙ, әҙер булырға кәрәк.

— Ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләрмен, Әхмәтзәки туған!

— Башҡортостаныбыҙ бүлгеләнде. Көнсығыш — Колчактың Себер хөкүмәте, көнсығыш дутовсылар, көнбайыш — Һамар комучы ҡулдарында. Ырымбурҙа большевиктар ҡыҫымы аҫтындабыҙ. Үҙәк Совет власы беҙҙе үҙ күреп, яҡлап бармай.

Хөкүмәт рәйесенең был хәбәренә Ҡулаев бер ни тип тә яуап бирә алманы, башын ғына сайҡап ҡуйҙы. Быға әҙер түгел ине ул, бындағы хәлдәрҙең күбеһен аңлап етмәгәнен тойҙо.

Ошонан күп тә үтмәй Башҡорт хөкүмәте халыҡҡа мөрәжәғәтен таратты. Унда большевиктарҙың Башҡортостан автономияһын һаман танымауы, урындарҙа уның вәкилдәрен ҡулға алыуҙары, комитеттарын, власть органдарын тарҡатыуҙары асыҡтан-асыҡ әйтелгән ине. Халыҡты ҡулына ҡорал алып, үҙ милли мәнфәғәттәрен яҡларға туранан-тура саҡырыу әйтелгәйне. Мөрәжәғәттең аҙағы ялҡынлы һүҙҙәр менән тамамлана: “Күтәрел, башҡорт, аяҡҡа баҫ, мосолман! Ғәскәри рәттәргә теҙел, ҡыйыулыҡ һәм ышаныс күрһәт, өҫтөңә баҫҡан табанды алып ырғыт!”

Ҡулына Башҡорт хөкүмәте ағзаһы таныҡлығын алғас та, Ҡулаев тыуған ауылы Бәкәтәргә юлланды. Әсәһе лә, ағаһы ла, ул һуғышта йөрөгәндә, вафат булып ҡуйғандар икән. Бер һеңлеһе Фатима ғына иҫкергән өйөндә ғүмер итә ине. Мөхәмәтхан юлдан килгән көйө сәй ҙә эсмәҫтән зыяратҡа, әсәһе ҡәберенә барҙы. Бер кем күрмәгәндә түгелеп-түгелеп илап алды, күкрәгендә тулышҡан һағыш, ҡайғы хистәрен сығарҙы. Әсәһенең ҡәберенә таянып, һуңғы юлға оҙата алмауы, динен алмаштырыуы өсөн ғәфү үтенде. Ҡәберҙе ҡылған, селек баҫа башлаған инде. Атаһының ҡәберен дә табып, тамғалы имән бағанаһы янында башын эйеп, бер аҙ торҙо. Күңеле әҙерәк бушағандай булды.

Атаһы менән әсәһенең ҡәберенә зыярат ҡылып ҡайтҡас, әллә ниндәй үҙе лә аңламаған хистәргә бирелеп китте, Көнһылыуҙы күргеһе килде. Һеңлеһе Фатима менән кәңәшләшергә булды.

— Мин Аҡбулатҡа барып киләйем әле, һеңлем, бик күргем килә Көнһылыуҙы. Ниндәй хәлдә икән ул?

— Кейәүгә сыҡҡан тип ишеткәйнем, ирен белмәйем, ағай! Ярармы икән? Ғаиләле кешегә кеммен тип бараһың?

— Күршеләренә инермен тәүҙә. Белешермен. Ҡапылғара барып инмәм инде.

— Әллә, ағай, һис тә килешмәгән кеүек бит әле был уйың. Ауылда хәбәр китер. Яман һүҙҙән алыҫ торған яҡшы.

Шулай ҙа ағаһын ниәтләгән эшенән туҡтатыу бик ауыр икәнен, хатта мөмкин булмағанын һеңлеһе белә ине, шуға:

— Үҙең ҡара инде, ағай, ауыртмаған яғыңа ят, — тиеүҙән башҡа һүҙ тапманы.

Аҡбулат — оло юл эсендә, Һаҡмар буйында, ятҡан бәләкәй генә ауыл. Мөхәмәтхан Бәкәтәрҙән ат яллап, төш ауыуға барып та инде. Бына тыҡрыҡтан өсөнсө өй. Ҡуш өйәңкеһе лә ултыра әле. Тыҡрыҡ аша Һаҡмар күренеп ята.

Ауыл оло юл эсендә ятҡанға, ҡыҙылы ла, ағы ла һуғылмай үтмәй икән. Күҙгә күренерҙәй ир-атты сүпләп бөтә яҙғандар.

Мөхәмәтхан быны белмәһә лә, тыҡрыҡ яғына боролдо ла ишек алдарын күҙәтә башланы, үҙе ян-яғына ҡаранды. Берәйһе күреп тормаһын ине. Бына йәш ҡатын сулпыларын сыуалтып артҡа ташланы, ҡабыҡ менән ябылған аласыҡ янында ултырған самауырҙы итек ҡунысы менән кирекләне.

— Көнһылыу!...

Был ят тауышҡа ҡатын терт итеп ҡалды, тирә-яғына ҡаранды.

Мөхәмәтхан йәнә тауыш бирҙе:

— Көнһылыу!...

— Аһ-аһ, кем һин? Әҙәм ҡурҡытып йөрөйһөң.

Шунан һуң ул бик ыҫпай ғына кейенгән, һаҡал-мыйыҡтарын тигеҙләп ҡырған ят иргә яҡынлап, ситән аша ҡарап торҙо.

— Күҙемә күренәме әллә? … Кит, булмаҫ! Аһ-аһ!

— Эйе, мин был, Көнһылыу. Һинән ғәфү үтенергә килдем. Бик ҙур гонаһ эшләнем бит. Кисер мине.

— Әйҙә, ишек алдына үт, Мөхәмәтхан. Сәй эсерһең.

— Кейәүең эштәме?

— Уны ҡыҙылдар эйәртеп алып китте.

— Һине алты йыл көттөрөп ултырта алманым инде, Көнһылыу.

— Мин һине ғүмерем буйы ла көтөргә әҙер инем, Мөхәмәтхан. Әле бына бишенсе тиҫтәне ҡыуһам да, ул көндәрҙе ҡайтарырға риза булыр инем.

— Кисер мине, йәнем.

— Ҡуй, улай тимә. Мине уйлау һиңә гонаһ булыр.

Мөхәмәтхандың күҙенән күҙ йәштәре атылып сыҡты. Ул шунда, ишек алдында торған көйө, Көнһылыуҙың оҙон толомдарынан һыйпап ҡуйҙы, ирендәрен маңлайына терәне:

— Ярар, хуш, йәнем! Ғәфү ит мине, дыуамалды. Ҡалған ғүмерем буйы һине уйлармын. Хуш!

Был һүҙҙәренән һуң ҡапҡа төбөндәге атҡа ултырҙы ла Бәкәтәр яғына ҡарай елде, юл буйы күңеле әлйе-болйо килеп ҡайтты. Көнһылыу менән осрашыуы тураһында һеңлеһенә лә һөйләмәне.

Ауылдаштары менән осрашып, һөйләшкәс тә, Башҡорт хөкүмәтенең мөрәжәғәте был тарафтарға ла килеп етеп, халыҡты ҡуҙғатып ебәргәнен белде.

Мөхәмәтхан күрше ағай менән дә һөйләшеп алды, ул күпте күргән, сәйәси яҡтан да һиҙгер. Бәкәтәрҙә бер тиҫтәнән артыҡ ир-ат башҡорт ғәскәренә яҙылған икән, үҙ аттары менән Ырымбурға йыйынып яталар, ҡоралдары ғына юҡ.

Ата большевик Гай отряды ла был тирәлә йөрөп ята икән, улары башҡорт ауылдарын ҡаҡшата, тип һөйләне ағай. Ауылдан бер нисә кешене улар ҙа отрядына ҡушып, алып киткән. Гайҙың ғәскәре башҡорт ауылдарына көндөҙ килеп, Совет власы тураһында халыҡҡа һөйләй, шымсылыҡ эшен алып бара ла төндә Башҡорт хөкүмәте яҡлыларҙы сүпләй икән, улар алып киткән кешеләр эҙһеҙ-ниһеҙ юғала. Хәҙер ҙурыраҡ ауыл кешеләре, булған ҡоралы менән ҡоралланып, төнөн оло юлдан үҙ яҡтарына боролған һалдаттарҙы үткәрмәҫкә тырыша, бәрелештәр булып тора икән. Бәкәтәрҙең ир-аты ла төркөм төҙөп, көн һайын Ырымбур—Орск юлын ҡарауыллай.

Мөхәмәтхан Ҡулаев үҙ ауылында оҙаҡ тора алманы, һөйләшелгән ваҡытҡа Ырымбурға кире килде. Ишеткән, күргән хәлдәрен һөйләне. Ауылында ул ойошҡан отрядтарын “халыҡ милиция”һы тип атарға, хәрби хеҙмәт тәртибе индерергә, ауыл халҡын бәлә-ҡазанан һаҡлау кәрәклеген өйрәтте. Сөнки уларҙы яҡлаусы башҡа көс юҡ ине.

Тыуған ауылына сәйәхәт, унда күргән, ишеткәндәр уның күҙен асҡан кеүек булһа ла, күп нәмә аңлашылмай ине әле, аңларға баш та етмәй. Башҡорттоң хәле бигерәк мөшкөлләнеүе генә билдәле: былай ҙа ярлы-

лыҡ баҫҡан, етмәһә, тартыш китте. Һәр бер власть үҙ яғына тарта, халыҡ аңын томалай.

Ырымбурға килгәс тә Мөхәмәтхан тәрән уйҙарға төштө. “Был Әхмәтзәки Вәлидиҙең көсө нимәлә һуң әле? Ни өсөн әҙерәк аңтоңо булған башҡорт уға тартыла? Салауат та, йәш кенә булһа ла, халҡын туплай, ҡуҙғата, артынан эйәртә алған. Ай-һай, ул халыҡты уятыу. Ул еңел эш түгел. Зәки үҙ халҡының тын алышын тоя, ихтыярын белә, йөрәгендә быҫҡып ятҡан утҡа өрөп, яндырып ебәрә ала. Ғәскәр төҙөргә ынтыла бит. Халыҡ ышанмаһа, күңеле менән уға ынтылмаһа, көслөк менән әллә ни ҡылып булмай. Сәйәси һиҙгерлеге лә көслө шул. Ана бит Рәсәйҙе унитаризмдан федерализмға тарта, төрки халыҡтарын ислам байрағы аҫтында туплап булмағанды тойоп, һәр береһенә үҙ аллы мөхтәриәт тәҡдим итә. Ярай, армия ла төҙөнөк ти, ул бит шау һалдаттан ғына була алмай, хәрби тәжрибәһе, әҙерлеге булған офицерҙар ҙа кәрәк. Уларын ҡайҙан алырға? Кисәге крәҫтиәнгә винтовка, ҡылыс тотторһаң да, улар менән командалыҡ итеү түгел, ун һалдат та биреп булмай. Хәрби эштә тәжрибәһе булғандар кәрәк”.

Мөхәмәтхан бөгөнгө эшен тамамланы ла Каруанһарайҙың ҙур ҡапҡаһынан сыҡты.

— Извозчик!

— Слушаю. Куда изволите везти?

Туҡта, туҡта, был извозчиктың тауышы ла, төҫ-ҡиәфәте лә таныш һымаҡ. Ана бит, мыҡты кәүҙә, бөҙрә ҡара сәсле, ҙур баш.

— Куда изволите?

— Кадетский корпус! — тине Мөхәмәтхан, арбаға менеп ултырғас та.

— Кадетский корпус тю-тю! Нету! Курсанттарын тараттылар, офицерҙары Дутовҡа китте.

— Туҡта, туҡта… Бәй, һин Усман түгелме һуң?

Извозчик артына әйләнде лә кузлаһынан тәгәрәп төшә яҙҙы.

— Бәй! Мөхәмәтхан һинме был, түгелме? — Атын туҡтатты ул, урынынан төшөп, арбаһы баҫҡысына килде. — Ниндәй яҙмыш ташланы? Ниндәй интеллигент! Настоящий франт! — тип һөрәнләне Усман, гимназияла бергә уҡып, Ҡазандан ҡайтып киткән Туҡ-Соран буйы егете. — Ә мин всего-навсего извозчик. Яҙмыш, брат.

Элекке һабаҡташтар Ырымбур уртаһында бер аҙ һөйләшеп торҙолар. Баҡтиһәң, Усман Исламғәзин, уҡымай ҡайтып киткәс, Ырымбурҙа ветеринарҙар курсында уҡып сыҡҡан, Тимаш бай улдарының ат заводында ветеринар булып эшләгән икән. Инҡилап алдынан бай малайҙары сит илгә сығып киткәндәр. Башта тоҡом аттарын сығарғандар. Әле Усман егеп йөрөгән ҡола бер сабышта көрлөгөп, аяғын сатанлатып ҡалған. Шуға уны алмағандар, ветеринарға эш хаҡы иҫәбенә биреп ҡалдырғандар. Ул инде ҡоланы дауалап алған да Иҫәнғолдан Ырымбурға шылған. Хәҙер бында урамда кеше ташый.

— Так что, брат, мин коновал да, извозчик та, — тип һалды эре генә Усман.

Мөхәмәтхан үҙ хәлен ҡыҫҡаса ғына аңлатты. Айырылыр саҡта һабаҡташына:

— Давай, Каруанһарайға кил әле, төҙөлөп ятҡан башҡорт ғәскәрендә ике атлы полк буласаҡ. Әйҙә, шунда ветеринар булып эшләрһең, — тине ул.

Усман ризалығын биреп, айырылышты. Мөхәмәтхан кискә ҡәнәғәт төҫ менән ҡунаҡханаһына ҡайтты. Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Йәғәфәров та шунда йәшәй ине. Мөхәмәтханды ышанысла кешегә оҡшатып, яңылыҡ хәбәр итте ул.

— Хөкүмәт эргәһендә хәрби бүлек төҙөлдө, уның башында Зәки ағай үҙе, — тине ул. — Көнө буйы ултырып, элекке армияла хеҙмәт иткән башҡорт, татар офицерҙарының исемлеген төҙөнөк. Генералдарыбыҙ ҙа бар икән. Барыһына тиерлек саҡырыу ебәрҙек, бәлки, килерҙәр.

— Ә мин ветеринар таптым, — тине Мөхәмәтхан. — Бына тигән башҡорт ире, Туҡ-Соран буйынан, гимназияла бергә уҡыныҡ.

— Шәп булған, ағай, — тине Йәғәфәров.

— Бөгөн Каруанһарайға бына тигән шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич, "Башҡорт" гәзите мөхәррире Хәбибулла Ғәбитов килеп киттеләр. Шәйехзада башҡорт ғәскәрҙәре төҙөлөү уңайы менән көйлө хитап яҙған. Уҡыны. Бына тигән!

— Эх, бында булманым шул, — тип үкенес белдерҙе Мөхәмәтхан. — Бик күрге килә ине Шәйехзаданы. Ул бит Ҡазанды ла шаулатып киткәне булды.

— Барып күр, ағай. Улар ҡала типографияһында ултыра. Бәлки "Башҡорт" гәзитенә тыуған яғыңа барыуың, ундағы хәлдәр тураһында берәй хәбәр бирерһең.

— Барам, иртәгә үк барам.

Типография бер ҡатлы таш бинаның подвалында урынлашҡан ине. Тәҙрәләре ерҙән яртылаш сығып ултыра, ҡояш яҡтыһы саҡ-саҡ ҡына төшөп тора. Бүлмәлә шәмдәр яна.

Олпат кәүҙәле Мөхәмәтхан типографияға барып ингәс, ике ҡаҡса егет аяғүрә баҫты.

— Табип Мөхәмәтхан Ҡулаев.

Ҡарпыш ҡолаҡлы, ҡаҡсараҡ оҙон буйлы егет алға сыҡты.

— "Ҡармаҡ" журналы мөхәррире Шәйехзада Бабич.

— "Башҡорт" гәзите мөхәррире Хәбибулла Ғәбитов.

Йәш егеттәр шағир икәндәрен әйтмәнеләр. Бәлки, был зыялы күренгән, ыҫпай кейемле ағай былай ҙа беләләр, тип уйланылар, ахыры.

Ике мөхәррир ҙә ҡағыҙ етмәүгә зарланып, буяу табыуы ла ауыр булғанын һөйләп алды. Ҡулаев хөкүмәттә эш башлағанын, Ҡазандан килгәнен әйткәйне, Хәбибулла Ғәбитов шунда уҡ эләктереп тә алды:

— Ҡазандан тиһегеҙ, үҙегеҙ саф башҡортса һөйләйһегеҙ? Татарҙар беҙҙең башҡорттоң телен бик тиҙ тирмән аҫтына тыға һалып, үҙ яғына әүмәләп алалар түгелме?

— Кеше нисектер, белмәйем. Мин татарса ла һөйләй алам, әммә үҙемдең үҫәргән телемде ташламаным, — тине Мөхәмәтхан.

— Дөрөҫ, ағай, һәр башҡорт шулай булһа ине лә бит. Юҡ шул.

Үҙенең ҡатыны мәрйә булыуын, өйҙә улар тик урыҫса ғына аралашыуҙарын Мөхәмәтхан һөйләмәүҙе хуп күрҙе.

Бара-бара һүҙ Ырымбур хәлдәренә, уның мәҙәни тормошона күсеп китте.

— Оҙаҡламай бында танылған йырсыбыҙ Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов килә, — тип хәбәр итте.

— Уның хаҡында ишеткәнем бар, әммә тыңлағаным юҡ әле. Ҡаҙаҡ, үзбәк илдәрен геү килтереп йөрөгән, тиҙәр.

— Башҡорт йырын яңғыратҡан ул унда.

— Ҡайҙа сығыш яһар икән?

— Беҙҙә татар-башҡорт театр труппаһы бар. Улар шәхси бер клубта сығыш яһайҙар. Бәлки шунда? Тимер юлсылар клубында ла мосолман концерттары булғылай. Унда сығыш яһауы ла мөмкин.

— Бында килгәндә урамда иғландар уҡыным әле, — тип һүҙ башланы йәнә табип. — Татар-башҡорт труппаһы Мөхәмәтша Буранғол исемле кешенең "Таштуғай" драмаһын ҡуя икән. Кем ул?

— Туҡ-Соран башҡорто ул. Бик яҡшы кеше, — тип киҫеп әйтте Хәбибулла Ғәбитов. — Шөғөлө менән миңә яҡын кеше. Халыҡ йырҙарын, риүәйәттәрен йыя. Шуларҙы индереп, пьесалар яҙа. "Таштуғай"ы ла шундай нәмә булырға тейеш. Башҡорт хөкүмәтенә саҡырыуҙар ебәрер ул.

— Ярай. Белеп ҡуйған яҡшы.

— Беҙгә берәй нәмә яҙығыҙ, ағай, — тине Бабич, яҙып ултырған ҡәләмен һалып.

— Әллә?... Мин көлкөлө нәмә яҙмайым бит әле, һеҙҙең "Ҡармаҡ"ҡа бармаҫ минең яҙғандар. Бына яңы башҡорт алфавиты тураһында яҙһаң инде?

— Унының бына Хәбибуллаға.

— Беҙҙең дә темалар икенсерәк шул, хәҙер мөхтәриәт, үҙ ғәскәребеҙ тураһында кәрәк.

Мөхәмәтхан был һүҙҙәргә үҙ ҡарашын белдермәне.

— Иртәгәнән хөкүмәт ағзаларының һаулығын тикшерә башлайым. Һеҙ ҙә ҡаралырға килегеҙ.

— Яҡшы, ағай, изге эш был. Эштәре ауыр, ярҙам кәрәк.

Ҡулаев әйләнеп ҡайтыуына рәйес Әхмәтзәки Вәлиди уны үҙе көтә ине.

— Ағай, һаулыҡты тикшереүҙән мөһимерәк эштәр бар бит әле, — тине ул етди генә. — Бына Тамъян-Ҡатайҙарҙан, Арғаяш башҡорттарынан ике полк төҙөнөк, ә ҡоралыбыҙ, ғәскәри кейем юҡ. Бына мин Себер хөкүмәте исеменә шартнәмә яҙҙым. Иртәгә үк Омскиға юлланһаң ине. Һуғышта булған кешеһең, төҫ-ҡиәфәтең дә ышаныслы. Бәлки, уларҙан алып булыр.

Шулай хөкүмәт табибы ике адъютант оҙатыуында Омскиға юл алды. Тимер юл менән өс тәүлек бара торғас, аҡтар биләп алған Себер юлы менән тәғәйен еренә барып етте ул. Адмирал Колчактың үҙенә инә алманы, уның хөкүмәтенең хәрби министры — генерал Рязановҡа эләкте.

— Ғәскәр төҙөнөк, тиһегеҙ инде, ә? Ике полк, — тип башланы һүҙен, Ҡулаев тотторған шартнәмәне уҡыр алдынан. Башҡорт хөкүмәтенең рәсми шартын уҡыған һайын уның ҡаштары төйөлә, йөҙө емерелә барҙы. — Башҡорт ғәскәре Себер армияһында айырым ғәскәри берәмек булырға, командирҙарын үҙебеҙ билдәләү хоҡуғы ҡалырға тейеш. Так… Так… — тип, алтын тирәсле күҙлеген маңлайына күтәрҙе генерал. Был шарт ҡабул итерлек түгел. Ике полкығыҙҙы хәҙер үк беҙҙең

ҡарамаҡҡа оҙатығыҙ. Беҙ уларҙы үҙебеҙҙең частар менән ҡушып, большевиктарға ҡаршы ебәрербеҙ.

— Шартнәмә хөкүмәт исеменән яҙылған. Мин үҙгәртә алмайым, — тине Ҡулаев.

— Йәнә... Урындағы вәкилдәрегеҙҙең эшенә тығылмау шартын ҡуяһығыҙ. Быныһы мөмкин әле. Ярар, теләһә нишләһендәр. Әлегә ошо ике полкығыҙға ҡоралды тимер юлдан оҙатырбыҙ. Көтөгөҙ. Уныһы ла полктарҙы беҙҙең командованиеға буйһондороу шарты менән.

— Командованиеға буйһонорҙар ҙа ул. Тик үҙ аллы ғәскәри берәмек булыу шарты ҡалһын.

Рязанов был вәкилдең ныҡышмаллығын оҡшатмай, һүҙ бөткәнен белдереп, урынынан торҙо.

Башҡорт хөкүмәте әлеге полктарын ебәреүен ебәрҙе, ләкин Себер армияһы командованиеһы төп шарттарын үтәмәне, урындағы властарға теймәү шартын да боҙҙо. Златоуст өйәҙендә бар урында ла Башҡорт хөкүмәте вәкилдәрен алыштырҙы. Ике полкты ла төрлө фронтҡа ебәрҙе, уларҙы хатта роталарға айырҙы.

Әхмәтзәки Вәлиди уларҙы бер урынға туплау хаҡында йәшерен фарманын ебәрҙе. Дөйөм мобилизация иғлан ителеп, ошо йәйге айҙар эсендә алты уҡсылар полкы, бер кавалерия полкы төҙөлдө. Алты мең кешенән торған дөйөм башҡорт ғәскәренең командующийы итеп элекке армия генералы Ишбулатов билдәләнде. Командирҙар араһында урыҫ, татар, хатта поляк офицерҙары ла бар ине.

Табип Ҡулаев Ҡыҙыл Армия полктарының халыҡты йәберләүен, бигерәк тә башҡорт ауылдарында башбаштаҡлыҡ күрһәтеүен ишетә генә белә, аңлап та етмәй ине. Ҡыҙылдар уға һаман ҡыҙыл булып күренә әле.

Башҡорт ғәскәренең үҙ аллы хәрби берәмек булып эш итеүе атаман Дутовҡа ла оҡшаманы. Был ғәскәрҙе тулыһынса тарҡатып, үҙ армияһы эсендә бүлгеләү, үҙ командованиеһына буйһоноуҙы талап итте ул. Хәрби Советты, башҡорт корпусын таратыу тураһында фарман сығарҙы. Үҙ ҡулына эләккән башҡорт һалдаттары төркөмдәрен был тирәнән үҙәк фронт яғына ебәрергә тырышты. Бер үк ваҡытта уның командованиеһы Башҡорт хөкүмәтенең үҙен тарҡатыу эшен алып барҙы, матбуғатында, сығыштарында автономияны мыҫҡыллауҙан да баш тартманы. Кантондарҙа Башҡорт хөкүмәте ҡуйған начальниктарҙы ҡулға алыуға тиклем барып еттеләр. Бындай ҡыҫымдар ике яҡлап та барҙы: Ырымбур яғында — дутовсылар, көнсығышта — Себер хөкүмәте ғәскәре. Бөтә был эштәр автономия лидерҙарының аҡтарға булған өмөтөн өҙҙө, уларға ышаныуҙан төңөлдөрҙө. Уларға юл бер йүнәлештә генә ҡалды: большевиктарға ылығыу. Автономияны һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы булып күренде был. Совет хөкүмәте нығына барҙы, ҡораллы көстәре лә ярлы-ялпыны туплап өлгөрҙө. Халыҡҡа ер, ирек, икмәк вәғәҙә итеү үҙен аҡланы.

Бөйөк Рәсәйҙең көнбайыш өлөшөн, үҙәген үҙ ҡулына алған большевиктар хөкүмәте килеп тыуған хәлде аңлап эш итте. Улар яғына ҡарарҙай һәр көскә ыңғай мөнәсәбәт күрһәтте, башҡорттар кеүек аҙ һанлы халыҡтарҙың да талаптарына, ынтылыштарына иғтибар бирҙе, үҙ яғына йәлеп итергә тырышты. Зәки Вәлиди хөкүмәте большевиктар менән берләшеү мәсьәләһен кәрәкле тапты һәм уларға яҡынлау

юлдарын эҙләй башланы. Был йәһәттән абруйлы зыялыларҙы файҙаланыу юлын һайлап, теләктәрен башҡорт халҡына бик ҙур ихтирам менән ҡараған күренекле артист Федор Шаляпин аша Ленин менән Сталинға еткерҙе.

Башҡорт хөкүмәтенең хәбәре барып етеү менән, Сталиндан һөйләшеүгә саҡырыу телеграммаһы килеп тә төштө.

Зәки Вәлиди хөкүмәт етәкселәрен ашығыс рәүештә йыйҙы.

— Сталиндан телеграмма, Мәскәүгә һөйләшеүгә саҡыра, — тине ул хәүеф менән. — Нишләйбеҙ? Ышанырғамы уларға, юҡмы? Саҡырып тороп, тоҙаҡҡа эләктермәҫтәрме?

Зәки Вәлиди кем барырын өҙөп кенә әйтмәй, хөкүмәт ағзаларының һәр береһенә һынаулы ҡарашын ташлап ала.

— Зәки әфәнде, һеҙ барһағыҙ, мин дә барырмын, — тип үҙ теләген белдерә Мөхәмәтхан Ҡулаев.

— Мин быны хуп күрәм, — ти Зәки Вәлиди. — Мөхәмәтхан ағай Мәскәү өсөн яңы кеше. Уның абруйы юғары, беҙҙеке кеүек буржуаз милләтсе мисәте уға һуғылмаған. Рәсми исеме лә бына тигән, урыҫса — Мстислав. Мин, әлбиттә, большевиктарҙың беҙҙең менән ысын күңелдән эш итәсәгенә ышанып та етмәйем. Уларҙың урындағы эшмәкәрҙәре намыҫты ҡайтара. Ана, Өфөләге Эльцинға, Ырымбурҙағы шовинист Архангельскийға ҡарағыҙ. Ниндәй ике йөҙлө, мәкерле бәндәләр. Бөтәһе лә шуның һымаҡ күренә миңә. Ырымбурҙағы Цвиллинг та Мәскәү алдында беҙҙе яман күрһәтергә тырышып ята.

— Бәлки үҙәктәгеләр улай уҡ түгелдер, — тигән булды Ҡулаев, Мәскәү яғына барыуҙы хуп күреп. Ул был юлдың хәҙерге шарттарҙа иң дөрөҫ йүнәлеш икәнен аңлай ине.

— Ярар, бер юлға ышанып ҡарайыҡ. Беҙгә килешеүҙең тексын төҙөргә кәрәк, буш ҡул менән Мәскәүҙе ышандырып булмаҫ, үҙебеҙгә хөкүмәт таныҡлыҡтары әҙерләгеҙ, — тине Әхмәтзәки сәркәтипкә. — Иртәгә оло юлға! Хәйерле сәғәттә булһын!

— Шулай, Әхмәтзәки ағай, — тине Муллайән Халиков. — Алтын Урҙа ҡаҙаҡтарының вәкилдәре лә Мәскәү тарафтарына сығыуҙы ҡарай, тигән хәбәр килде.

— Дөрөҫ, ҡаҙаҡтар менән бер мәлдәрәк һөйләшеү хәйерлерәк булыр. Яҙмыштар ҙа, талаптар ҙа бер юҫыҡта бит. Килешеү шарттарын да алдан бер самаға килтерербеҙ бәлки. Шулай берҙәмерәк торһаҡ, Мәскәү ҙә беҙҙең менән иҫәпләшер, — тип йомғаҡланы кәңәшмәне Әхмәтзәки Вәлиди.

Беренсе, Икенсе башҡорт ҡоролтайҙарының эшенә, ҡарарҙарына артыҡ иғтибар итмәгән большевиктарҙың үҙәк власы, башҡорт ғәскәре төҙөлөп, Колчак, Дутов яғында һуғыша башлағас, хәүефләнә башланы. Башҡорт хәрәкәтен үҙ яғына ауҙарыу юлдарын эҙләргә тотондо. Был йәһәттән Сталин етәкселегендәге Милләттәр комиссариаты тырышлыҡ күрһәтте. Башҡорт хөкүмәтенең дә яҡынайыу юлын эҙләүен улар белә ине. Был теләк М.Горький менән Ф.Шаляпин аша еткерелгәйне.

1919 йыл башы был йәһәттән хәл иткес ваҡиғаларға бай булды. Ленин менән Сталин Башҡортостан хөкүмәтенең, башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығыуын тәьмин итеү маҡсаты менән Наркомнац коллегияһы ағзаһы Мирсәйет Солтанғәлиевты Әхмәтзәки Вәлидов менән осрашырға делегация етәксеһе итеп ебәрҙе.

Делегация Өфөгә килеү менән, Башҡорт хөкүмәте рәйесе Әхмәтзәки улар менән тура телефон бәйләнешенә инде. Мирсәйет күп нәмәне үҙ өҫтөнә ала, ул татар-башҡорт республикаһы төҙөү идеяһын яҡламауын әйтә, башҡорттарға ташлама яһау — тарихи кәрәклек, тип һала. Әхмәтзәки Вәлиди башта быға ышанмай ҡарай, сөнки татарҙар, һул эсерҙар татар-башҡорт республикаһын яҡлай. Артабанғы һөйләшеүҙәргә ул Муллайән Халиковты, Ғәбдрәшит Бикбауов менән Мөхәмәтхан Ҡулаевты ебәрә. Үҙҙәренең позицияларынан ситләшмәүҙәрен үтенә. Ҡыҙылдарҙың башҡорт частарына ҡарата күрһәткән тотанаҡһыҙлыҡтарын һыҙыҡ өҫтөнә алыуҙарын, бының менән ҡыҙылдар бик ҙур хата яһауҙарын һөйләргә ҡуша.

Һөйләшеү бик ҡырҡыу хәлдә бара, өҙөлә яҙып ҡуя. Мирсәйеттең түҙемлелеге, асыҡлығы, табип Ҡулаевтың һалҡын ҡанлылығы, логикаһы хәлде ыңғай яҡҡа бора. Рәсәйҙең милли ҡоролошо буйынса фекер алышҡанда ла Солтанғәлиев аныҡ фекер йөрөтә. Рәсәйҙә бөтә милләттәр ҙә тиң, тигеҙ хоҡуҡтарға эйә булырға тейешлеген әйтә, унда үҙ улдары, үгәй балалар булырға тейеш түгел, ти.

— Был бит, Наркомнац иптәш, Сталиндың ҡарашына ҡаршы килә түгелме? — тип һорарға мәжбүр була Муллайән Халиков.

— Минең үҙ фекерем был, — ти Солтанғәлиев.

— Иптәш Сталин үҙ фекерен матбуғат аша белдерҙе бит. Был хөкүмәттең, партияның рәсми ҡарашы түгелме ни?

— Уныһы шулай. Минең фекергә бөтә милләт вәкилдәре ҡул ҡуйырға әҙер. Әлбиттә, Балтик буйы, Грузия һәм Украина айырым, өҫтөнлөклө хоҡуҡтар яғында.

— Был — бик уйлап хәл итә торған мәсьәлә, — тип үҙ һүҙен ҡыҫтырҙы Мөхәмәтхан Ҡулаев.

— Башҡорт автономияһына беҙ ҡаршы булмаясаҡбыҙ, тик башҡорт ғәскәрҙәре тулыһынса ҡыҙылдар яғына сыҡһын, Колчакты ла, Дутовты ла тулыһынса ташлаһын, — тип ныҡышты Солтанғәлиев. — Мин башҡорттарҙың хәлен аңлайым, үҙем шул яҡтан. Башҡортостандағы хәлдәр Татарстандыҡынан да аяныслыраҡ. Башҡорттар үҙ илендә аҙсылыҡҡа ҡалған. Телдәрен берәү ҙә өйрәнмәй, бөтә эш урыҫ телендә бара.

Һис шикһеҙ, Мирсәйеттең Өфөләге һөйләшеүҙәре эҙһеҙ үтмәне, улар башҡорттарҙың Совет власы яғына сығыуын тиҙләтте, икеләнеү, шикләнеүҙәрҙе ныҡ кәметте. Ләкин уның милли мәсьәләләр буйынса Зәки Вәлиди позицияларында тороуы, Рәсәйҙең федератив, уның милләттәренең тиң хоҡуҡлы булырға тейешлеге хаҡындағы ҡараштары тейешле органдарҙа теркәлде, уға ҡарата оло шик, һаҡлыҡ күрһәтеү кәрәклеген аңғартты. Һәм был эшләнде. Репрессияларҙың беренсе тулҡыны башланғас та, уның кеүек шәхестәрҙе 1923 йылда уҡ юлдан һыпырып ташланылар. Төп ғәйебен Урта Азия баҫмасылары, Төркиә менән бәйләнеш тотоуҙа, Туран дәүләте төҙөү идеяһын яҡлауҙа таптылар.

Делегация иртәгәһенә үк юлға сыҡты. Саҡырыу телеграммаһы, таныҡлыҡтары ҡыҙыл фронтты үтеүгә ярҙам итте. Һөйләшеүҙәр эшлекле генә башланды. Әхмәтзәки Вәлидиҙең башта үҙен генә Сталин менән Троцкий ҡабул итте. Итәғәтле генә һөйләшеүҙе большевистик партияның иң ҙур лидерҙары алып барҙы. В.И.Ленин Коминтерн конгресына әҙерләнә ине. Шуға башҡорт делегацияһын ҡапыл ғына ҡабул итә алманы.

Март башы булһа ла, Мәскәү урамдарында ҡар өйөмдәре ята, уларҙы таҙартып, ҡаланан ситкә сығарып тороусы юҡ. Урам һепереүселәргә күптән түләмәйҙәр икән. Етмәһә, күп ҡатлы йорттарҙың тәҙрәләренән ҡый-ҡыпы төрөлгән гәзиттәрҙе, тоҡсайҙарҙы урамға ырғыталар. Тотош Мәскәү бер сүп өйөмөнә оҡшап ята.

Мәскәүҙә осрашыуҙарҙың өсөнсө көнө үткәс, Ленин Башҡорт хөкүмәте вәкилдәрен үҙенә саҡыртты. Әхмәтзәки Вәлиди менән уның урынбаçары итеп тәғәйенләнгән Мстислав Ҡулаев был көн иртәндән йәйәүләп Кремлгә йүнәлде. Уларҙың кейем-һалымдарын ҡапшап, кеçәләрен әйләндереп тә ҡарамай, ҡоралдары барлығын тикшереп тә тормай үткәрҙеләр. Ә бит Ленинды 1918 йылда эсерҙар башына атып, ҡаты яралағайнылар. Әхмәтзәки быны һаҡһыҙлыҡҡа һанаһа ла, шулай килеп сыҡты.

Делегация ағзалары ишектән күренеү менән, бүлмә хужаһы уларға ҡаршы атланы, ҡулын биреп күреште һәм өçтәл артына ултырырға ымланы. Өçтәлендә ҡағыҙ биттәре ҡуя торған этажерканан башҡа бер ни ҙә юҡ ине. Хужа етеҙ хәрәкәттәр менән шул этажерканан ҡағыҙ, ҡәләм алып, Әхмәтзәки Вәлиди атаған көнсығыштың абруйлы шәхестәрен теркәп ултыра. Әхмәтзәкигә ошо этажеркала Владимир Лениндың пистолеты бар һымаҡ, ул шуға һонолоп-һонолоп ҡарағандай тойолдо. Шулай ҙа был шигенән тиҙ ҡотолдо. Бүлмә хужаһы көнсығыш халыҡтары хәрәкәте, уларҙың Рәсәй менән бәйле мәсьәләләре тураһында ихлас һораша ине. Ҡулаев был теремек хәрәкәтле, күҙҙәрен ҡыçыбыраҡ, йылмая биреп һөйләшкән кешегә күңеле менән баштан уҡ ышана ине, шикелле. Һүҙҙән һүҙ китте лә, пролетар революция юлбашсыһы Мөхәмәтханға әйләнеп:

— Иптәшегеҙҙең исеме мосолманса, Әхмәтзәки, ә һеҙҙеке ни өсөн Мстислав? — тип һорап ҡуйҙы ҡапыл. Уны йөҙө лә, торош-ҡиәфәте лә исеменә тап килмәгәнен күрҙе ул.

— Мин — башҡорт христианы, — тигән булды Мстислав, уңайһыҙлыҡ кисереп.

— Дин алыштырыуығыҙ арҡаһында халҡығыҙ менән мөнәсәбәтегеҙ боҙолманымы һуң? — Ленин хәлдең тап уртаһына баçты. — Динде алмаштырмай ғына атеист булыу яҡшыраҡ түгелме һуң? — тип һүҙен дауам итте ул.

Мстислав Ҡулаев ныҡ уңайһыҙланды, юғалып уҡ ҡалды һәм аныҡ ҡына итеп яуап та бирә алманы. Университетҡа инер өсөн дә, батюшка Матвейҙың сибәр ҡыҙына ғашиҡ булған өсөн христианлыҡты ҡабул иттем, тип һөйләп ултыра алмай бит инде. Был ҡыйынлыҡтан бүлмә хужаһы ҡунаҡтарҙы үҙе сығарҙы, һүҙҙе ҡапыл ғына башҡорттарҙың, уның хөкүмәтенең Советтар яғына сығыуын хуплауға күсерҙе.

— Оҙаҡламай Рәсәй Коммунистар партияһының һигеҙенсе съезы асыла. Беҙ унда милли һәм көнсығыш илдәр менән мөнәсәбәттәр мәсьәләһен дә тикшерәсәкбеҙ. Был өлкәлә һеҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә өмөтләнәбеҙ. Һеҙ үҙегеҙҙең ҡарарығыҙ менән царизм тарафынан иҙелгән Көнсығыш халыҡтарына һәйбәт үрнәк күрһәткәнһегеҙ.

Һөйләшеү әлегә шуның менән тамамланды, Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре Ленинндан рухтары күтәрелеп сыҡты. Сталин менән Троцкийға ҡарағанда милләттәр яҙмышы мәсьәләһен, Рәсәй өсөн федераль ҡоро-

лоштоң мөһимлеген тәрәнерәк аңлай кеүек тойолдо уларға. Әхмәтзәки Вәлиди генә һаман, был йәшерен аҙым түгелме икән, тип шикләнеүен дауам итте, тик был шиген юлдаштарына белдермәй торорға булды.

Бынан һуң булған ваҡиғалар Зәки Вәлидиҙе ошо шигенә тамам ышандыра барҙы.

В.И.Лениндың Бухарин менән милли мәсьәләләр буйынса бәхәсе матбуғатта баҫылғас, Әхмәтзәки Вәлиди уның башҡорт автономияһына ыңғай ҡарашы ваҡытлыса ғына эшләнгән тактик аҙым икәнен аңланы. Юлбашсы башҡорт хәрәкәте лидерҙарын да буржуаз элементтар рәтенә ҡуя икән, киләсәктә пролетар революция һәр урында ла, төбәктәрҙә лә еңһә, милләт ул иҙгенселәренән үҙе ҡотоласаҡ, ти. Йәғни милләттең ялпыһын шуға этәрә. Бына һиңә кәрәк булһа! Тимәк, милли мәсьәлә синфи, социаль бүленешкә ҡайтарылып хәл ителәсәк. Ана ҡайҙа бара ул. Әлеге пролетариат гегемонияһы милләттең берҙәмлегенән өҫтөн ҡуйыла.

Нисек кенә булһа ла, Башҡорт хөкүмәтенә кире артҡа сигенергә лә, ситкә янтайырға ла яй юҡ икәнен Әхмәтзәки Вәлиди генә түгел, уның яҡындары ла аңлай ине.

Ғәскәри көс ауыр туплана, ойоштороу ҡыйынлаша. Ҡорал, хәрби кейем етмәй. Хөкүмәт үҙе лә ҡурҡыныс аҫтында ҡалды. Уның Мәскәүгә барыуы, Советтар яғына сығыуы Дутовҡа ла, Колчакка ла билдәле булды. Шуның өҫтәүенә, башҡорт полктарының был генералдар ҡуйған командирҙарға буйһонмауы, ебәргән фронтҡа бармау осраҡтары асылды. Аҡ армия башҡорт ғәскәрен ҡоралландырыу урынына ҡоралһыҙландыра, тарата башланы. Ҡаҙағстан ерҙәрендә һуғышҡан 2-се полкы, фронтты ташлап, Ырымбурға килә һәм Каруанһарай янында митинг үткәрә. Һалдаттар ғау ҡуптара:

— Аҡ генералдарға, атамандарға хеҙмәт итмәбеҙ!

— Үҙебеҙҙең башҡорт хөкүмәтен яҡлайбыҙ!

— Беҙгә ҡорал!

Кемдер Ырымбурҙа атаман Дутовтың ҡорал склады барлығын хәбәр итә. Ярһыған һалдаттар шунда йүнәлә һәм, складтың тимер ишектәрен ватып, булған ҡоралды таратып ала.

Был яңы шарттарҙа ниндәйҙер етди ҡарарҙарға килергә кәрәк ине. Башҡорт хөкүмәте ошо полкты, көнбайыш фронттағы йәнә бер нисәһен Ҡыҙыл мәсет, Ҡана тирәһенә тупларға бойороҡ бирә. Был ҡыҙылдар яғына сығыуға әҙерлек ине.

Башҡорт хөкүмәте Мәскәүҙәге һөйләшеүҙәр башланған саҡта уҡ, Ырымбурҙан Темәскә күсә, Башҡортостан революцион комитетына әйләнеп, эшен йәйелдерә. Табип Мстислав Ҡулаев та, төп эшен ҡалдырып, ревком ағзаһы бурысын башҡарырға тотона. Кананикольск заводында тупланып өлгөргән 5-се башҡорт армияһынан вәкилдәр килеп, ревкомдан армияның яҙмышын хәл итеүҙе һорай. Бында ревком ағзалары Мстислав Ҡулаев менән Муллайән Халиков ебәрелә. Улар инде армия бүлемдәрендә йыйылыштар үткәреп, ревкомдың позицияһын, Советтар яғына сығыуҙың һис шикһеҙ икәнен аңлата.

Һалдаттар һәр ерҙә был һүҙҙәрҙе "Ур-ра!" менән ҡабул итә. Колчак менән Дутов армияларына ҡаршы һуғышҡа сығырға әҙерлектәрен күрһәтә.

— Йәшәһен Ҡыҙыл Башҡортостан!

— Беҙ — Башҡорт ревкомы яғында!

Бындай орандар йыйылыштарҙа, митингыларҙа яңғырап тора.

Башҡорт хөкүмәте менән һөйләшеүҙе, килешеүҙе Мәскәү ҡыҙыулатып алып китте. Саҡырыу артынан саҡырыу яуҙы. Әхмәтзәки Вәлиди унда йәнә Ҡулаевты, уға ярҙамға Муллайән Халиков менән Юныс Бикбовты ебәрҙе.

Һөйләшеүҙәр яңынан башланды. Хәҙер инде хөкүмәт рәйесе итеп билдәләнгән Мстислав Ҡулаевтың ҡулында рәсми килешеүҙең Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хөкүмәте тарафынан хупланған тексы бар ине. Унан бер аҙым да сигенергә ярамағанын делегация ағзалары аңлай. Унда Башҡортостандың территориаль сиктәре билдәләнә, әлеге ун өс кантондың һәр береһе сиктәре менән күрһәтелгән.

Һөйләшеү милләт эштәре халыҡ комиссары Иосиф Сталин менән бара. Ауыр һөйләшеү. Бәләкәй Башҡортостан кимәлендә автономияның сиктәре билдәләнде, башҡорт халҡы йәшәгән Башҡортостан, Ырымбур, Силәбе төбәктәре инде. Башҡорт ғәскәрен һаҡлау мәсьәләһе уларҙың тулыһынса ҡыҙылдар яғына күсеү, тиҙ арала Колчакка һәм башҡа аҡтарға ҡаршы һуғышҡа инеү шарты менән ҡабул ителде.

Тимер юл, автомобиль юлдары тулыһынса Мәскәү ҡарамағына бирелде. Башҡорт еренә ҡасандыр күсерелгән поляктар һәм украиндарҙың һайлау хоҡуҡтарын сикләүгә Сталин ҡырҡа ҡаршы булды.

Башҡорт хөкүмәте ағзалары бының зарурлығын күп төбәктәрҙә төп халыҡтың һан буйынса аҙсылыҡ тәшкил итеүе менән нигеҙләне, юғиһә уларҙың хоҡуҡтары сикләнәсәк. Барыбер был пункт килешеүҙән алып ташланды.

Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп ваҡытлыса Темәс ауылы билдәләнде. Килеп тыуған шарттар нәтижәһе ине был. Аҙағыраҡ хөкүмәт Туҡ буйына, шунан Стәрлетамаҡҡа күсте. Килешеүҙә шулай уҡ Башҡорт хөкүмәте ағзаларын элекке эшмәкәрлектәре өсөн эҙәрлекләмәү тураһында ла пункт билдәләнде. (Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Совет хөкүмәте быны мәкерле рәүештә боҙоп, 20-се йылдар уртаһында Зәки Вәлиди хөкүмәте ағзаларын, уның фекерҙәштәрен ҡулға алып, күбеһен атып үлтереп, һөргөнгә оҙатып бөттө. "Вәлидовсылыҡ", "буржуаз милләтселек" тигән сәйәси ғәйеп тағып, уларҙың ғаиләләрен дә эҙәрлекләне. Был язаларҙан сит илдәргә ҡасҡан, сәйәсәттән бөтөнләй ситләшкәндәр генә боҫоп ҡала алды. "Башҡорт христианы" Мстислав Ҡулаев та, суртан әмере менән тигәндәй, Башҡортостандан ситтә — Ҡазанда — сәйәсәттән ваз кисеп, тынып ҡалды).

Сталин иләгенән иләнгән, ун алты параграфтан торған килешеү проекты В.И.Лениндың өҫтәленә барып ятты. Был тарихи документ менән танышыуҙы юлбашсы оҙаҡҡа һуҙманы. Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре һөйләшеүҙәрҙең алтынсы көнөндә яңынан Ленин янына саҡырылды.

Совет хөкүмәте башлығы Ҡулаевты, электән танығанын белдереп, уның менән йылмайып, бик йылы күреште, башҡалар менән эшлекле ҡиәфәттә иҫәнләште.

— Документ етди эшләнгән, — тине Ленин быларға ҡарап, үҙе һул ҡулын әлеге килешеүҙең өҫтөнә ҡуйҙы.

— "Рәсәй халыҡтары хоҡуҡтары декларацияһы"на таяндыҡ, — тине Мстислав Ҡулаев.

— Дөрөҫ. Ләкин ул документта Рәсәйҙән айырылыу мөмкинлеге лә бирелгән. Һеҙҙең документта ул юҡ, быныһы яҡшы. Ана финдар, поляктар шул хоҡуҡтан файҙаланыуы мөмкин бит. Украинала ла ул тенденциялар һиҙелә.

— Башҡортостан Рәсәйҙең уртаһында бит, беҙ ҡайҙа китәбеҙ? — тип өҫтәне йәнә Ҡулаев.

— Это разумно. — Был һүҙенән һуң Владимир Ленин өҫтәлдәге килешеү ҡағыҙына эйелде. — Бына был тарихи документҡа мин башлап ҡулымды ҡуям, — тине ул бер эске ҡәнәғәтлек менән. — Беҙ бына шулай Рәсәйҙең һәр милләтенә автономия бирәсәкбеҙ. Һеҙ, башҡорттар, үрнәк күрһәтәһегеҙ. Иртәгә, 19 март көнө, был документ Рәсәйгә генә түгел, бөтә донъяға мәғлүм буласаҡ. Әйҙә, күрһендәр Совет хөкүмәте ниҙәр эшләй.

Ильичтың сәркәтибе Енукидзе уға ҡатырға эсенә һалынған килешеү тексын һул ҡулы яғынан алдына һалды, уң ҡулына ҡараға манылған ручка тотторҙо. Ленindан һуң тарихи ручка башҡорттар ҡулына күсте, беренсе булып Ҡулаев, унығ артынан Халиков, иң аҙаҡ Бикбауов имзаларын һалып, килешеүҙең бер данаһын үҙҙәренә алдылар.

Был килешеүҙә Башҡорт хөкүмәтенең хоҡуҡтары, мөмкинлектәре аныҡ ҡына билдәләнмәгәнгәме, автономияға кире ҡараштар дауам иттеме, большевиктарҙың урындағы вәкилдәре улар менән тупаҫ эш итте, милли автономияны күңелдәре менән ҡабул итмәнеләр, шул арҡала Ҡыҙыл армия командирҙары менән дә ҡатмарлы мөнәсәбәттәр башланды. Урындағы Совет власы органдары Ленин менән Сталин ҡул ҡуйған килешеүҙе һанламаған кеүек ҡыландылар. Тупаҫлыҡ бигерәк тә ҡыҙылдар яғына сыҡҡан башҡорт ғәскәрҙәренә ҡарата күрһәтелде. Килешеүҙең шарттарын боҙоп, уларҙың ҡоралдарын, хатта кейемдәрен һалдырып алып, төрлө тарафтарға берәм-һәрәм ҡыуҙылар.

Тыныс тормошҡа күптән һыуһаған, тыуған ерҙәрен һағынған һалдаттарҙың байтағына был хәл ярап ҡалды. Байтағы үҙ яҡтарына шылыу яғын ҡараны. Улар әле ғәскәрһеҙ ҡалған халыҡтың ҡыҙыл командиры әрмән Гай, полковник Зеленковтар өсөн башҡорт ауылдарын талауға, ҡоралһыҙ ҡалған һалдаттарын ғына түгел, халҡын мыҫҡыл итеүҙәргә юл асҡанын аңлап етмәй ине. Кәмһетеүҙәр тураһындағы яман хәбәрҙәр таратылып өлгөрмәгән башҡорт полктарына тиҙ килеп етте. Йөҙ башы, элекке унтер-офицер Муса Мортазин Урал аръяғында булған этлектәрҙе үҙ күҙе менән күргәс, Пенза полкынан ҡаты үс алды, тотош бер ротаһын турап ташланы. Әмир Ҡарамыш етәкләгән башҡорт уҡсылар полкы кире Колчак яғына сығып, уның формированиелары менән көнсығышҡа табан китте.

Хөкүмәт типографияһын һәм архивын Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә алып китеп барған бер төркөм башҡорт һалдаттарын, танылып өлгөргән шағирҙар Шәйехзада Бабич менән Әптелхай Иркәбаевты Йылайырҙың ҡыҙыл отрядтарға яҙылып ҡорал эләктереп ҡалған йыйын әтрәгәләмдәре вәхшиҙәрсә үлтерҙе. Был ҡот осҡос хәбәр Әхмәтзәки Вәлидигә, Башревком ағзаларына тиҙ килеп етте, большевиктарға ҡарата ышанысһыҙлыҡ ҡына түгел, нәфрәт уятты. Шәйехзада Бабич күптән түгел генә башҡорт ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын хуплап, ошо уңай менән көйлө хитап яҙып, матбуғатта баҫтырғайны. Халыҡ араһында бик көслө хуплау менән ҡаршы алынды был шиғри ауаздар.

Ҡыҙылдарҙың вәхшилектәре Үҫәргән кантонында ла, тау яғы ауылдарында ла күп ҡабатланды. Был хәбәрҙәр Мәскәүгә лә барып етте. Көнсығыш фронттың ҡыҙыл ғәскәрҙәре частарына ҡаты фармандар таратылды. Тик был һуңлаған аҙымдар ине. Башҡорт халҡының лидерҙары ғына түгел, массалары ла большевиктарға ҡарата икеләнеүҙәр, шик-шөбһәләр эсендә ҡалды.

Тормошҡа, булып ятҡан сәйәси ваҡиғаларға либераль ҡарашлы, большевиктарға ышанып өлгөргән артыҡ бер ҡатлы Мстислав Ҡулаев был хәбәрҙәрҙе күреп, ишетеп, бошонҡолоҡҡа бирелә башланы, бөтә башлаған эштәре емерелеп төшөр кеүек булып тик торҙо. Хөкүмәт башындағы кешегә икеләнеүҙәр ярамағанын да аңлай ине ул, көн дә хәүефле ҡарарҙар ҡабул итергә кәрәк. Кисә генә Башҡортостандың баш ҡалаһы итеп ҡайҙа туҡталыу мәсьәләһендә ошо бәхәс ҡупты. Өфөлә башҡорт ҡатламы әҙ, етәксе большевиктар һаман автономияға кире ҡарай, Башревком ҡарарҙарын инҡар итә, уны эшлекле һанамай. Стәрлегә күсереү тураһында мәсьәлә ҡуҙғалғайны, уныһы Кесе Башҡортостан эсенә инмәгән булып сыҡты. Башревком һаман күсенеү өҫтөндә, әле һуңғы туҡтаған урыны — Ермолаевка ҡасабаһында. Ул да үҙәк итерлек ҡала түгел, иҫке бер ауыл. Сыуалсыҡ сәйәсәттән башы тамам ҡатҡан Башревком рәйесе үҙен юғары властан бушатыуҙарын һорап, Әхмәтзәки Вәлидигә һәм хөкүмәт ағзаларына мөрәжәғәт итте.

— Әхмәтзәки туған, мин бик ҡаҡшаным. Артабан был эште тарта алмам кеүек.

— Эй, Мөхәмәтхан ағай, беҙгә һеҙҙең һалҡын аҡылығыҙ, урыҫтар менән эш итә белеүегеҙ бик кәрәк.

— Шулай ҙа бит. Икеләнәм йыш, ышанысым китте. Хөкүмәт эшем дә ауыр. — Арыным. Башҡаса хәлем юҡ. Мине бит табип итеп кенән саҡырғайнығыҙ, сәйәсәткә килеп индем. Минең эш түгел ул.

— Шулай ҙа һуң. Минең дә фән менән генә булырға ине ниәт. Ана бит, ҡайҙа килеп индем. Халҡыбыҙҙың яҙмышы ҡыл өҫтөндә бит, ағай.

— Ғаиләм янына ҡайтып киләйем, исмаһам. Бәлки, әҙерәк тынысланырмын.

— Ярай. Рәйеслекте Харис Йомағоловҡа тапшырып тор, ышаныслы күренә. Урап килгәс, күҙ күрер.

Был ҡайтырға рөхсәт ине. Мәскәүҙән ҡайтып килешләй туҡтаған Саранскийҙан тура Ҡазанға юлланды.

Ҡара янып килеп кергән ирен күреп, ҡатыны Нина торған еренән тәгәрәп китә яҙҙы.

— Мстислав, господи, тереһең икән әле. Беҙ һинең өсөн илашып бөттөк. Ярай, Ҡазан гәзиттәрендә һинең Ленин, Сталин менән бергә автономия тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыуыңды яҙҙылар. Етмәһә, “Ҡазан табибы Ҡулаев” тигәндәр, башҡорт икәнегеҙҙе иҫкә лә алмайҙар.

— Булды инде.

— Әйттем бит. Һин күңелең менән йомшаҡһың. Һинән хөкүмәт етәксеһе сығыуы шикле, тинем. Һин күтәрерлек эш түгел ул.

Ул арала буй еткән өс ҡыҙы күрше бүлмәнән килеп инеп, атаһын һырып алдылар. Аталары уларҙы берәм-берәм үбеп, баштарынан һыйпап ҡуйҙы.

— Пап, пап, папочка, больше никуда! — тип ҡабатланы Еленаһы.

— Ни шагу! — тип өҫтәне Татьянаһы.

— Ярар, ярар, балаҡайҙарым! Минең һағыныуымды белһәгеҙ.

Мстислав ҡыҙҙарын нисек тә тынысландырырға тырышты.

— Тотош ҡайтҡанһыңдыр инде, йәшең дә иллегә етте, — тип төпсөндө һаман ҡатыны.

— Юҡ, ысҡынып булманы бит әле. Кәрәкһең, тиҙәр. Хөкүмәт ағзаһы булып ҡалдым, ял бирҙеләр әле. Ялдан һуң Ырымбурға, йә Стәрлетамаҡҡа йүнәлергә тура килер бәлки.

— Ул Стәрлетамаҡ тигәнең ҡайҙа тағы?

— Башҡортостандың яңы баш ҡалаһы ул. Өфө—Ырымбур юлында ята, Ағиҙел буйында. Унда Өфөнән пароходтар ҙа күтәрелә тиҙәр.

— Волга түгелдер инде, ундай йылғаны мин дә белер инем.

— Баш ҡала итһәң, ҙурайыр, үҫер әле, оло юл эсендә ята бит.

— Ярар, етәр, хыялланма инде, сабып йөрөүең етәр, балалар үҫте. Ана, ҡара, Еленаң еткән ҡыҙ булды. Кейәүгә лә сығыр, оҙаҡламаҫ.

— Әллә берәйһе йөрөйҙәме?

— Йөрөй шул, бер егет менән күрешә. Был һүҙҙәрҙән Мстислав та һағая төштө. — Вероника ла буй еткереп килә. Бөтәһе лә миңә генә ҡарап ҡалмаһын ине. Атай ҡәҙерен дә күрһендәр, Мстислав, дорогой.

Ҡатыны шундай иркәлек, наҙлылыҡ менән иренең муйынына һарылды, ҡулдарын уның киң яурынына һалды. Мстиславтың күҙҙәренә йәштәр тулып, йөрәге йылынып, ҡалтырап китте.

— Кеше өсөн донъяла үҙ ғаиләһендә балаларын башынан һыйпап, арҡаларынан тупылдатып ҡағып һөйөүҙән дә артыҡ нәмә юҡтыр инде, ҡәҙерлем Нина.

Мстислав ҡатынының да сәстәрен һыйпап, йомшаҡ ҡына, наҙлы ғына итеп муйынынан үбеп алды. Был хәрәкәтенән үҙе лә бик йылы тойғолар уянғанын тойоп, ҡыуанды. Нина уның күҙҙәренә туп-тура ҡарап торҙо.

Күп тә үтмәй, балалары ла килеп, аталарының муйынына аҫылынды.

— О, Еленам, һөйөклөм, ҡайһылай ҙурайып, оҙонайып киткәнһең, — тип башынан һыйпаны ул оло ҡыҙын. — минән ярты башҡа бейекһең, аҡылың бәлки бер башҡа артыҡтыр.

Ҡыҙҙары рәхәтләнеп көлдө. Иң бәләкәй Татьянаһы ла атай иркәләүен һағынған, ахыры, ҡултыҡ аҫтына башын тыға һалды.

— Атай, һин ҡабат беҙҙе ҡалдырып китмә, йәме, — тине ул, атаһына һырынып. — Һинһеҙ күңелһеҙ, һағынабыҙ.

— Дәүләт эше бит, балаҡайҙарым. Халҡым да бар бит әле минең, — тигән булды аталары, был һүҙҙең уның өсөн ни тиклем юғары икәнен балалары аңлап етмәгәнен белһә лә. — Ярар, балаҡайҙарым, был юлы һеҙҙе тыңлап ҡарайым, — тигән булды ул ни әйтергә белмәй.

Яҙмыш еле бишенсе тиҫтәгә аяҡ баҫырға торған Мстислав Ҡулаевтың тормошон көтмәгәндә икенсе яҡҡа бороп ебәрҙе. Ҡазанға ҡайты-

уының тәүге аҙнаһында уҡ сабыртмалы тиф менән бик ҡаты сирләп, хәстәханаға барып инде. Әллә ҡайҙа эләктергән, үҙе лә белмәй ҡалды ул, күрәһең, ҡайтып килгәндә берәй сирле кешегә яҡын барғандыр инде.

Был ауыр сир уны айҙан артыҡ ваҡытҡа аяҡтан йыҡты, хәстәханала карантин тәртибендә ятты. Һауыҡҡан һаналып, өйөнә ҡайтҡанда ла бик хәлһеҙ ине ул, саҡ аяҡтарын ҡуҙғата алды. Башҡортостан яғына яңынан юлланыу хыялы юҡҡа сыҡты тиерлек. Ҡатыны ла, балалары ла был турала һүҙен тыңларға ла теләмәнеләр, ҡырҡа ҡаршы булдылар, Башревкомдан бер телеграмма ла килгәйне, уны ла ҡатыны ҡырғараҡ йәшерҙе.

Ҡулаев элек хеҙмәт итеп киткән госпиталенә табип булып яңынан эшкә тотонғайны, Татарстандың һаулыҡ һаҡлау наркомы саҡырып алды.

— Һеҙҙең, Ҡулаев әфәнде, һаулыҡ һаҡлау эшен ойоштороуҙа тәжрибәгеҙ ҙур. Һеҙгә бер бик яуаплы бурыс йөкмәтмәксебеҙ әле, — тип ҡаршы алды ул.

— Тыңлайым һеҙҙе, иптәш нарком.

— Ҡазандағы Болаҡ аръяғы биҫтәһе танышмы һеҙгә?

— Эйе, күпмелер дәрәжәлә.

— Унда бит күберәк татарҙар йәшәй. Шул районда хәстәхана ойоштороп, эшләтеп ебәрергә ине. — Ҡулаев уны артабан тыңларға әҙерлеген күрһәтеп, бер ни ҙә өндәшмәй ултырҙы. — Этләнә бит беҙҙең халыҡ, һыуһыҙ, утһыҙ йәшәй тиерлек. Күп ғаиләләр — подвалдарҙа.

— Бина һәм ҡорамал өсөн матди сығымдар ҡаралғанмы һуң?

— Бина иҫке инде, буш казарма тора. Шуға капиталь ремонт үткәрәһе бар. Аҡса бюджеттан бүлербеҙ. Ләкин ул ғына етмәҫ. Һеҙ — абруйлы кеше, хәллерәк татарҙарға мөрәжәғәт тә яҙырһығыҙ. Штатты ла үҙегеҙ тупларһығыҙ. Баш табип итергә әмер бирермен.

— Хәстахананың эш йүнәлеше нисек билдәләнә? Ниндәй ауырыуҙарҙы дауалайбыҙ?

— Ул дөйөмөрәк, универсаль йүнәлешле булыр инде. Участка хәстәханаһы, шул төбәк халҡы өсөн.

— Мин туберкулез диспансерында ординатор булдым, әле лә ул эшемде туҡтатҡаным юҡ. Докторлыҡ диссертацияһы өсөн материал да туплағайным. Бәлки шуны дауам итермен?

— Әлегә мин әйткән эш бик мөһим. Участка хәстәханаһын асып, эшләтеп ебәрһәгеҙ, тубдиспансерҙы ла башҡа урында асырбыҙ.

Наркомдың тәкдимдәре ҡәтғи ине. Ҡулаевҡа һайланырға урын ҡалдырманы ул. Оҙаҡламай табип Ҡулаев ошо хәстәхананы ойоштороу эшенә баштан-аяҡ сумды. Үҙенең буласаҡ участкаһын йөрөп сыҡты. Урамдар сатай-ботай, бер осо барып Болаҡ һаҙлығына, ҡамышлыҡҡа төртөлгәндәре бар. Тирә-яҡҡа сүп-сар тулған, себен-серәкәй туп-тулы. Йорттарҙы йөрөп сығырлыҡ түгел, әлегә тик саҡырыуҙар буйынса ғына бара табип. Балалары һалҡын алдырып, сәсрәп ауырып ята, хәлһеҙ ҡарт-ҡоро янына саҡырталар. Биҫтәнең санитар хәле тураһында түрәләр исеменә бер нисә акт төҙөп бирҙе ул.

Хәстәхананың бинаһына капиталь ремонт үткәреү ҙә ҙур мәшәҡәт менән үтте. Көндәлек хәстәр менән Башҡортостанда булып ятҡан хәлдәрҙе

лә онотоп торҙо табип. Түрәләрҙән түрәләргә йөрөнө, ҡаҡмаҫ ишектәрен ҡаҡты, һанламаҫ кешеләр алдында башын эйҙе.

Йәмәғәт эштәре араһына ғаилә хәжәттәре лә килеп ҡыҫылып торҙо. Бер көндө ул эштән тамам арып ҡайтыуына ҡатыны әллә ниндәй бер тулҡынланыу менән хәбәрен теҙеп һалды.

— Беләһеңме, Славик, ҡыҙҙар етте бит.

— Беләм, күрәм, йә, ни әйтмәксеһең?

Иренең бик арығанлығын, күңеле тыныс түгеллеген күреп торһа ла, Нина һүҙен әйтмәй булдыра алманы.

— Еленаны һоратырға килделәр бит. Бер йәш егет ағаһы менән ине. Элек тә бер килгәйнеләр. Һинең һауыҡҡаныңды, эштән аҙыраҡ бушағаныңды көттөләр.

— Еленаға кейәү тураһында уйлау иртәрәк түгелме?

— Егермегә сыҡты бит инде һинең башҡорт ҡыҙың. Ана ниндәй тулышып, йомроланып китте. Һеҙҙең нәҫел иртә өлгөрә түгелме? Ун ике-ун өс йәштән бирәләр түгелме һуң ҡыҙҙарҙы?

— Ярар, ул замандар үтте бит инде, Нина. Етдиерәк һөйләшәйек әле. Ҡайҙа йәшәрҙәр? Кейәү булмаҡсы егет кем?

— Университет студенты. Фәлсәфә факультетының дүрт курсын тамамлаған. Етди егеткә оҡшаған, граждандар һуғышында ҡатнашырға ла, большевиктар партияһына инергә лә өлгөргән. Һин уларҙы бик яратып етмәйһең инде, үтенәм, уйыңды бик белдермәйерәк тор.

— Ни һөйләйһең һин, Нина? Өс ай элек кенә иң атаҡлы большевиктар менән уртаҡ тел табып, килешеп, башҡорттарыма автономия раҫлатып ҡайттым түгелме? Башҡорт ғәскәрҙәрен шул большевиктар яғына сығарыусы, аҡ батшаларға ҡаршы һуғышҡа өндәүсе мин түгелме ни? Һөйһөнмәйһең, имеш.

— Уныһы дәүләт эше бит. Бында ғаилә яҙмышы. Балабыҙҙы нишләтәбеҙ?

— Большевиктарҙан халыҡ ныҡ зарыҡһа ла, уларға үсем юҡ. Үҙҙәренсә улар ҙа хаҡлылыр, бәлки. Автономияны улар танinforme бит әле.

Ул арала Еленалары ике ерән сәсле егет менән ҡайтып инде. Уның йөҙө балҡый ине, айға менгәндәй булған.

— Атай, таныш бул. Минең буласаҡ кейәүем, — тип һалды ул, ишектән ингәс тә. — Матушка таныш инде.

Егеттәрҙең тырпағыраҡ сәслеһе, йәшерәге килеп күреште.

— Алексей Соколов, — тине ул ҡыйыу ғына һәм шунда уҡ үҙенең кемлеген дә иғлан итте. — Дүртенсе курс студентымын. Леночка менән йылдан артыҡ танышбыҙ, дуҫлаштыҡ та.

— Елена әҙәбиәт факультетының өсөнсө курсын ғына бөттө бит әле. Тағы ике йыл уҡыйһы бар.

— Ну, атай, мин бит һинең иң оло ҡыҙың, башҡорт ҡыҙың. Һеңлеләрем минән аша ҡарай башланы.

— Эйе. Бының менән ни әйтергә теләйһең?

— Алексей минең ҡулымды һорай.

— Минең һүҙем шул: тағы бер йыл көтөгөҙ әле, уҡыуыңдың рәте китер. Мөхәббәтте ваҡыт һынай.

— Атаҡайым, улай уҡ ҡаты бәғерле булма инде. Башҡорт тигәс тә...

— Ҡаршылығым юҡ, дуҫ булығыҙ, йөрөгөҙ. Тик ҡауышыу бер йылдан! Баста!

— Ярар, ҡыҙым, атайың хаҡлы. Өйөбөҙҙәге берҙән-бер ир затын тыңлайыҡ. Һеңлеләрең тороп торор әле. Шулай бит, Алексей Соколов.

Әсәһенең дә фекере ҡәтғилеген Елена аңланы, ҡабат ныҡышыуҙың килешмәгәнен тойҙо.

— Һин беҙгә килеп йөрө, Алексей.

Буласаҡ кейәүгә лә ололарҙың дәлилдәре менән килешергә тура килде. Уның ағаһы ла башын ҡағып ҡына ултырҙы.

Сәй эскәндә Мстислав Ҡулаев Соколовтың ҡайһы фронтта аҡтарға ҡаршы һуғышып йөрөгәнен һорашты. Көнбайышта башҡорт ғәскәрҙәре булмағанын ул белә ине, шулай ҙа һорашыуын бик тәрәнгә ебәрмәне. Аҡтар, ҡыҙылдар темаһын артыҡ сурытыуҙы кәрәкле һанамаһы.

— Тимәк, Алексей, һин философ булмаҡсыһың?

— Эйе, миңә шул факультетҡа үҙебеҙҙең частан йүнәтмә бирҙеләр.

— Беҙҙең Рәсәйҙең үҙ философтары бармы һуң?

— Бар. Мин, мәҫәлән, Плехановты, Бердяевты, Ленинды уҡыным.

— Улар бит һуңғы заманға ҡарай. Беҙҙең дәүер. Ә көнсығыштағы, көнбайыштағы кеүектәр, урта быуаттарҙа кем?

— Улары юҡ инде, нишләйһең. Ул заман өсөн дини философия хас, — тигән булды Соколов.

— Ярай. Уҡып бөткәс, ниндәй ниәт?

— Уҡып бөткәс, атам, әсәм янына, Нижнийға ҡайтырға ине.

Егеттең ихлас асылыуы ҡыҙҙың ата-әсәһенә оҡшай ине.

— Уныһы дөрөҫ. Атай-әсәй янында булыу кәрәк. Беҙҙеңсә әйткәндә, еп энә артынан йөрөй. Елена ла минең һүҙгә ризалыр?

— Эй, атаҡайым, һинең аҡыллы һүҙҙәреңә мин ғүмер буйы мохтаж булырмын инде.

Нина сәй яһауҙан бушамаған һымаҡ йөрөһә лә, ике ҡолағы былар яғында ине. Иренең бер генә һүҙенә лә ҡаршы килмәй, баш ҡағып ҡына йөрөнө ул.

Йәштәр өйҙән сығып киткәс тә, ҡатын-ҡыҙға хас ҡыҙыҡһыныуы менән иренә өндәште:

— Йә, нисегерәк күренде кейәү була торған егет? Ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы?

— Минеңсә, һәүетемсә егет. Үҙенә үҙе ныҡ ышана шикелле.

— Ир кеше шулай булырға тейештер инде.

— Һин "кейәү була торған" тиһең дә ул, ҡайҙа йәшәтергә итәһең һуң әле йәштәрҙе? Бында ятаҡта тора бит әле ул.

— Бәй, беҙҙә йәшәрҙәр. Вероника менән Татьяна икеһе залда тороп торор, беҙ һинең эш бүлмәңдә йоҡлап йөрөрбөҙ. Йәштәргә айырым бүлмә бирербеҙ инде.

— Да-а, мамаша! Бөтәһен дә уйлағанһың да ул, ә балалары булһа?... Барыбер, минеңсә, бер йыл йөрөп торһондар әле.

— Еленабыҙ тормошҡа етди ҡарашлы ҡыҙ, юҡ-бар кешегә башын бәйләмәҫ.

— Амин.

— Ярар, килештеләр бит йәштәр һинең менән. Үҙең мине ҡайһылай өтәсләп алдың. Ялсыҡайға алып киттең хатта, бер ҙә мөхәббәткә һынау үткәреп йөрөмәнең.

— Беҙ бит икенсе быуын кешеләре. — Мстислав Ҡулаев ҡатынының төртмә һүҙҙәренә һис тә үпкәләмәне. — Бөтәһенә лә тормош үҙе өйрәтә ул, — тип кенә ҡуйҙы ла һүҙҙе икенсегә борҙо. — Бына башҡорттар өсөн әҙерләгән алфавитымды яңынан эшкәрттем әле.

— Тағы үҙгәрттеңме? Һин дә бер фанатик булдың инде, Мстислав.

— Юҡ, яңынан тигәс тә, бер генә хәрефен кәметтем, утыҙ өс хәреф хәҙер. Мосолман доғаһындағы тәсбихтағы бер бүлем. Бәлки был вариантты ғәмәлгә ашыра алырмын.

— Белмәйем инде, ҡәҙерлем. Кем өсөн шул тиклем йәнтәслим тырышаһың? Аңламайҙар бит һине. Ислам фанатиктары хәрефтәрен тиҙ ташлай алмаясаҡ. Шуны үҙең дә беләһең бит.

— Тормош үҙе шуға бара, Нина. Беҙ бит Рәсәй менән бөтә тамырҙарыбыҙҙан бәйле. Иҡтисадыбыҙ бер, мәҙәниәтебеҙ яҡынайҙы. Беҙ хәҙер урыҫ теле аша донъя цивилизацияһын үҙләштерәбеҙ. Ғәрәп алыҫта ҡалды. Европа ла яҡын түгел, телдәрен белмәйбеҙ.

Ҡатынының үҙенең туған теленә сарыф иткән көсөн, ваҡытын йәлләүенә Мстислав күнеп бөткәйне инде. Шуға ла уның был шөғөлөн ҡуйып тороп, балалар менән Оло Иҙел буйына сығып, ял итеп алырға өндәүенә лә артыҡ иҫе китмәне, һаман шул яҙыу өҫтәленә эйелде, эш ҡомарының сикһеҙ көсәйеп китеүен тойҙо. Былай ваҡытта уны өҫтәлдән айырып булмағанды ҡатыны белеп бөткәнгә, иплəп кенә үҙе сығып китте.

Был ял көнөн Мстислав академик Николай Яковлевич Маррҙың тел ғилеме буйынса баҫылған ҙур хеҙмәтен уҡып үткәрҙе. Уларҙың асылына төшөнөр өсөн ҡат-ҡат уҡып ҡараны. Бик ҡатмарлы яҙа, материалдары ла күберәк кавказ телдәренән, аңлауы ҡыйын. Ғалимдың телдең килеп сығыуында дүрт төп элементтың урынын билдәләүе оҡшаны, туған теленән дә ошоға оҡшаш факттар эҙләп ҡараны, ләкин бер-ике элементтан артыҡ нәмә тапмай, был теорияны ҡуйып торҙо. Шулай ҙа академиктың логикаһы оҡшаны уға. Үҙ туған теленә яңынан ҡайтып, уның өндәр системаһын ҡабатлап, башынан үткәрҙе, уларҙың физиологик, акустик сифаттарын билдәләп ҡараны, ниндәй тамға менән теге йәки был өндө биреү ҡулайлыраҡ булыуын билдәләргә тырышты.

— Йәмғәтселек алдына сығып ҡарайым әле, ғилми доклад әҙерләйем, — тине ул, эш бүлмәһенә шым ғына килеп ингән ҡатынына борола бирип.

— Былай ҙа фанатик булырһың икән. Аңламайҙар, аңларға ла телмәмәйҙәр бит һине. Иҫәргә һанап ҡуймаһындар.

— Миңә һин аңлаһаң етә, Ниночка. Үҙ ҡаҙанымда күп ҡайнаным, етәр. Таша башланы ҡаҙаным, түбө көйә.

Мстислав үҙенең дәлилдәренә үҙе ҡәнәғәт ине. Уны хәҙер бер кем туҡтата алмаҫын белә.

— Татароведение йәмғиәте алдына сығам, докладым бына, әҙер. Хәрефтәр схемаһын ғына эрерәк итеп ватманға яҙам да...

— Благослови тебя Господь! — тиеүҙән башҡа һүҙ әйтер сараһы юҡ ине ҡатынының.

— И Аллах! — тип өҫтәгән булды Мстислав шаярыу ҡатыш. Ҡатыны мөйөштәге тәрегә ҡарап суҡынып алды, ире был хәрәкәттәрҙе яһаманы.

— Күңелең менән христиан түгелһең һин барыбер, Мстислав, — тип үпкәләгәндәй итте ҡатыны, — бер ҙә суҡынмайһың бит. Бог не простит двоедушия.

— Был турала бик тәрәнгә төшмәй ҡарайыҡ. Христиан байрамдарында сиркәүгә барам бит. Өйҙә тәре тотабыҙ.

— Барһаң да суҡынмайһың, оло гонаһ ҡылаһың, Мстислав.

— Минең өсөн һин суҡынаһың. Өс ҡыҙым да суҡына бит. Ә миңә бик баҫым яһама инде.

— Ярарһың һиңә, башҡортҡа.

Былдай үпкә белдереүҙәр һирәк була торғайны, ирен ныҡлап христиан итә алмауына Нина ла ышанып бөттө һәм уның күңел яраһына ҡабат ҡағылмаҫ булды.

* * *

Татароведение йәмғиәте йыйылышына халыҡ байтаҡ йыйылды. Унда телсе ғалимдар ҙа, гимназия уҡытыусылары ла, мәғариф хеҙмәткәрҙәре лә, хатта Татарстан мәғариф наркомы Бурундуков та килгәйне. Зал тулы. Тынсыу була башланы. Ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшәләр, бәхәсләшәләр.

Мстислав Ҡулаев залға килеп ингәс тә, йыйылған халыҡ дәррәү ҡуҙғала биреп, уға төбәлде. Докладсы бик тыныс ине, ниндәйҙер эске ышаныс менән һөйләне, үҙен башҡорт халҡының бер вәкиле икәнен тойоп эш итте, был уның бар булмышынан һиҙелеп тора ине. Һүҙен йомғаҡлап, залға ҡарап ебәреүе булды, төрлө урындарҙан һорауҙар яуа башланы.

Торна кеүек муйынлы, сәкән кеүек артҡа саҡаҡ башлы бер әҙәм беренсе булып йән көйҙөргөс һорау ташланы.

— Үҙ теле булмаған халыҡҡа алфавит нимәгә кәрәгер тиһегеҙ, Ҡулаев әфәнде?

Мстислав ҡапыл ҡыҙып китеүҙән саҡ тыйылып ҡалды.

— Башҡорт теленең ниндәй икәнен белмәгән әфәнденең һорауы был. Мин үҙ телемде студент сағымдан төрлө төбәктәргә сәйәхәт ҡылып, өйрәндем. Башҡорт теленең үҙ шиүәләре бар. Ул шиүәләрҙең үҙенсәлектәре башҡорттоң ырыу бүлемдәренә, уларҙың йәшәгән урындарына тура килә. Мин үҙем үҫәргән башҡорто, беҙҙә тамъяндар, ҡатайҙар, меңдәр, табындар бар. Шул уҡ ваҡытта бөтә башҡорт аңлаған дөйөм телебеҙ ҙә бар. Кем белгеһе килә, барығыҙ башҡорт төбәктәренә, өйрәнегеҙ. Бабайҙар, инәйҙәр менән һөйләшеп ҡарағыҙ, ысын башҡорт телен аңлатыр улар.

Үҙенең оҙағыраҡ һөйләгәнен Мстислав аңлаған кеүек, ҡапыл туҡтап, йәнә залға төбәлде.

— Аңлашылды, Ҡулаев әфәнде, — тине йыйылышты алып барыусы, тәпәш кәүҙәле, Ғәзизов фамилиялы тел белгесе. — Башҡорт тигән исеме булғас, теле лә барҙыр инде. Был сетерекле мәсьәләне сурытмайыҡ.

— Һеҙ башҡорт автономияһын татарҙан алда алып ҡайтҡанһығыҙ, тип ишеткәйнек. Ниңә татар өсөн дә былдай сәйәси аҙым яһаманығыҙ?

— Ул ваҡытта татарҙарҙа унитаризм, “берҙәм Рәсәй” идеяһы көслө булды. Икенселәре дөйөм исламсылыҡ, төрки-татар берлеге менән янды. Ә башҡорт йөҙәр йылдар буйы үҙаллылыҡҡа ынтылды, шуны аңларға кәрәк ине. Башҡорттарҙа гегемонизм идеяһы юҡ, ул үҙен раçларға ғына ынтыла.

— Ай-һай, шулаймы икән, Ҡулаев әфәнде? Бәлки беҙҙең Ғаяз Исхаҡи, Садри Мәҡсүдиҙәрҙең төрки-татар берлегенә ынтылыуы башҡорт өсөн дә ыңғай булыр ине.

— Юҡ шул. Башҡорт йотолоуҙан ҡурҡа, шуны аңлағыҙ, әфәнделәр. Һеҙ әйткән татар зыялылары унитаризм байрағы аҫтына татар милләтселеген һалып эш итәләр, башҡорттар быны тоя. Сәйәсәттә бесәйсысҡан уйыны хәүефле.

— Ярай, ул яҡҡа бик ҡырынлап китмәйек әле, — тип һүҙҙе йәнә башланған темаға ҡайтатырға итеп ҡараны Ғәзизов.

— Ниңә башҡорттар был алфавитты һорап алмай һуң әле?

— Алырҙар, мин быға ышанам, — тине Мстислав.

— Рәсәй эсендәге халыҡтарҙың берҙән-бер сараһы был. Мин татар вариантын да эшләп бирергә әҙер, бында бер нисә хәрефте генә алып ташлау етә.

— Әстәғәфирулла, — тип һөрәнләне бер түңәрәк йөҙлө, түбәтәйле әҙәм. — Үҙе кафыр булғаны етмәгән, беҙгә ҡарата ла миссионерлыҡ ҡылырға итә. Ҡөрьән Кәрим яҙыуынан татар бер аҙым да ситләшмәйәсәк, иманым камил.

— Динилек менән мәғарифты бутамайыҡ, әфәнделәр, беҙ бит зыялылар, — тигән булды Мстислав, бик йәне көйөп.

— Абау, абау! Тәүбә, тәүбә! — тип һаман ғауғалауын белде баяғы түбәтәй эйәһе.

Бара-бара һүҙ хәреф билдәләренә үк төшөп китте. Ҡулаев ватман ҡағыҙы янында ҡыҙып-ҡыҙып һәр хәрефен яҡланы, һәр билдәне нигеҙләне.

Был килделе-киттелерәк барған бәхәсте өндәшмәй генә, шулай ҙа ҙур иғтибар менән күҙәтеп ултырған нарком Бурундуков күпселектең ҡарашын, ҡайҙа тартҡанын төшөндө һәм үҙенсә хәл итте:

— Ҡарап ултырам-ултырам да, Ҡулаев әфәнденең был хеҙмәте архивҡа бер бик шәп биҙәүес булыр, тигән һығымтаға килдем әле.

Кемдәрҙер ҡыуанысын йәшерә алманы, пырх-пырх көлдө. Шуның менән был ике сәғәткә һуҙылған йыйылыш ябылды.

Докладсы Мстислав Ҡулаев башына һуҡҡан кеүек булып шаңҡып, ҡайтып китте. Күңелендә ауыр тәьҫир ҡалдырҙы был һөйләшеү. Шулай ҙа татар йәмәғәтселеге өсөн бөтөнләй эҙһеҙ үтмәне. Айырым кешеләрҙең аңһыҙ төрткөләп маташыуы тотош йәмәғәтселектең ҡабул итмәүе түгел ине әле. Мстислав быны үҙе лә аңланы.

Татар зыялыларының, ҡайһы бер етәкселәренең күҙенә ташланып ҡалды ул. Был кешенең бер фанатик табип ҡына түгел, төплө белемле шәхес тә икәнен аңланы улар. Был ваҡиғанан һуң күп тә үтмәй әлеге милли мәҙәниәт институты директоры уға рәсми хат менән мөрәжәғәт итте: “Хөрмәтле Мстислав Александрович, һеҙҙең татарса-русса һүҙлектең “к” хәрефен ҡарап сығыуығыҙҙы һәм үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдереүегеҙҙе һорайым”.

Был эште башҡарып бөтөүенә йәнә тәҡдим ала Мстислав. Быныһы Татарстан республикаһы халыҡ комиссариатының ғилми бүлегенән ине. Татар телендә кеше анатомияһы, физиологияһы һәм гистологияһы буйынса терминдар комиссияһында эшләргә үтенес ине. Бөтә был эштәрҙе ҡулынан килгәнсе, белеме еткәнсе, намыҫ менән башҡарҙы ул. Үҙенең төп бурысын бер ваҡытта ла онотманы Мстислав, ситкә тайпылһа ла, яңынан шул башҡорт тел ғилеменә ҡайтты. 1922 йылда үҙенең "Әлепбей"ен Башҡортостан хөкүмәте ҡарамағына ебәрҙе, хатында был хеҙмәтте тикшергәндә үҫәргән һөйләше вәкилен дә саҡырырға, ҡатнаштырырға кәрәклеген үтенде. Быны ул хеҙмәтенең үҫәргән шиүәһенә нигеҙләнеп яҙылыуы менән дәлилләне.

Бер нисә ай үтеп тә китте, шулай ҙа уның үтенесе иғтибарһыҙ ҡалманы. Башҡортостан халыҡ мәғариф комиссары Абдулла Әҙеһәмовтан яуап килде: "Сикһеҙ ярлыбыҙ, үҙ нәшриәтебеҙҙе ойошторор хәлебеҙ юҡ әлегә. Мәктәптәрҙә урыҫ йә татар әҙәбиәтен ҡулланабыҙ. Шулай ҙа ҡулъяҙмағыҙҙың бер данаһын үҙебеҙҙә ҡалдырып торам. Башҡаларын яраҡһыҙ булған өсөн түгел, әлегә мөмкинселек булмағанға ҡайтарып торам. Уға беҙҙә кире мөнәсәбәт тыуманы".

Был нарком мәсьәләне ынғай хәл итә алмаһа ла, яуабы күңелгә ятышлы, өмөт тыуҙыра ине. Кем белә, бәлки республика ярлылыҡ сигенән сыға алыр.

## 6. Яҙмыш ҡосағында

Ҡазанда тормош үҙ ағышы менән дауам итте. Сәйәси генә түгел, мәҙәни ваҡиғалар булып, халыҡты шаулатып торҙо.

Был көндө Мстислав Ҡулаев бик ҡанатланып ҡайтып инде. Ҡатыны уның был хәлен күреп, һораулы ҡарашын төбәп тә өлгөрмәне, өй хужаһы шатлығын йәшерә алмай тупһанан һөрәнләне:

— Нина, матур күлдәгеңде әҙерлә, бөгөн премьера, опера театрында. Бына дүрт билет, ике ҡыҙҙы ла алабыҙ.

— Бәй, ни булды? Шаляпин йәнә килдеме әллә?

— Үҙебеҙҙең Шаляпин килгән, башҡорт Шаляпины, Ғәзиз Әлмөхәмәтов.

— Уның тураһында әйткәнең юҡ ине бит әле.

— Бына хәҙер әйтәм, ул, беләһеңме, үҙе йырсы, үҙе композитор, үҙе башҡорт.

— Йә, тағы ниндәй бөйөклөгө бар?

— Татар композиторы Солтан Ғәбәши менән "Сания" исемле опера яҙғандар. Мин ишеткәйнем инде. Бына шуның премьераһы.

Ҡазан опера театры ҡорт күсе кеүек геүләй ине. Был бит башҡорт өсөн генә түгел, татар мөхитендә лә тәүге операларҙың береһе ине. Яңғыҙ йырға ғына күнеккән халыҡтың милли операһы тыуыу ҙур күренеш ине. Милли моң, етмәһә, саф татар телендә яңғырай.

Бына төп ролдә йоҡа ғына, оҙон кәүҙәле, һылыу йөҙөн һипкелдәр алған Ғәзиз сәхнәгә сыға. Халыҡ йырҙары менән танылғайны инде ул. Ҡаҙаҡ далаларын, үзбәк сахраларын, төркмән сүлдәрен ҡыҙырып өлгөргән мәшһүр моң эйәһе. Ҡазанда ла бер нисә мәртәбә булып, татарҙың күңелен яулаған. Сәхнәгә сығып, уң ҡулын алға һуҙа биреп, "Сания" арияһын башлап ебәреүе булды, зал аяғүрә баҫып, дәррәү ҡул сапты.

— Афарин, Ғәзиз!

— Мең йәшә!

Сәхнә түренә сәскәләр осто. Ғәзиз тыйнаҡ ҡына йылмайып, башын эйеп торҙо. Тамашаның аҙағына түбә сәстәре ныҡ ҡына ҡойолған тәбәнәк буйлы Солтан Ғәбәши ҙә сыҡты.

Мстислав Ҡулаев, спектакль бөткәс тә, ҡайтып китмәне, сәхнә артына үтеп, Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән күреште.

— Үҫәргән башҡорто, табип Ҡулаев, — тине ул, ҡуш ҡулын һоноп.

— Мин — Юшатыр буйынан, ҡыпсаҡ башҡортомон, — тине Ғәзиз, был олпат ағай кеше алдында уңайһыҙланып.

Мстислав үҙенең визиткаһын һуҙҙы һәм бушыраҡ ваҡытын табып өйөнә килеүен үтенде. Ғәзиз яҡташына килергә ҡыуанып риза булды.

Ҡулаевтар ғаиләһендә был тамаша тураһында фекер алыштылар.

— Ниндәй нескә тенор! — тип һоҡланды Нина. — Ә үҙен ниндәй ябай, тәбиғи тота.

— Урыҫса йырлаймы ул?

— Йырлай, хатта урыҫ йырҙарын үҙе башҡортсаға тәржемә итеп йырлай. Беҙгә килгәс, яҡшылап һораһағыҙ, йырлап күрһәтер бәлки.

Аҙна эсендә һөйләшелгән көнгә ул тып итеп килеп тә етте.

Өй эсе тәмле еҫтәр менән тулғайны. Башҡорттарҙың һөйәкле ит яратҡанын белгән Нина мул итеп аш әҙерләне.

Мстислав башта ҡунаҡты эш бүлмәһенә саҡырып, Ырымбурҙа ҡасан булғанын, кемдәр менән аралашҡанын һорашып алды, ул ваҡытта Ырымбурҙа булмауына көйөнөсөн белдерҙе.

— Иң беренсе шағир Шәйехзада менән дуҫлаштыҡ. Бына тигән шағир, мәҙәк кеше ине, әрәм иттеләр. Бөйөк киләсәкле инсан ине.

— Эйе. Был — беҙҙең быуаттың иң ҙур енәйәте, — тине Ҡулаев, көрһөнөп.

Бара-бара һүҙ Башҡортостан милли мөхтәриәте мәсьәләләренә күсеп китте. Мстислав үҙенең Мәскәү мажараларын, Ленин, Сталин менән осрашыуҙарын һөйләп алды.

— Мине Ҡазанда ҡалырға өндәйҙәр бит әле, ағай, — тип һалды Ғәзиз ҡапыл ғына. — Мине үҙ илем, Башҡортостаным тарта. Бакуҙа ҡалырға ла өндәп ҡарағайнылар. Ҡайҙа ул. Бында ла күпкә сыҙамам, ахыры, әле бына Виноградов менән яңы операға тотонмаҡсыбыҙ.

— Дөрөҫ, туған. Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул. Мин ҡалдым инде. Күңелем барыбер үҙемдең Урал, Һаҡмар буйҙарында, иҫемә төшһә, йөрәгем әрнеп китә.

— Соловья баснями не кормят, — тип үпкә белдерҙе Нина, был һөйләшеүҙең аҙағын тоймай башлағас.

Ғаилә ҡунаҡ менән бергә залға үтте.

Тәмле ашты ашап алғас, барыһы диванға, креслоларға күсеп ултырҙы. Ғәзиз унан йыр көткәндәрен аңлап, “Буранбай”ҙы һуҙып ебәрҙе. Тын да алмай тиерлек тыңлап ултырҙылар. Өй хужаһы күҙҙәрен ҡыҙҙарынан алманы. “Ғәмһеҙ тыңламайҙар, тимәк, моңдо, башҡорт моңон тоялар” тип эстән генә һөйөндө ул. Йырсы йырҙы тәрәнерәк төшөнһөндәр тип, бер аҙ ултырҙы ла, “Колой кантон”ды шаңғыртты.

Өй түбәләре күтәрелеп, күк көмбәҙе асылып киткән кеүек булды. Әллә ниндәй сихри моң баҫып алды, тамам арбаны.

Йәнә әҙерәк тын ултырғандан һуң, Ғәзиз Чайковскийҙың “Евгений Онегин” операһынан Ленский арияһын һалдырмаһынмы.

— Это чудо! — тип ҡысҡырып ебәрҙе Вероника, ария тамамланыу менән, бөтәһе гөр килеп ҡул сапты.

— Һеҙ ҡайҙа йырларға өйрәндегеҙ, Ғәзиз әфәнде? — тип һорарға мәжбүр булды Нина.

— Малай сағымда — әсәйемдән, үҫеп еткәс — халҡымдан, — тине ябай ғына итеп йырсы.

— Шулай ҙа Ленский арияһы классика бит. Унан, һеҙ бит композитор ҙа, нота грамотаһын нисек беләһегеҙ? Вердиҙең “Риголетто”һынан да йырлайһығыҙ, тиҙәр.

— Эйе, — тине Ғәзиз һәм инәлдереп тормай герцог арияһын башҡарҙы.

— Ысынын әйткәндә, мин Ырымбурҙа музыка мәктәбендә уҡыным, аҙаҡ Мәскәү консерваторияһында ҡыҫҡа курс үттем.

— Ғәзиз туған, тәбиғи һәләт көслө, Алла уны йәлләмәй биргән, — тип өҫтәне Мстислав. — Бына шул күтәрә лә инде унын талантын юғарылыҡҡа.

Ҡазанда йәшәгән осоронда Ғәзиз йәнә бер нисә мәртәбә Мстислав Ҡулаевтың өйөндә булды. Ике башҡорт эш бүлмәһендә икәүҙән-икәү генә быш-быш һөйләшеп тә алалар ине. Урыҡ-һурыҡ ишеткән хәбәрҙәр йырсының Стәрлетамаҡта Башҡорт йөмһүриәте ағзалары алдында концерттары, Шәйехзада Бабич менән ҡушарлап сығыш яһауҙары, Зәки Вәлиди хаҡында ине. Был хаҡта һөйләшеүҙәр ҙә хәүефле була башлаған дәүер илгә килгәйне инде.

* * *

Мстислав Ҡулаев бер мәл алфавитын ҡуйып торҙо ла үҙе мәңге тоғро ҡалған тел ғилеменең башҡа мәсьәләләренә тотондо. Был эш унын ауырыуы кеүек ине. Ҡулға тотоп ҡарарлыҡ грамматика ла, Катаринскийҙың бәләкәй генә һүҙлектәренән башҡа бер нәмә лә юҡ икәнен белеп, эшләй башланы ғалим.

Грамматика өлкәһендәге теорияла утыҙынсы йылдар башында академик Николай Маррҙың тәғлимәте өҫтөнлөк итте. Урындағы телселәр уға эйәрҙе. Унын өйрәнгән, миҫал итеп алған телдәре Ҡулаевтың туған теленән алыҫ булһа ла, ул да иберий-кавказ телдәренән сығып эш итте.

Телдәрҙең килеп сығышы тураһында ла күп уйланды Ҡулаев, яҙып та ҡараны, тик шул Марр тәғлимәтенән үтә алманы. Профессор Ашмарин хеҙмәттәре уға яҡыныраҡ ине. Ни тиһәң дә, сыуаш теле төрки телдәр системаһына буйһона. Профессор Казимбек хәҙерге телдәр менән мауыҡмай, етмәһә, унын тикшереү өлкәһе күберәк яҙма телдәргә ҡағыла. Табип Мстислав Ҡулаев шул үҙенә яҡын булған үҫәргән шиүәһенә нигеҙләнде. Бында һәр күренеш һыналған, үҙ күңеленә яҡын, аңлашылып тора. Яңы дәрт, яңы өмөттәр менән башҡорт теленең грамматикаһына тотондо ул.

Был көндө табип Ҡулаев Болаҡ аръяғынан йәйәүләп ҡайтырға булды. Юл ыңғайы үҙ участогында бер подвалда йәшәгән ғаиләгә инде.

Ишеккә тар баҫҡыстан төшөлә ине. Бүлмә ярым ҡараңғы, еүеш һауа. Эсе тулы таҫтамалдар, алъяпҡыстар киптерергә эленгән. Мөйөштә ике бала юрғанға уранып ултыра.

— Был керҙе ниңә тышта киптермәйһегеҙ? — тиергә мәжбүр булды ул көлһыу төҫлө хужабикәгә.

— Тышҡа элһәң, урлап алып китәләр, ә миңә түләргә тура килә. Ҡатындың тауышы ғыжылдап тора.

— Хужа ҡайҙа?

— Ул баҙарға утын ташый, ҡайтмаған әле. Бына, балалар ауырый.

— Эх, ҡәрендәш, был еүеш һауала үҙең дә сирләрһең.

— Нишләйбеҙ һуң? Астан үлеп булмай. Ашхана керен йыуам, шунан әҙ-мәҙ ҡалған ризыҡ та алып ҡайтам.

Мстислав балаларҙың тын алыштарын тыңлап ҡараны ла:

— Быларҙа үпкә сире башланырға тора, укол һалырға кәрәк, дарыухананан алырһығыҙ. Бына рецепт яҙам, шәфҡәт туташын ебәрермен.

— Уй, ағай, дарыуға аҡса юҡ бит. Нишләйбеҙ?

— Мин биреп торам, алығыҙ.

— Һеҙгә нисек ҡайтарырбыҙ?

— Ҡайтармаһағыҙ ҙа ярай.

— Рәхмәт инде, абый. Үҙ кеше үҙ кеше инде, ана бит нисек татарса һөйләшәбеҙ. Һеҙҙең кеүек табипты күргән юҡ ине әле.

Табип подвалдан бик насар кәйеф менән сыҡты ла Булаҡ буйлап һуҙылған урамдан атланы. Бында аҙым һайын кибеттәр теҙелгән. Ни генә һатмайҙар. Шунда табип Ҡулаевтың башына вакуф фонды асып, һәр кибетсегә хат яҙыу, ярлы ғаиләләргә ошо фондтан ярҙам ойоштороу уйы килде. Кис ултырып шул хатты яҙҙы, халыҡтың хәле бик мөшкөл икәнен һүрәтләп, байҙарға мөрәжәғәт итте. Ойошоп килгән хәстәханаһы хеҙмәткәрҙәре уны таратып сыҡты. Тәьҫире булды барыбер, был эш аҙмы-күпме булһа ла килеп сыҡты. Уның был тырышлығын ҡатыны ғына тейешле баһалай алды, бәлки ул ярҙам иткән кешеләрҙе иҫендә ҡалдырғандыр.

Табип хәстәре менә көн артынан көн үтә торҙо. Мстислав үҙенең яратҡан тел ғилеме туҡтап тороуына эсе бошоп-бошоп алды, тик бүленеп кенә ултырырға форсат тапманы. Башында ул уй һаман йөрөнө.

Бер көндө ул үҙе лә аңламаған күңел күтәренкелеге менән ҡайтып инде.

— Нина, беләһеңме?

— Әйт, белермен.

— Мин йәнә бер эш башлап торам бит әле. Бөгөн көн буйы шуны уйлап йөрөнөм.

— Йә, тағы ни?

— Беҙҙең бына тигән ғалимыбыҙ бар. Әлегә ул хөкүмәт башында. Мин Әхмәтзәки Вәлидиҙе әйтәм. Телсебеҙ юҡ бит. Сыуаштың грамматикаһын Ашмарины яҙа, яҡуттыҡын — Пекарский, татар грамматикаһын Троянский ҙа, Жамал Вәлид тә яҙған, ә беҙҙеке ҡайҙа? Кем яҙыр?

— “Мин” тимәксеһеңме, һөйөклөм?

Нина йылы ғына итеп иренең яурынына һарылды.

— Эйе, эйе, мин яҙасаҡмын иң тәүге грамматиканы! Аптырама. Врач Ҡулаев яҙасаҡ.

Ҡатыны нишләптер һүҙҙе ҡапыл ғына икенсегә борҙо.

— Һин, Мстислав, ике һүҙеңдең береһендә милләттәшең Зәки Вәлиди әфәндене маҡтайһың, үҙеңә үрнәк итәһең. Уны бит Ҡазан большевиктар матбуғаты ла, исламсы татар матбуғаты ла яманлай. Татар милләтселәре килеп татар-башҡорт автономияһының, Волга-Урал штатының килеп сыҡмауында уны ғәйепләй. Башҡорттарҙы татарҙан ситләштерә, тиҙәр. Урыҫтар иһә, Зәки Вәлиди башҡорт еренән башҡа милләттәрҙе һөрмәксе, тиҙәр. Быны нисек аңларға?

— Һин аҡыллы бит, Ниночка. Ул гәзит шау-шыуҙарына түгел, миңә ышан. Мин уның менән иңгә-иң терәп ултырған кеше. Дошмандары ялғанды яҙа, асылда ул бик һиҙгер кеше, сәйәсмән. Татар-башҡорт мөхтәриәтенә теше-тырнағы менән ҡаршы булды һәм үҙ халҡы өсөн дөрөҫ юлды һайланы. Халҡын артынан эйәртә алды. Татарҙар менән бер республика булһаҡ, беҙ йотолабыҙ бит.

— Власҡа ынтылған, үҙен хан итеп күргән кеше түгелме ул?

— Һин уҡыған матбуғат шулай күрә уны. Халҡын ышандырырлыҡ булғас, уйлап ҡара. Беҙҙең халыҡ бер ҡатлы булһа ла, тарихта күп һабаҡ алған. Ханыбыҙ тип кенә эйәрмәҫ.

— Һин ышандырырлыҡ һөйләйһең дә ул, Мстислав. Тик әлеге бөтән халыҡтарҙы урынынан ҡуҙғата башлаһа, бола ҡубыр бит.

— Ышанма һин ул буш хәбәрҙәргә. Мәсьәлә бөтөнләй башҡа юҫыҡта ҡуйыла бит. Башҡорт үҙ илендә аҙсылыҡҡа әйләнгән, закон нигеҙендә үҙен үҙе яҡлай алмай, баҫыла. Бына шуны нисек тә еңергә итә Зәки. Башҡорттоң һүҙе һүҙ булһын, ти.

— Үҙен “яһалма башҡорт” тип яҙалар.

— Башҡорт нәҫеленән ул. Ялғанды яҙалар. Типтәр ҡаны барлығын иҫенә төшөрәләр. Үҙ халҡы өсөн яна, көйә, йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Ике йөҙлөлөктөң хас дошманы. Ике йөҙлөлөгөн күрһәткән большевик лидерҙары Ленин менән Сталиндан да ситләште.

— Ярай, ул сәйәсәттән ситләшеү хәйерле, һөйөклөм. Балаларҙы ҡайғыртайыҡ.

Башҡорт грамматикаһын Ҡулаев бик бирелеп, көсөн йәлләмәй эшләне һәм бер нисә ай эсендә был хеҙмәттең ҡулъяҙмаһы уның яҙыу өҫтәленә ятты. Яҙыу ваҡытында Мстислав башҡорт телендә күп кенә грамматик терминдарҙың булмауын күрҙе. Булғандарының күбеһе ғәрәптән алынған, туған телдең асылына тура килеп етмәгән кеүек. Халыҡҡа ла барып етмәҫтәй тойола. Шунда ул байтаҡ тел күренештәренә үҙе һүҙ уйлау юлына баҫты. Бында ҡатыны ла ярҙам итә алмай, кәңәшләшер кеше юҡ. Яңы китабының тышына тотто ла “Яҙтанбел” тигән исем ҡуйҙы. Ул белә: грамматика һүҙе лә шул тирәнән әллә ҡайҙа китмәгән — грекса “грамма” — яҙыу, хәреф... Тимәк, яҙыу тураһындағы фән. Тик хәҙер ул күнегелеп бөтөлгән төшөнсә төҫөн алған. Быны Ҡулаев яҡшы белә. Терминға әйләндереү өсөн һүҙҙе күберәк ҡулланыу, уға күнегеү кәрәк. Термин алыуҙа өс ысулды ҡуллана телсе: ғәрәп грамматикаһынан башҡорт өсөн аңлайышлы, ҡулланылышҡа ингән һүҙҙәр, урыҫ теленән тәржемә итеү һәм үҙе яһаған һүҙҙәр.

Грамматикаһын да традицион өс өлөштән яҙа: фонетика, морфология (сарыф), синтаксис (нәхеү). Эшләй торғас, йәнә бер фекер тыуа: ошо ҙур хеҙмәттең үҙ ҡарамағына бик ҡыҙыҡ һәм оригиналь тойолған

ҡылым бүлеген (исми хәрәкәт) айырып ала ла йөҙ егерме битлек китап итеп, баҫтырып сығара. Яңы хеҙмәте тураһында йәнә ҡатыны менән уртаҡлаша, уныһы, филолог булмаһа ла, бәхеткә ҡаршы, фекерле кеше, үҙ һүҙен әйтә ала.

— Нина, бына тыңла әле: беҙҙең грамматикала бер форма бар, исми хәрәкәттә “барғым килә, йоҡлағым килмәй” формалары бар, шул урыҫ грамматикаһында юҡ бит. Йә, әйтеп ҡара шул теләкте “мне хочется пойти, мне не хочется спать”, йәғни был теләктең үҙ формаһы юҡ, ә беҙҙә бар.

— Да-а, — тип ҡуйған булды ҡатыны.

— Телебеҙҙең йәнә бер нескәлегенә иғтибар иттем әле мин.

— Йә, тағы ни астың, ҡәҙерлем?

— Ул урыҫ теле ҡоролошона һис тура килмәй.

— Башҡорт телендә әле мин яҙған исми хәрәкәт, йәғни глагол — бик бай һәм ҡатмарлы күренеш, шуларҙың береһе — ҡушма исми хәрәкәттәр. Мин уларҙың утыҙлап мәғәнәһен асып, яҙҙым. Бына һиңә бер нисәүһен генә әйтәм, аңларһың, моғайын: йоҡлап ята — спит крепко, йоҡлап китте — заснул, йоҡлап торҙо — проснулся и встал, йоҡлап ҡалды — уснул и остался һәм башҡалар. Беҙҙең тел — аналитик-синтетик тел ул. Морфология менән синтаксис бергә үреләп бара.

— Да, Мстислав, һиңә көнсығыш телдәр факультетында уҡыйһы булған. Профессор Мирза Казимбектан һис ҡалышмаҫ инең. Йылы аудиторияларҙа лекциялар ғына уҡып йөрөр, Булаҡта хәстәханалар менән булышмаҫ инең. Тел тойғоһо көслө һиндә. Бөтәһенә интуиция менән ирешәһең бит, ҡәҙерлем.

— Бәлки, — тигән булды Мстислав, шулай ҙа яҙмышын зарлау яғына төшөп китмәне. Ҡатынының маҡтау һүҙҙәренә үтә йомарт түгеллеген дә яҡшы белә ул. Ҡыҙҙарының иң олоһо Елена ғына хужаның үҙе кеүек хискә бик бай. Шуға атаһы уны кейәүгә лә берәй башҡорт егетенә бирергә хыяллана ине. Булманы бит. Урыҫ рухы еңде, ахыры, шул яҡҡа тартылды ла ҡуйҙы. Кейәүҙәре Алексей Соколов үтә шовинистик рухлы булмаһа ла, большевиклыҡ рухы көслө ине унының.

Уның менән сәйәси, милли мәсьәләләр буйынса бәхәскә инеп барманы ҡарт. Етмәһә, утыҙынсы йылдар башында уҡ вәлидовсылыҡ, вәлидовсылар хәрәкәтенә кире тамға һуғылды. Әммә тамға көйө генә ҡалманы, вәлидовсыларҙы берәм-берәм сүпләп, стенаға терәп атыуҙар, батша заманындағынан да яман лагерҙарға ябыу башланды. Мстислав Ҡулаев белгән, Башҡорт ревкомында бергә эшләгән Нуриағзам Таһиров, Сәғит Мерәҫов, Ғәбделәхәт Вилданов, Хәбибулла Ғәбитов һәм башҡа бик күп аҫыл ирҙәр юҡ ителде. Легендар ҡыҙыл комбриг Муса Мортазин да үтә серле рәүештә һәләк булды. Ярай әле, Вәлиди һәм уның бер нисә арҡалашы ваҡытында сит илгә ысҡынып ҡалды. Лениндың үҙенә яҡын булған Троцкий, Каменев, Зиновьев, Рыков кеүек коммунист йәһүдтәрҙе лә, төрлө сәйәси ғәйептәрен табып, берәм-берәм сүпләп торҙолар. Бара-бара ҡыҙыл командирҙарға ла йәбешә башланылар. Милләттәр эштәре буйынса ил наркомы булған әҙәм милләттәргә һөжүмен бигерәк көсәйтте.

Мстислав Ҡулаев, быларҙы ишетеп, үҙәк матбуғаттан уҡып, бөтөнләй ҡурҡыуға төштө. Һәр урында халыҡ дошмандарын эҙләйҙәр бит һәм табып тоталар, милләтсе эшмәкәрҙәр бында беренселәр ине.

Иренең борсоулы йөҙөн көн дә күргән Нина ҙур хафаға төштө. Шулай ҙа ирен тынысландырырға тырышты.

— Ярар, хаҡ яҙғаны булыр. Нишләйһең? Бәлки, беҙгә ҡағылмаҫтар әле. Һин бит ҡорал тотоп, һуғышып йөрөмәнең, — тигән булды.

— Амин! Әйткәнең хаҡ булһын! Балаларыбыҙ бәхетенә Хоҙай аралаһын. — Мстислав башлаған һүҙен дауам итте. — Әхмәтзәки Вәлиди Сталинға бөтөнләй ышанмай ине. Һүҙе хаҡҡа сыҡты бит. Һиҙҙе кем икәнен. "Сәйәси авантюрист", тине үҙ-ара ғына, ышанысһыҙ кешегә һананы. Мәскәүгә эшкә саҡырһалар ҙа, барманы. Һуңғы сиккә Төркөстан тарафтарына юл алды.

— Бында ҡалған яҡындары тураһында уйламанымы ни?

— Уйлай ине. Төркөстанда еңеүгә ирешһә, кире ҡайта ине инде ул. Шул ышандырҙы беҙҙе лә. Барып сыҡманы бит. Ниндәй аҫыл ирҙәребеҙҙең баштары китте. Иҫемә төшһә, йөрәгемә ҡан һауа, Нина.

— Нишләйһең? Үҙең әйтмешләй, шулай яҙғандыр.

Мстислав икеһе өсөн дә күңелһеҙ барған теманан үҙенең эшенә күсте.

— Татароведение йәмғиәтендә һөйләгән докладым менән Башҡортостанға барып ҡайтаһы ине. Үҙем барып күренһәм, хеҙмәттәремә мөнәсәбәт тә үҙгәрер ине, бәлки.

Был һүҙҙәрҙән ҡатынының ҡобараһы осоп китте, тулы йөҙөн хәүеф баҫты.

— Һин нимә, Мстислав, аҡылдан яҙа башланыңмы әллә? Һеҙҙең милли хәрәкәтте ене кеүек күргәндәр власть башында бит хәҙер. НКВД-ға береһе донос эшләһә, шунда уҡ ҡулға алырҙар үҙегеҙҙе. Уйлама ла! Илдә ни барғанын ишетеп, күреп тораһың бит. Ҡазан, Минзәлә хәбесханалары сәйәси тотҡондар менән тулған, тиҙәр. Атып, Себергә оҙатып өлгөрә алмайҙар.

— Минең Ленин менән хөкүмәт килешеүенә ҡул ҡуйған кеше икәнде лә онотма әле!

— Мин онотмайым да ул. Улар онота бит. — Был һүҙҙәренән һуң Нина бармағын ҡайҙалыр юғарыға тоҫҡап ҡуйҙы. — Ана, Ленин менән бергә йөрөгән фекерҙәше булған Лев Троцкийҙы ла илдән ҡасырға мәжбүр иткәндәр. Ҡайһылай серле һәләк булды Фрунзе, Рыков, башҡалар.

— О, Нина! Һинең белмәгәнең юҡ та. Белмәүең яҡшы, белһәң дә был турала һөйләмәүең хәйерле.

— Ана бит, үҙең ни тиһең. Һиңә генә әйтәм инде мин дә. Һине уйыңдан күндерергә була әйтәм. Бигерәк бер ҡатлы башҡортһоң бит. Әллә һеҙ бөтәгеҙ ҙә шулайыраҡмы?

— Шулай шул. Ана шунан килә инде бөтә бәләбеҙ ҙә.

Ғәҙәттәгесә, етди һөйләшеүҙәре сәйәси теманан үҙҙәренең ғаилә хәлдәренә күсте. Һүҙ еткән ҡыҙҙары Вероника менән Татьяна тураһында барҙы. Елена, атай менән әсәй фекеренсә, яҡшы урынлашты. Нижнийҙа кейәүе Соколовтың ата-әсәһе менән бергә йәшәйҙәр. Татьяна ла бик етди холоҡло. Әле университетты тамамлағас та, шунда уҡ биологиянан аспирантурала ҡалды. Атай юлын ҡыуыр һымаҡ. Ике ҡыҙҙың

да бына-бына ғаиләләре булырға тора. Үҙҙәре был турала бик өндәшеп бармаһалар ҙа, атай, әсәй күреп, тын алыштарын күңелдәре менән тойоп тора.

— Былары Ҡазанда ҡалһа ярар ине, ҡартаябыҙ бит, — тигән булды атай кеше. — Эргәлә булыуҙары хәйерле.

— Шуға оҡшай, икеһенең дә танышып, дуҫлашып йөрөгән егеттәре ошонан, — тине ҡәнәғәлек менән ҡатыны.

— Да, Нина, беҙгә лә ҡартлыҡ килә, балаларҙың янда булыуы кәрәк.

— Шулай, Мстислав, һәр ваҡыттағыса һин хаҡлы.

— Еленаның ҡыҙын, үҫә төшкәс, бәлки, үҙебеҙгә алырбыҙ, ата-әсәһе риза булһа. Беҙ уҡыған университетта уҡыр ине. Атаһы менән әсәһе бигерәк бала йәнлеләр бит әле, ҡыҙҙарын өрмәгән ергә ултыртмайҙар.

— Кейәүҙе үсектермәй генә, тын алыштарын самалай торайыҡ.

— Ярар, үҙҙәре хәл итер. Шулай ҙа, Нина, мин башҡортса-урыҫса һүҙлегемдең тамамлаған өлөшөн Өфөгә ебәрә торорға уйлайым әле. Ҡараһындар. Бындай һүҙлек юҡ дәрәжәһендә бит.

Иренең көтөлмәгән эштәренә, һүҙҙәренә күнегеп бөтһә лә, Нина ҡапылда аптырабыраҡ ҡалды.

— Ҡайһы арала һүҙлек төҙөнөң әле һин?

— Бына бер дөйөм дәфтәр тултырҙым, бер иле ҡалынлыҡ. “А”-нан “К”-ға тиклем үҙем иҫемдә тотҡан бөтә һүҙҙәрҙе индерҙем. Бындай һүҙлек юҡ әле. Әлеге үҫәргәндәрҙең теле был, һөйләмдәре лә бар. Беҙҙең яҡта нисек әйтәләр, шул көйө. Ул шиүәне юрматылар ҙа, ҡатайҙар ҙа аңлаясаҡ, тип уйлайым.

— Ну фанат һин, Славик, ысын фанат. Был эштәреңде ҡуйып тороп, ял итергә кәрәк ине.

— Покой нам только снится, — тип еңелсә шаяртыуға бороп маташты ире хәбәрҙе. — Мин эшләмәһәм, кем эшләй быны?

Шулай туған теленең ҡоролошон яңынан-яңы идеялар менән дәртләнеп эшләп, ҡалын-ҡалын дәфтәрҙәрен тултырып, хеҙмәттәрен яҙып ятҡанда совет тел ғилемендә революцияға тиң үҙгәрештәр ил кимәлендә күтәрелде лә китте, шау-шыу сәйәси төҫ алды. Даһи Сталин нисәмә йылдар өҫтөнлөк иткән, күп аҡыл эйәләренең башын бидәгән академик Маррҙың теорияһын юҡҡа сығарҙы. Был турала коммунистарҙың төп гәзите “Правда” ғына түгел, йөҙәр мең дана тираж менән сыҡҡан ғилми журналдар, брошюралар һөйләне. Маррҙың теорияһы ғына түгел, үҙе лә, уҡыусылары ла ер менән тиңәлде. Меңдәрсә ойошмаларҙа партия йыйылыштары үтте, был эштән хатта крәҫтиән массалары ла ситкә ҡалманы, Маррҙы һүгеп хаттар яҙҙылар, академикты типкеләнеләр, уның әле генә дан алған исеме мәсхәрәле һүҙгә әйләнде.

Табип-телсе Мстислав Ҡулаев үҙенең бөйөк Марр рухында яҙылған эштәрен яңынан эшкәртеп ҡараны, был академиктың һәм уның уҡыусыларының исемдәрен таҙартып маташты-маташты ла, йәне көйөп, ситкә ырғытты, ҡабаттан уларға ҡағылмаҫ булды. Асыуы килеп, йыртып утҡа яғырҙай хәлгә лә килгеләне лә, ҡулы барманы. Нисек кенә итһәң дә, аҡылын ғына түгел, күңелен дә йәлләмәй һалған бит. Телсе, һис шикһеҙ, даһиҙың да бер яҡка нык бөккәнен аңлай ине, ләкин был турала берәй урында һүҙ ҡуҙғатыу түгел, уйлап ҡарауҙың да үтә

хәүефле икәненә күптән төшөндө, шуға ла ныҡ йомолдо ла ҡуйҙы. Ҡазанда ул хатта бер генә зыялы менән дә фекер алышыуҙан шикләнде, тыйылды. Береһенә лә мыҫҡал да ышаныс юҡ ине. Илдә берберeһен төртөү, сәйәси ғәйептәр ташлау, хәбесханаларға тығыу, Себер урмандарына оҙатыу ныҡлы урын алғайны. Даһи һәм уға яҡындары, һерәйеп күренеп ҡалырға тырышыусылар бермә-бер артып, шашҡынға бирелде.

Оҙаҡламай илде ҡалтыратҡан Ватан һуғышы башланып китте. Ләкин Сталиндың шашыныуын ул да туҡтата алманы. Һаман да беренсе урында милләтселектә фашлау, сикләү ине. Милли тойғоға яҫҡыныу һис кәмемәне. Был күренеш пролетар интернационализмдың иң нәфрәтле дошманына әүерелде. Уларҙың сит илгә ҡасҡандарының артынан төшөп барып, үлтереп йөрөнөләр. Ошо маҡсаттан сығып, хөкүмәт ҡарамағында махсус отрядтар әҙерләп сығарылды.

Башҡорт халҡының милли-азатлыҡ хәрәкәте лидерын донъяға билдәле ғалимлығы һәм сәйәси эштәрҙән ситләшеүе генә ошо бәләләрҙән ҡотҡара килде, шикелле. Сталиндың ҡанлы ҡулы уға ла һонолһа, еткерер ине. Һәр хәлдә, уның ҡайҙа барғанын, ҡайҙа йөрөгәнен, ни һөйләгәнен НКВД, КГБ кеүек органдар белеп торҙо, әлбиттә. Уның иленә ҡайтыу теләге лә ошо арҡала бөтөнләй һүнде. Бында ҡалған арҡалаштары, фекерҙәштәре тырым-тырағай туҙҙырылған, туған-ырыуҙары өркөтөп, ҡурҡытып бөтөрөлгән, уға ҡан ҡәрҙәшлеген дә йәшереү хәленә еткерелгән.

— Нина, ҡәҙерлем, бына егерменсе быуаттың уртаһы ла етте.

— Йә?... Нимә әйтмәксеһең?

— Миңә нишләптер беҙҙең ил һаман урта быуат инквизицияһы һаҙлығында ҡайнай һымаҡ. Был ни?

— Ярар, ул турала һөйләшмәй торайыҡ әле. Күптән шуны килештек бит. Хәҙер стеналар ҙа тыңлай һымаҡ.

— Беҙ демократия һауаһын, кешелеклелек рухын әҙ генә лә еҫкәй алмай китербеҙме икән ни?

— Балаларға яҙһын, Мстислав. Беҙ инде нисек тә яҙғанын күрҙек.

— Эйе, ғүмер буйы үҙебеҙҙән үҙебеҙ, бер-беребеҙҙән өркөп йәшәнек.

— Улай уҡ түгел инде, Мстислав. Ҡыла алғаныңды ҡылдың. Шулай ҙа алдыңды-артыңды йыйыштырып йөрөргә белдең. Маладис! Ҡартайған көнөңдә ундай ауыр уйҙарға төшмә инде берүк.

— Нина, ҡәҙерлем, мин һигеҙенсе тиҫтәгә аяҡ баҫтым бит инде. Хәл дә ауырая бара кеүек, аҙаҡҡа барыуым да мөмкин.

— Нисек кенә булһа ла, тыныс бул, Мстислав. Бына, һин әҙерләгән алфавитты ҡабул итмәһәләр ҙә, башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа кириллицаға күсте. Халыҡтарҙың рухи мәҙәниәте бер юлға төштө.

— Был мәсьәләне мин ҡырҡ йыл элек үк күтәргәйнем дә бит. Халҡыбыҙ әҙер булманы. Күпме юғалтыуҙар кисерҙек.

— Ярай, Петр Беренсе Европаға тәҙрә асҡан кеүек, һин дә үҙ халҡыңдың бөйөк йортона, киләсәгенә, яҡтылыҡҡа тәҙрә астың.

— Бар зыялыларыбыҙ ҙа һинең кеүек фекер йөрөтһә ине лә бит, Ниночка, тар ярыҡтан ғына ҡараусылар күп шул әле.

— Иң яҡшыһы — тыныс бул.

— Нина, шуны һиңә әйтеп ҡуяйым әле: минең менән тегеләй-былай булып ҡуйһа, архивымды, ҡулъяҙмаларымды Өфөгә тапшыр, ғилми ин-

ститутҡа, адресы китаптар кәштәһендә. Һүҙлегемде алғандар, хәбәрҙәре килде.

— Бошонма, ҡәҙерлем, тик ул турала уйламай тор. Шөкөр, йәшәйбеҙ әле.

Фанатик иренең һуңғы аманаты икәнен Нина аңлай ине. Уның башҡа һүҙҙәре балаларының яҙмышына ҡайтып ҡала ине…

Тамам.
20.06.2006 йыл

## Эпилог

Тарихи шәхесебеҙ, телсе, табип һәм халҡыбыҙҙың мәшһүр улы Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы Ҡулаев 1958 йылда һикһән бишенсе йәшендә вафат була, Ҡазанда ерләнгән. Үҙенең шәхси архивын, ҡульяҙмаларын Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырырға васыят әйтеп ҡалдырған. 1963 йылда институттың шул ваҡыттағы директоры Әхнәф Ибраһим улы Харисов ғалимдың ике тоҡ ҡағыҙҙарын алып ҡайтты. Миңә архивты тәртипкә килтереүҙә, тәүге опись эшләүҙә ҡатнашырға тура килде. Был йөкмәткеле архивтың һәр бит ҡағыҙы менән таныш-ҡас уҡ, автор тураһында берәй әҫәр яҙыу теләге тыуғайны, көндәлек мәшәҡәттәрҙән ҡотола алмай, ҡулым теймәй килде.

Әлеге көндә Ҡулаевтың архивы Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Ғилми архивында һаҡлана. Был документтарҙы яңынан күҙҙән үткәрергә тура килде.

1973 йылда Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында Ҡулаевтың йөҙ йыллыҡ юбилейы билдәләнде. Унда ғалимдың оло ҡыҙы Елена, ике туған ҡустыһы полковник Ниғмәт Ҡулаев һәм башҡа ҡәрҙәштәре ҡатнашты, бик ҡыҙыҡлы хәтирәләр һөйләне улар. Аҙаҡ уның ауылдашы, Ватан һуғышы ветераны Фәсхетдин ағай Илбулдин, дәртләнеп китеп, тарихи шәхестең исемен мәңгеләштереү эшенә тотоноп ҡараны. Уның Ырымбур өлкәһе етәкселәренә, Ҡыуандыҡ ҡалаһы етәкселәренә мөрәжәғәттәре һөҙөмтәһеҙ тамамланып ҡуйҙы.

Мөхәмәтхан Ҡулаев — тейешле дәрәжәгә күтәрергә хаҡлы шәхесебеҙ. Сәйәси эшмәкәрлеген иҫәпкә алмағанда ла, башҡорт өсөн алфавит, дәреслектәр төҙөп, халҡының аң-белемгә күҙен асырға тырышҡаны, күпме көсөн сарыф иткәне өсөн генә быға лайыҡ ул. Уның беренсе автономиябыҙҙы төҙөүгә килешеүгә ҡул ҡуйыуын иҫәпкә алып, Өфөбөҙҙөң бер яңы урамына исемен биреп мәңгеләштереү һис тә яҙыҡ булмаҫ ине. Быға иманым камил.